ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

1-7 май (һабанай)

2021

№ 18 (956)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Халыҡ һәм тәбиғәт талабы**



4

**Ҡайҙа тыуғанмын, шунда кәрәкле булып йәшәйем...**



8-9

**Әҙәм ышанмаҫлыҡ сәйәхәт**



11

**Милли ризыҡтарҙа - йәншишмә тәме**



12-13

**ТВ-программа** 14


***Мөхтәрәм йәмәғәт! Быйылғы йылдың икенсе яртыһы өсөн ПР905 индекслы аҙналыҡ "Киске Өфө" гәзитенә яҙылыу дауам итә. Хаҡы - 705 һум 12 тин. Был миҙгелдә лә гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер матур ғына китаптарға лайыҡ буласаҡ. Почтальондар ҙа бүләкһеҙ ҡалмаясаҡ. Гәзит уҡыусыларыбыҙ "Киске Өфө" - бүләгем" акцияһына ҡушылып, баҫмабыҙҙы туғандарына, атай-әсәйҙәренә, мәктәптәргә, мәсеттәргә, дуҫтарына яҙҙырып бүләк итә ала.***

***Мөхәрририәт.***

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

### *Һуңғы осорҙа йыш ҡына теге йәки был өлкәлә белгестәр етмәй тигән фекерҙәр ишетелеп ҡала. Шул уҡ ваҡытта эш юҡ тигәндәр ҙә осрай. Ә һеҙ эшһеҙлек проблемаһы менән осрашҡанығыҙ бармы?*

***Эльза ХӨСНУЛЛИНА, Көйөргәҙе районы:*** Һөнәрем буйынса юғары белемле урыҫ теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһымын. Дәртем дә, дарманым да бар тигән һымаҡ, белемем дә, эшләргә теләгем дә бар ине. Тик эш урыны ғына булманы.

Ҡулайлаштырыу тигән булып, гөрләп торған мәктәпте япҡас, бөтә коллектив менән эшһеҙ торҙоҡ та ҡалдыҡ. Артта ҡалған белем усағы ла түгел ине, балалар һаны ла етерлек. Киләсәге юҡ, йәнәһе лә... Ауылға ныҡлап төпләнеп өлгөрһәк тә, мал-тыуарҙы бөтөрөп, ҡуртымға фатир алып, ҡалаға күсергә тура килде.

Бында ла бер кем дә минең яратҡан һөнәрем буйынса эш әҙерләп ҡуймағайны. Декрет ялында булған филологтың урынына ғына алғайнылар. Унынһы түләүҙәргә аҡса етмәй тиеп, йәше лә тулмаған балаһын имеҙеүҙән ташлатып, әсәһенә ҡалдырҙы ла, эшкә сыҡты. Шулай итеп, уҡыу йылы уртаһында тағы эшһеҙ ҡалдым. Шаҡымаған ишек, бармаған ойошма ҡалманы. Кем генә булып эшләмәнем икән? Хәҙер иҫләге лә килмәй. Ғөмүмән, тормошомдағы был осорҙо хәтерләргә яратмайым. Подъезда иҙән дә йыуҙым, һатыусы ла, тауар тәрәүсе лә булып эшләнем. Түшәктә ятҡан оло ҡатынды ла ҡараным. Иремә лә ошо уҡ юлды үтергә тура килде. Башҡаса сарабыҙ юҡ ине, сөнки бер түгел, ике баланы уҡытып сығарырға кәрәк. Мин эшһеҙ ҡалған йыл алдынан ғына Өфөнөң юғары уҡыу йорттарының береһенә уҡырға ингәйнеләр. Үҙ көстәре менән бюджет нигеҙендә уҡыһалар ҙа, юлына, йәшәүенә, кейемгә ике балаға бик күп китә бит. Түләүһеҙ тип атала ғына бит ул хәҙер, ә барыбер бөтәһенә лә аҡса кәрәк.

Хәҙер, шөкөр, ул ауыр йылдар артта ҡалды, улдарыбыҙ икеһе лә һөнәре буйынса эшләп йөрөй. Ирем менән ошо балаларҙы аяҡҡа баҫтырыр өсөн бурысҡа батып, икенсе һөнәргә уҡып, Мәскәүгә сығып киттек. Бына һигеҙ йыл инде икебеҙ ҙә илебеҙ баш ҡалаһында да һаҡ ойошмаһында эшләйбеҙ. Күмертауҙан фатир алдыҡ, бер нисә йыл буш торған ауылдағы йортобоҙҙо ла матурлап ремонтлап, ҡара яҙҙан көҙгә тиклем шунда йәшәйбеҙ, ҡышын - ҡалала. Ипотекабыҙ, кредитыбыҙ юҡ, көнитмешебеҙ матур. Икмәк менән ҡоро сәй генә эсеп ултырған ваҡыттарҙы иҫкә төшөрмәҫкә тырышабыҙ.

Һуңғы йылдарҙа ирем менән сменалар тура килмәүе генә ҡыйын, беребеҙ ҡайта, икенсебеҙ китә, өсәр-дүртәр ай күрешмәгән ваҡыттар ҙа бар. Ярай, беҙ йәшәгәнен йәшәгәнбеҙ, ауырлыҡта һыналып, кем әйтмешләй, бер бот тоҙҙо ла ашағанбыҙ, бер-беребеҙгә ышанабыҙ, беләбеҙ, тигәндәй. Ә кемдер ошолай айырым йәшәүгә сыҙамаҫҡа ла мөмкин бит...

Күптән түгел интернетта Башҡортостанда сауҙа өлкәһе белгестәре, эшселәр, тәҙәүселәр етмәүе тураһында уҡығайным. Мин эш эҙләгән осорҙа ла кәрәк ине улар. Тик унда барып эшләп ҡараһаң ғына ни өсөн был өлкәлә эшләргә теләмәгәндәрен аңлайһың - эше ауыр, әммә эш хаҡы бик аҙ. Бына шулай, дәртләнеп кенә уҡытып йөрөгән урындан дүрт йылда унлаған эш урынын алмаштырып, һаҡсы булып киттем...

## БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# БАЙРАМ МЕНӘН!

**1 майҙың башҡа бер көндә лә булмағанса үҙ йәме, үҙ романтикаһы бар. Күрәһең, яҙ айы булғанға шулайҙыр. Совет осоронда "Хеҙмәтсәндәрҙең теләктәшлек көнө" тип аталды ул көндәге байрам, 1992 йылдан башлап "Яҙ һәм Хеҙмәт байрамы" тип үткәрелә.**




Байрамдың "яҙ" тигән өлөшө аңлашыла, ә бына "хеҙмәт" тигәне барыбер ҙә уйға һала. Ни өсөн тигәндә, "намыҫлы хеҙмәт", "хеҙмәт етештереүсәнлеге", "хеҙмәт сәме" тигән төшөнсәләр шул уҡ совет дәүерендә тороп ҡалманымы ни? Ҡасандыр, 1886 йылдың 1 майында Американың хеҙмәт федерацияһы, анархистар һәм эшселәр хоҡуҡтарын яҡлаусылар, 15 сәғәтлек эш көнөн һигеҙгә ҡалдырыуҙы талап итеп, дөйөм милли забастовка иғлан итә. Һөҙөмтәлә 1886 йылдың июлендә Парижда II Интернационал конгресы 1 майҙы эш көнөн һигеҙ сәғәтлек итеү өсөн "Халыҡ-ара көрәш көнө" тип атарға ҡарар итә. Ә беҙҙең ил граждандарының эш урыны менән тәьмин ителеүенә ниндәй гарантия бар? Эш урыны булмаған кеше был көндө урамға йә паркҡа сығып, нимә өсөн ҡыуанырға тейеш? Әгәр ҙә ил гражданының эш урыны юҡ икән, был байрамдың хеҙмәт менән ниндәй бәйләнеше бар ҙа, ниңә ул байрам "Яҙ һәм Хеҙмәт байрамы" тип атала? Мода өсөн генәме?

Шулай булыуға ҡарамаҫтан, ҡыҙыҡ ул беҙҙең ил халҡы. Эш урыны булмаһа ла, йә иһә ер аяғы ер башына барып, вахта ысулы менән хеҙмәт итһә лә, ошо көндө урамға сыға, таныштарын күреп йылмая, һөйләшә, байрам итә. Ошондай менталитетлы оптимист хеҙмәтсәндәре булған илде бер кем дә теҙ сүктерә алмаясаҡ! Валлаһи!

Нисек кенә булмаһын, байрам менән! Яҙ һәм Хеҙмәт байрамы менән!

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

12+

✓ ***Элек гөрләп эшләп торған завод-фабрикаларҙың күбеһе ябылды ғына түгел, емерелде бит. Мәләүез ҡалаһында, мәҫәлән, 5800 кеше эшләгән химия заводында эш урыны хәҙер меңдән дә кәмерәк.***



## БЫЛ АЙҘА...

**Яҙҙы йәй менән тоташтырыусы, йылдың иң сағыу, йәмле айы - һабанай килә! Бар тәбиғәт йоҡонан уяна, тирә-яҡ күҙ эйәрмәҫ тиҙлек менән йәшеллеккә төрөнә. Ер өҫтөн алағарайҙа уҡ ҡар аҫтында шытып ятҡан йәшел хәтфә ҡаплай, иртә яҙҙан бөрөгә тирткән ағас һәм ҡыуаҡтар япраҡ яра. Тәүге саф йәшеллек - күҙҙәргә шифа. Яҙ быйыл иртә килде. Халыҡ телендә, майһыҙ ҡар бөтмәҫ, тиһәләр ҙә быйыл апрель уңған егеттәрсә йәһәтләп, ҡунаҡ ҡаршыларға йыйынғандай, март һалып киткән бейек көрттәрҙе бик тиҙ "көрәп" юҡҡа сығарҙы. Ысынлап та, мосолман донъяһында олуғ ваҡиға - Ураҙа башланды, тик алағарай ахырында йәйгесә йылы көндәр ямғырлы һалҡындар менән алышынды.**

# МАЙ ҺАЛҠЫН КИЛҺӘ...

## игенгә туҡлыҡ булыр

Сиратта - һабанай. Нисек булыр ул быйыл? Халыҡ һынамышы майҙың һалҡынсараҡ килеүен маҡтай - игенгә туҡлыҡ булыр, себенгә юҡлыҡ булыр, ти. Ә инде ямғыр күп яуһа, арыш уңыр, тиҙәр. Исеме үк әйтеп тороуынса, һабанай сәсеү мәле тип ҡаралһа ла, йылына ҡарап, бындай ауыл хужалығы эштәре, сәсеү кампанияһы алағарай урталарында уҡ башлана, сөнки был мәлдәрҙә ер дымға туйынған була. Быйыл метеорологтар күҙаллауынса, һабанай ҡороҡ килмәксе, ләкин бөртөклөләрҙән тыш, башҡа ауыл хужалығы культуралары - йәшелсә, картуф, сөгөлдөр сәсеү, баҡсасылар хеҙмәте май айында ҡыҙа ғына әле.

Ысын булһа, майҙа уртаса һауа температураһы 10-15 градус йылы буласаҡ, ти синоптиктар. Был ай күпте күргән йөҙйәшәр дата - **1 Май байрамы** - Хеҙмәтсәндәрҙең халыҡ-ара теләктәшлек көнө **(1)** менән башлана. Тарихта тәү тапҡыр 1886 йылдың ошо көнө АҠШ-тың Чикаго ҡалаһы эшселәре эш көнөн 15 сәғәттән 8 сәғәткәсә ҡыҫҡартыуҙы талап итеп, демонстрацияға сыға, ләкин был тыныс акция властар тарафынан аяуһыҙ баҫтырыла, эшсе халыҡҡа ҡаршы ут асыла. Күптәр һәләк була, яралана. Ошо фажиғәле хәл иҫтәлегенә II Интернационал 1 Майҙы эшселәрҙең теләктәшлеге көнө тип иғлан итә һәм күп илдәр халыҡтары йыл һайын был көндө үҙҙәренең хеҙмәткә, лайыҡлы эш хаҡына хоҡуҡтарын яҡлап, урамдарға сыға. СССР-ҙа ул Октябрь революцияһынан һуң рәсми билдәләнә башлай һәм байрам тантана рәүешендә үткәрелә, хеҙмәткә дан йырлана. Эйе, ул замандарҙа һәр кемдең - эше, эше булғас, ашы ла бар, күңелдәр көр ине. Заманалар үҙгәреп тора. 1992 йылда Хеҙмәтсәндәрҙең халыҡ-ара теләктәшлек көнө Яҙ һәм хеҙмәт байрамы тип үҙгәртелә.

Тыныслыҡ, Май, Хеҙмәт был байрам тантанаһының төп төшөнсәләре ине. Тора-бара шул лозунгынан тыныслыҡ һүҙе төшөп ҡалды. Хеҙмәтсәндәрҙең халыҡ-ара теләктәшлеге лә буш һүҙҙәргә әйләнде. Һәр ил үҙ эсенә бикләнде, һәр илдең эшсе халыҡтары үҙ йүндәрен үҙҙәре күрә, эш һәм хеҙмәтенә лайыҡлы түләү талап итә. Тарих ironияһымы был - тап шул көндәрҙән алып илебеҙҙә лә хеҙмәт кәйеф көрлөгө һәм байрам булыуынан туҡтаны: күп кеше эшһеҙ тороп ҡалды. Бөгөн иһә был байрам үҙенең сәйәси йөкмәткеһен юғалтып, әллә баҡсасылар көнөнә, әллә тәбиғәткә сығып ял итеүселәрҙең пикник көнөнә әүерелде - аңламаҫһың... Һәр хәлдә, халыҡ беҙҙә **1 Май** көндәрен оҙайлы ялы өсөн көтөп ала бөгөн. Эше булған кеше урамға ла, урманға ла сығып байрам итер, ләкин илдәге 4 миллионға яҡын эшһеҙ кешелә байрам ҡайғыһы юҡтыр...

Уның ҡарауы, бәхеткә күрә, бөйөк **Еңеү көнө (9)** - бөтөн халыҡ байрамы, уртаҡ тантана ул. Байрам форматының яңыртылып, төрләндерелеүе, мәҫәлән, "Үлемһеҙ полк" халыҡ акцияһы хәтерҙәрҙе яңыртты, был көндө һәр кем күңеленә тағы ла нығыраҡ яҡынайтты һәм ҡәҙерле итте. Быйыл да матур һәм күп кеше ҡатнашлығында гөрләп үтер Еңеү байрамы.

Байрамдар килә лә китә, ә бына хеҙмәт, эш темаһы май календарының ахырынаса дауам итә, сөнки мәшғүллек, эш урындары булдырыу мәсьәләһе бөгөн айырыуса көсөргәнешле проблема тыуҙыра. Эшһеҙлектән яҡлау көнө **(21)** илдә эшһеҙлек мәсьәләһенә

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***Һуңғы осорҙа йыш ҡына теге йәки был өлкәлә белгестәр етмәй тигән фекерҙәр ишетелеп ҡала. Шул уҡ ваҡытта эш юҡ тигәндәр ҙә осрай. Ә һеҙ эшһеҙлек проблемаһы менән осрашҡанығыҙ бармы?***

***Әмир ХӘЛИТОВ, Мәләүез ҡалаһы:*** Эшһеҙлек темаһы ҡайһы саҡта яһалма рәүештә күтәрелгән кеүек тойола. Эйе, эйе, ысынлап та шулай. Рәсәй дәүләте яңы иҡтисади юлға баҫҡанға өс тиҫтәнән ашыу йыл үтеп китте. Әммә эшһеҙлек кәмеү генә түгел, көндән-көн арта ғына бара. Ил Президенты сығыштарында ла был тема ситләтеп үтелмәй. Шулай инде, элек гөрләп эшләп торған завод-фабрикаларҙың күбеһе ябылды ғына түгел, емерелде бит. Мәләүез ҡалаһында, мәҫәлән, 5800 кеше эшләгән химия заводында эш урыны хәҙер меңдән дә кәмерәк. Бынан ике йыл элек шәкәр заводы ла эшенән туҡтаны. Башҡа эшҡәртеүсе предприятиелар ҙа теге йәки был сәбәптән юҡҡа сыҡты.

Шул уҡ ваҡытта магазин кәштәләрендә башҡа төбәктәрҙә етештерелгән продукциялар күпләп урын алған. Уларҙың сифаты тураһында ҡапыл ғына фекер йөрөтөп тә булмай. Ризыҡ сифатын уны ҡабып ҡарағас ҡына аңлайһың, ләкин ниндәйҙер дәғүә белдереү һуң була - төрөлгән материал асылған, продукция етештереүсе йыраҡта, бик йыраҡта.

Башҡортостан һөт етештереү күләме буйынса илдә тәүге урындарҙы биләй, ә магазинға инһәң, үҙебеҙҙә етештерелгәнен осратыуы бик ҡыйын. Осратһаң да, хаҡы тешләшә. Әйтәйек, Мәләүез һөт-консерва комбинатында етештерелгән ҡаймаҡтың банкаһы 46 һум тора, ә Яр Саллынан килтерелгәне - 32 һум. Беҙ бөтә район-ҡалабыҙ менән күршеләребеҙҙә эшһеҙлек булмаһын тип тырышабыҙ, сөнки уларҙың фермерҙары продукцияһы магазин кәштәләрендә аҙна буйы ятып боҙолмай, ҡаймаҡ-май етештереүсе предприятиеның келәттәре лә тулып ятмай. Бөтә халыҡ эш менән мәшғүл. Бына ошондай тиҫтәләгән ауыл хужалығы, сәнәғәт предприятиеһы эшен дөрөҫ ойоштормауҙан башлана ла инде эшһеҙлек проблемаһы.

Ҡасандыр ҡалала тирә-яҡта билдәле икмәк комбинаты бар ине, уның продукцияһын Мәскәү, Санкт-Петербург ҡалалары сауҙа нөктәләре ҙур теләк менән һатып ала ине. Предприятиеның Нөгөш һыуһаҡлағысында бик матур ял базаһына ҡыҙығып, конкуренттары уны банкрот яһаны, быны яҡшы аңлаған етәкселек проблеманы күрмәмешкә һалышты. Һөҙөмтәлә комбинат юҡҡа сыҡты, ә икмәкте Стәрлетамаҡ, Өфө ҡалаларынан ташыйҙар, урында унға яҡын ваҡ пекарня бешерә. Ә тиҫтәләгән йыл тәжрибә йыйған эшселәр эшһеҙ йөрөй. Ситтән ҡарағанда ғына эшһеҙ ҡалыу хаҡында фекер йөрөтөү еңел, ә бына был "тирегә инеп" ултырыусыға көнләшмәйем. Ярар ҙа тәүге осорҙа һине ашатып торорусы атай-әсәйең, йә иһә хәлле ғаиләң булһа. Ә булмаһа? Артында ипотекаң, балалар баҡсаһына һәм башҡа түләү торһа, ни эшләрһең?

Хәҙер юғары уҡыу йорттары аҙым һаны һайын иҡтисадсылар, идарасылар әҙерләй, ә эшһеҙлек проблемаһы бер көнгә лә кәмемәй. Минеңсә, етәксе вазифаһын биләр алдынан кандидатҡа, берәр йыл эш бирмәй, төрлө контора буйлап эш эҙләтергә, аҡсаһыҙ бер арауыҡ осор йәшәтеп ҡарарға кәрәктер. Заманында минең үҙемә был юлды үтергә тура килде. Бер хеҙмәттәшемдең алдап ошаҡлауы арҡаһында эштән киттем. Беҙ ҡапсыҡта ятмай, тигән кеүек, алдаҡ ярты йылдан асыҡланды. Элекке хеҙмәттәштәрем осрағанда күҙемә тура ҡарамаҫҡа тырышты. Эш эҙләп, күп предприятие тупһаһын тапаным, минең даным үҙемдән алда йөрөнө. Кисен барып һөйләшәһең, иртән йә вакансия юҡ, йә ғаризаға юғарыраҡ вазифа биләгәндәр ҡул ҡуймаған булып сыға. Быны ишеткәс, өҫтөңә бысраҡ һыу һипкән кеүек була ине. Ярар әле, атай-әсәй бер нисә ай ҡараны. Ә бит минең ҡарамаҡта - йәш балалы ғаилә. Ул саҡта эшһеҙҙәрҙе теркәп, пособие тараҡҡан ойошма ла юҡ ине. Сараһыҙҙан стенаға менерҙәй булһаң да эш табып булманы. Көндәрҙең береһендә юлыҡтым шундай мәрхәмәтле кешегә: ул эш урыны ғына биреп ҡалманы, медицина тикшереүе үтеүҙә булышлыҡ итте. Ошо предприятиела ҙур хеҙмәт юлы үттем, белемем еткән, тәжрибәм булған вазифаларҙы биләнем. Бер ваҡытта ла ҡул аҫтындағыларҙы эшһеҙ ҡалдырырға тырышманым, сөнки эшһеҙ булыуҙы үҙ елкәмдә татып ҡараным.

Етәксе вазифаһын биләүем элекке эш урынында ла ишетелгән икән, теге алдап ошаҡлаған белгес бер көндө эш һорап килде. Белгес булараҡ, уны ихтирам итә инем, ләкин алдаҡсыларҙы, ике йөҙлөләрҙе ғәфү итә алмайым. Был турала асыҡтан-асыҡ әйтеп сығарҙым. Ғәфү үтенмәне, хушлашмай ҙа сығып китте. Тимәк, эшһеҙлектең нимә икәнен әле татып ҡарамаған булғандыр...

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостанда коронавирустан вакцина яһатҡандар өсөн отличие билдәһе биреләсәк. Республиканың һаулыҡ һаҡлау министры Максим Забелин хәбәр итеүенсә, бөгөнгә республикала 144 282 кеше коронавирустан иммунизацияны тулыһынса тамамлаған, был килтерелгән вакцинаның 49 проценты. Шулай уҡ министр байрам көндәрендә барлыҡ вакциналау пункттарының ялһыҙ эшләйәсәген әйтте.

✓Быйыл Башҡортостан аграрийҙарына 2 миллион 14 мең гектар ерҙә яҙғы культуралар сәсергә кәрәк. Ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов быйыл бөртөклө культураларҙы төрлө ваҡытта (иртә, урта һәм һуң) сәсеүҙәре тураһында һөйләне. Был һауа шарттары йоғонтоһо һөҙөмтәһендә шытымдарҙың һәләк булыу хәүефен кәметеү өсөн кәрәк. Бөгөнгә яҙғы сәсеүҙә 23 район ҡатнаша.

✓Рәсәй Президенты Владимир Путин Роспотребнадзор етәксеһе Анна Попованың май байрамдары араһында эшләмәҫкә тигән тәҡдимен хупланы. Шулай итеп, 1-10 май ял көндәре тип иғлан ителә. 11 май - тәүге эш көнө. Рәсәйҙең юғары уҡыу йорттары студенттары шулай уҡ 1 майҙан 10-ына тиклем өҫтәмә каникулға сығыуы мөмкин.

✓Республикала йомғаҡлау иншаһы (изложение) яҙыу көнө үҙгәрҙе. Был этап мәктәптәрҙә дәүләт йомғаҡлау аттестацияһында ҡатнашырға мөмкинлек бирә, шулай уҡ юғары уҡыу йорттарында бакалавриат һәм специалитет программалары буйынса уҡырға ингәндә ҡулланыла. Башҡортостандың Мәғариф һәм фән министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, 2021 йылдың 5 майына билдәләнгән йомғаҡлау иншаһын яҙыу 2021 йылдың 12 майында ойошторола.

✓Май каникулдарында Башҡортостан судтары нисек эшләйәсәге билдәле булды. Республика судтарының Берләшкән матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, 4-7 майҙа Башҡортостандың Юғары суды ошо көндәргә билдәләнгән эштәрҙе ҡарай. "Эштә ҡатнашыусылар суд ултырышына килә алмаған осраҡта, эште ҡарауҙы башҡа көнгә күсереүҙе йәки эште уларһыҙ ҡарауҙы һорап судҡа мөрәжәғәт итергә мөмкин", - тип белдерҙеләр матбуғат хеҙмәтендә.

✓Башҡортостанда урман янғындарына бәйле янғынға ҡаршы режим ғәмәлдә. Бөгөнгә республикала 3 067 янғын сыҡҡан, шуның 460-ы - ҡоро үләндең яныу осрағы. Утта бөтәһе 105 кешенең, шул иҫәптән алты баланың ғүмере өҙөлгән, 89-ы зыян күргән.



властар иғтибарын һәҙәмтәлерәк йүнәлтеү маҡсатында булдырылған. Билдәле булыуынса, ил Президенты В.Путин ошо йыл аҙағына тиклем хеҙмәт баҙарын 2019 йыл кимәленәсә тергеҙеү бурысын ҡуйҙы. Эш урындары булдырыу өсөн бөтөн мөмкинлектәрҙе файҙаланыу, шул иҫәптән өйҙән эшләү механизмын ҡарарға ҡушылды. Бынан тыш, Президент илдә эшһеҙлек мәсьәләһен хәл итеү маҡсатында дәүләт оборона заказын үтәй алмаусы предприятиеларҙы национализациялау ихтималлығын да ҡарауы тураһында белдерҙе. Ысынлап та, тамырынан үҙгәрештәргә тотонмай тороп, мәшғүллек мәсьәләһен хәл итеп булмаясаҡ.

Яңы эш урындары булдырыу мәсьәләһе Башҡортостанда ла иғтибар үҙәгендә. Мәҫәлән, ошо араларҙа шундай ҡыуаныслы хәбәр билдәле булды: Күгәрсен районында 1200 баш һыйыр малына иҫәпләнгән малсылыҡ комплексы асыласаҡ. Унда малсылар, һауыу операторҙары, быҙау ҡараусылар һәм башҡа һөнәр эйәләре кәрәк буласаҡ. Бынан тыш, комплекста ҡатнаш аҙыҡ етештереүсе завод эшләйәсәк. Әйткәндәй, эш урындары булдырыуҙа шәхси эшҡыуарҙарҙың да роле ҙур. Эшҡыуарҙар көнө **(26)** айҡанлы уларға енелдән булмаған хеҙмәттәрендә уңышлар теләргә генә ҡала. Әлеге ваҡытҡа илдә 3,3 миллиондан ашыу эшҡыуар, 2,4 млн юридик шәхес һәм 1,5 млн үҙмәшғүл теркәлгән. Аяҡҡа баҫып, уңышлы эшләп киткән эшҡыуарҙар байтаҡ илдә. Шул уҡ ваҡытта был шәхси структураларҙың байтағы коррупция ҡыҫымына дусар ителә, контроль органдарҙың саманан тыш көйләү-күрһәтмә алымдарынан ныҡ ҡаҡшай. Өҫтәүенә, ҡайһы бер контроль органдар эшҡыуарҙарҙың үҙ аҡсаларын ҡулланыуға сығарғанда һалым түләмәүен һылтау итеп, киләсәктә был системаны бөтөрөү ниәте менән теш ҡайрай. Йәнәһе лә, эшҡыуарлыҡты бөтөрөп, улар халыҡ-ара стандартҡа тинләшмәксе икән, сит илдәрҙә бит фәҡәт юридик шәхестәр менән үҙмәшғүлдәр генә эшләй, имеш...

Шулай инде, беҙҙә бит һәр ваҡыт үҙебеҙсә, рәсәйсә йәшәргә түгел, ә "үрмәксенән күрмәксе" принцибы буйынса, ситтәргә ҡарап йәшәргә һәм "үҙгәрергә", нисек тә ситтәргә яраҡлашырға күнгәндәр. Ә беҙ, ябай халыҡ, үҙ асылыбыҙға тоғро ҡалайыҡ, үҙ йәҙәбеҙҙә һаҡлайыҡ, сабыр булайыҡ, бер-беребеҙгә изгелектәр ҡылырға ашығайыҡ: Рамаҙан - игелектәрҙе ишәйтә торған айҙа айырыуса. Бәйғәмбәребеҙ әйткән: "Рамаҙандың тәүге ун көнө - рәхмәт, урталағы ун көнө - мәғфирәт, һуңғы ун көнө - уттан ҡотолоу көндәре", - тип. Ошо ҡәҙерле кистәрҙең береһендә Бәйғәмбәребеҙгә Ҡөрьән аяттары индерелә башлай. "Уны, йәки Ҡөрьәнде беҙ Ҡәҙер кисендә индерҙек",- тиелә аяттарҙа. Ҡәҙер кисе **(8-нән 9-на ҡарай кис)** Рамаҙан айы ахыры - Ураҙа байрам **(13)** алдынан көтөлә. Ҡәҙер кисе меӊ айҙан яҡшыраҡ, тип иҫәпләнә. Был олуғ байрамдарҙы таҙа намыҫ, керһеҙ күңел, изге ғәмәлдәребеҙ үә Аллаһу ризалығына хәйер-доғаларыбыҙ менән лайыҡлы ҡаршылайыҡ, мосолман ҡәрҙәштәр!

**Һабанай юбилярҙары:**

**3 -** М. Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры актрисаһы, Рәсәйҙең - атҡаҙанған, Башҡортостандың халыҡ артисы **Илһөйәр Ғәзетдиноваға - 70 йәш** (1951).

**6 -** шағирә, РФ һәм БР Яҙыусылар берлеге ағзаһы **Сулпан Миңлебаеваға - 60 йәш** (1961).

**11 -** актер, режиссер, Өфө "Нур" татар театрының баш режиссеры, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы, Ш.Бабич премияһы лауреаты **Азат Йыһаншинға - 50 йәш** (1971).

**25 -** яҙыусы, журналист **Мөкәрәмә Садиҡоваға - 90 йәш** (1931).

**26 -** композитор, пианист, педагог, З.Исмәғилов исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институты профессоры, БР Композиторҙар берлеге рәйесе, Башҡортостандың халыҡ артисы **Ләйлә Исмәғиловаға - 75 йәш** (1946).

**27 -** педагог, З. Исмәғилов исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институты профессоры, Башҡортостанда вокал мәктәбенә нигеҙ һалыусы, Рәсәй һәм Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, II дәрәжә "Ватан алдындағы ҡаҙаныштары өсөн" ордены кавалеры, Өфө ҡалаһының почетлы гражданы **Миләүшә Мортазинаға - 95 йәш** (1926).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

**?**

***Һуңғы осорҙа йыш ҡына теге йәки был өлкәлә белгестәр етмәй тигән фекерҙәр ишетелеп ҡала. Шул уҡ ваҡытта эш юҡ тигәндәр ҙә осрай. Ә һеҙ эшһеҙлек проблемаһы менән осрашҡанығыҙ бармы?***

***Ләйсән ТОЛОМҒУЖИНА, Ейәнсура районы:*** Республикабыҙ үҫкән, бөтә өлкәләргә лә яңы технологиялар индерелгән һайын, яңы һөнәрҙәр ҙә барлыҡҡа килде. Ниндәй генәләре юҡ хәҙер. Шул уҡ ваҡытта төбәктә эшһеҙлек проблемаһы ла бөгөн иң көнүҙәк мәсьәләләрҙең береһе булып тора. Мин быны мәшғүллек үҙәктәрендә күпме кеше иҫәптә тороуына ҡарап ҡына әйтмәйем. Ә республика халҡының күпләп ситтә эшләүенән сығып әйтәм. Үҙемдең Баймаҡ районында йәшәгән яҡын туғандарымдың барыһы ла тиерлек Сорғот, Уренгой, Төмән, Мәскәү тарафтарында эшләй.

Мин дә, тиҫтерҙәремдең күбеһе кеүек, юғары уҡыу йорто дипломын алғас, үҙем һайлаған һөнәрем буйынса эшләмәй, башҡа өлкәнә һайланым. Социаль педагог булып, баш ҡалала бер йыл эшләгән осорҙа өҫтәмә бер йүнле кейем дә алып кейә алманым. Юлға, ашауға ғына етә ине аҡсам, ә фатирға түләргә атай-әсәйҙән алам. Бер йыл эшләгәндән һуң, был белем биреү ойошмаһынан китеп, икенсе эш эҙләнем. Үҙемдә эшкинмәгән, бер кемгә лә кәрәкмәгән итеп тойоу шул тиклем ауыр ине миңә. Вакантлы урындар бөтөнләй юҡ ине тип әйтә алмайым, әлбиттә. Бар ул, тик эш хаҡы - тауыҡ көлкөһө генә. Шәхси предприятиеларҙа үҙ кеҫәһен генә ҡайғыртталар, вәғәҙә иткәнен түләмәйҙәр, ҡайҙа мөрәжәғәт итергә, ярҙам һорарға? Үҙ хоҡуҡтарыбыҙҙы тулыһынса белмәү сәбәпле, кәмһетелеүгә, түбәнһетелеүгә лә дусар булырға тура килде.

Шулай йөрөй торғас, парикмахерға уҡып сығып, апайыма эйәреп, Себер тарафтарына сығып киттем. Шунда икенсе яртымды осраттым, ул сығышы менән Ейәнсуранан ине. Вахта ысулы менән эшләй. Бер йыл дуҫлашып йөрөгәндән һуң, кейәүгә сығырға тәҡдим яһаны. Әлеге ваҡытта мин декрет ялындамын. Әммә эшкә сығырға ла күп ҡалманы. Бөгөн илдә ябай эшсе һөнәрҙәре талап ителә, ашнаҡсылар, игенселәр, тракторсылар кәрәк, тигәндәрен ишеткәнем бар. Колхоздар булмағас, улар ҡайҙа эшләргә тейеш һуң ул? Эйе, һуңғы йылдарҙа фермер хужалыҡтары ойошторop, ауылдарҙа ер алып, иген үҫтереүселәр, мал үрсетеүселәр күп. Әммә фермерҙар эш урындары булдырҙы, тигән хәбәр бик үк дөрөҫкә тап килмәй шул ҡайһы ваҡыт, сөнки кешене эшкә алып, хеҙмәт килешеүен законға ярашлы рәсмиләштермәй. Күптәр үҙенең хужалығына эсергә ятҡан, асарбаҡтар, берәҙәктәр кеүек йәшәр урыны булмаған кешеләрҙе йәлеп итергә тырыша. Хеҙмәт Кодексына ярашлы алынмағас, һалым органына ла, Пенсия фондына ла түләүҙәр күсерергә кәрәкмәй, эш хаҡы ла тейешенсә, йә иһә бөтөнләй түләнмәй. Революцияға тиклемге көнләксә хеҙмәтендәге кеүек, "ашау - байҙан, үлем - Хоҙайҙан" тип, бер ниндәй хоҡуҡһыҙ эшләй улар. Кеше рәтенсә ашатып, мунса индерер эшләтһә яҡшы ла һуң... Ә бит йоҡларға һарай мөйөшөнән урын биреп, малға бутаған бутауын ашатҡандар ҙа юҡ түгел бит.

Эйе, ныҡлап уйлап ҡараһаң, бөгөн беҙ бик ҡатмарлы осорҙа йәшәйбеҙ. Күптәр эш юҡлыҡтан нимә эшләргә белмәй, эскелеккә һалышты. Минең дуҫтарым араһында ла бар ундайҙар. Юғары белемле уҡытыусы үҙе. Мәктәп директорының ҡатынына сәғәт кәрәк тип, ярты ставкаға ҡалдырылғас, эшенән китергә мәжбүр булды. Ә тегеһеһе выслуга буйынса пенсия ла ала, йәше буйынса ла күптән хаҡлы ялда булырға тейеш. Эш стажы ҡырҡ йылдан ашыу. Сәғәтен биреп, өйҙә ятһа, йәштәргә урын булыр ине, исмаһам. Мин үҙем эшһеҙлек проблемаһы менән күҙмә-күҙ осрашҡас, хәҙер уның нисек ауыр икәнен беләм...

**Лена АБДРАХМАНОВА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Рәсәйҙең юғары уҡыу йорттарына 4 майҙан 7-һенә тиклем дистанцияһы уҡыуға күсергә рөхсәт ителде. Илдең Мәғариф һәм фән министрлығы тейешле бойороҡ сығарҙы. "Ойошма етәкселәре дистанциялы белем биреү технологияларын ҡулланып, белем биреү программаларын ғәмәлгә ашырырға хоҡуҡлы", - тиелә бойороҡ тексында.

✓Башҡортостандың Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығында 4 майҙан 7-һенә тиклем эш хаҡын түләү тәртибе тураһында һөйләнеләр. Хеҙмәткәрҙәрҙең эш хаҡы һаҡлана. Ойошмалар һәм власть органдары 1 майҙан 10-һына тиклем уларҙың эшләүен тәьмин иткән хеҙмәткәрҙәр һанын билдәләргә тейеш. Хеҙмәткәрҙәрҙе уларҙың ризалығынан тыш та эшкә йәлеп итеүҙәре мөмкин. Ошо көндәрҙә эшләгәндәргә ғәҙәттәгесә түләйҙәр, сөнки күрһәтелгән даталар барыбер байрам көндәре иҫәбенә инмәй.

✓Ҙур йылғаларҙа һыу ҡайта. Һүҙ Дим һәм Ағиҙел йылғалары тураһында бара, һыуҙың кимәле кәмей, һыу баҫҡан биләмәләр асыла. Федераль һыу ресурстары агентлығының Кама бассейны һыу идаралығынан әйтеүҙәренсә, төбәк йылғалары ташҡындың беренсе этабын үткән. Әммә тау һәм урман зоналарында һалҡынса, шуға һыу запасы күберәк. Тимәк, тау йылғаларының һыу кимәле күтәрелергә мөмкин.

✓Республика мәғариф һәм фән министрының беренсе урынбаҫары Илдар Мәүлитбирҙин 1 майҙан 10-ына тиклем Башҡортостанда мәктәптәр эшләмәйәсәген әйтте. Уҡыусыларҙы өҫтәмә каникулға ебәрәләр. Өҙлөкһеҙ эшләгән ойошмаларҙың - хоҡуҡ һаҡлау органдары, ашығыс ярҙам, коммуналь хеҙмәт хеҙмәткәрҙәре өсөн балалар баҡсаларында дежур төркөмдәр ойошторола.

✓Рәсәй Пенсия фондының Башҡортостан буйынса бүлексәһе май каникулдарында пенсия таратыу графигын хәбәр итте. Пенсия һәм башҡа социаль түләүҙәр графикка ярашлы - 3 майҙан таратыла. Яҡынлашып килгән байрам көнө - 9 май өсөн аҡса 6, 7 һәм 8 майҙа бирелә.

✓1 майҙа Өфөнөң Ленин майҙанында байрам салюты була. Былтыр 2 июлдә Владимир Путин Рәсәйҙең 20 ҡалаһына "Хеҙмәт ҡаһарманлығы ҡалаһы" тигән почетлы исем биреү тураһында указға ҡул ҡуйғайны. Был исемлектә Өфө лә бар. Законға ярашлы, ошо исемгә лайыҡ булған ҡалала 1, 9 майҙа, шулай уҡ Ҡала көнөндә асыҡ саралар һәм байрам салюттары була. Салют төнгә сәғәт 11-ҙә башлана.

***✓ Рәсәй Президенты тирә-яҡ мөхитте һаҡлауҙа ҡаты саралар ҡулланырға саҡырҙы. "Тәбиғәт иҫәбенә килем алдың икән - артыңдан йыйыштыр!" - бына шундай мөнәсәбәт булырға тейеш, тине В. Путин.***



ҠЫҪҠАСА

# БАЙРАМҒА ӘҘЕРЛӘНӘЛӘР

✓ **Йылдан-йыл республикала Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарының һаны кәмей бара. Бөгөн Башҡортостанда 22 922 ветеран һәм һуғышта һәләк булып ҡалғандарҙың ғаиләһе, шул иҫәптән 493 фронтовик, 189 һуғыш инвалиды, "Блокадалы Ленинградта йәшәүсе" билдәһе менән наградланған 84 кеше, һуғышта ҡатнашҡандарҙың 6332 тол ҡатыны, 15733 тыл хеҙмәткәре, элекке концлагерҙарҙың балиғ булмаған 91 тотҡоно йәшәй.** Башҡортостан Хөкүмәтендә Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 76 йыллығын ойоштороу һәм үткәреү буйынса республика ойоштороу комитеты ултырышы үтте. Унда Еңеү көнөн байрам итеү буйынса федераль штабтың "Үлемһеҙ полк" хәрәкәтен 24 июнгә күсереүе тураһында хәбәр ителде. Был һаманғаса һуҙылған тажзәхмәт менән зарарланыу хәүефенә бәйле. Әммә 9 Майҙа ул онлайн режимда үтәсәк һәм унда теләгән кеше ҡатнаша аласаҡ. Башҡа тантаналар ҙа санитар-эпидемиологик сараларҙы һаҡлау шарттарында үтәсәк.

✓ **Рәсәй Федерацияһы Президентының "Еңеү көнөнә ҡарата айырым категория граждандарға йыл һайын аҡсалата түләү тураһында" Указына ярашлы, 2021 йылдың апреленән 10-ар мең һум түләү тормошҡа ашырыла.** Пенсия менән бергә был түләүҙе Башҡортостандан 166 Бөйөк Ватан һуғышы инвалиды һәм 479 ҡатнашыусы аласаҡ. Бының өсөн ғариза яҙып тороу кәрәкмәй.10 мең һум Рәсәй Федерацияһы территорияһында, шулай уҡ Латвия, Литва, Эстония Республикаларында даими йәшәгән, Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан һәм инвалидлыҡҡа эйә граждандарға бирелә.

✓ **26 апрелдә "Торлаҡ һәм ҡала мөхите" милли проекты сиктәрендә "Уңайлы ҡала мөхитен булдырыу" программаһы буйынса Бөтә Рәсәй тауыш биреүе башланды.** Федераль платформала Башҡортостанда йәшәүселәр үҙҙәренең ҡала-ауылында төҙөкләндереүгә мохтаж йәмәғәт киңлектәрен һайларға мөмкин, тип хәбәр итте Республика менән идара итеү үҙәге. Иң күп тауыш йыйған объекттар киләһе йылға төҙөкләндереү өсөн биләмәләрҙең адреслы исемлегенә индерелә. Тауыш биреү 2021 йылдың 30 майына тиклем дауам итә. Бөтә һорауҙар менән Рәсәй Төҙөлөш министрлығының ҡыҙыу бәйләнеш телефонына мөрәжәғәт итергә мөмкин: 8-800-600-20-13 (бушлай һәм тәүлек әйләнәһенә).

✓ **Башҡортостан Республикаһы Ветеринария идаралығының бүлек етәксеһе Линар Йыһаншин Башҡортостанда эттәрҙе стерилләштерергә саҡырҙы: "Уларҙың һанын көйләүҙең төп ысулы - аулау, стерилләштереү һәм элекке мөхиткә сығарыу.** Хайуандар кәмемәй. Шул уҡ ваҡытта уҫал эттәрҙе генә ғүмерлеккә приютта тоторға мөмкин. Уларҙың уҫалмы, түгелме икәнен кинолог билдәләргә тейеш, сөнки ветеринарҙар хайуандарҙы дауалау менән шөғөлләнә, юғары уҡыу йорттарында психик сирҙәрҙе өйрәнмәй", - тине Йыһаншин. Ул эттәрҙе "Хайуандар тураһында милли портал"да ла теркәргә саҡырҙы, әлеге ваҡытта унда 43 мең йәнлек иҫәпләнә.Түнәрәк өҫтәлдә билдәле булыуынса, ветеринария дауаханаларында 50 процентҡа тиклем ташлама менән льготалы стерилләштереү айлығы иғлан ителгән, процедураның хаҡы 800 һум самаһы тәшкил итә.

КӨНАУАЗ

**Баймаҡ районында алтын табыусы компаниянан тәбиғәткә килтерелгән зыянды ҡаплауҙы талап итәләр. Башҡортостандағы "Таналыҡ" алтын табыу компанияһы Баймаҡ районы еренә (тупрағына) ярты миллиард һумлыҡ зыян килтергән. Был предприятие Баймаҡ районының Таналыҡ сәсмәләре алтын сығанағы участкаларын эшкәртә.**

# ХАЛЫҠ ҺӘМ ТӘБИҒӘТ ТАЛАБЫ

Баймаҡ ҡалаһы һәм районы халҡы алтын эҙләүселәрҙең эшмәкәрлегенә 2019 йылдан алып ризаһыҙлыҡ белдерә. Компания тирә-яҡ мөхиткә ҙур зыян килтерә, ти улар. "Таналыҡ" яуаплылығы сикләнгән ойошманың элекке директоры Станислав Горбатенко 2021 йылда лицензия мөҙҙәте үткәс тә эшкәртелгән ерҙәр тәртипкә килтереләсәк, тип вәғәҙә иткән, ләкин урындағы халыҡ вәғәҙәләнгән рекультивация сараларын өлөшләтә булһа ла көтөп ала алмаған. Компанияның хатта рекультивация проекты ла булмай сыҡҡан. 24 апрелдә Башҡортостан Республикаһы Премьер-министры урынбаҫары Азат Бадранов алтын табыусыларҙың тәбиғәткә ҡырағайҙарса мөнәсәбәтенә ҡаршы сығыш яһаусы урындағы халыҡ менән осрашты. Ҡаҙылма биләмәһендә өс сәғәткә яҡын барған был һөйләшеү ваҡыты менән бик ҡыҙыу төҫ алды. Район халҡы компания тарафынан тупраҡтың үңдырышлы ҡатламына төҙәтелгеһеҙ зыян килтереп кенә ҡалмауы, ә шуның һөҙөмтәһе булараҡ, Таналыҡ йылғаһының һайығыуы, хатта йүнәлеше үҙгәреүе хаҡында ла әйреп һөйләне. Баймаҡ район хакимиәте башлығы Фәнис Әминев, прокуратура органдары, Экология министрлығы, Ер аҫты байлыҡтарын файҙаланыу буйынса идаралыҡ һәм "Таналыҡ" компанияһы вәкилдәре ҡатнашҡан был осрашыуҙан һуң Хөкүмәт вице-премьеры шундай күрһәтмәләр бирҙе: алтын табыу компанияһына бер аҙна эсендә урындағы яҡлыҡтарҙы рекультивациялау проектын әҙерләү һәм эш башлау бурысы йөкмәтелә. Компания шулай уҡ урындағы халыҡты социаль яҡлау сараларында әүҙем ҡатнашлыҡ итергә һәм тәбиғәтте һаҡлау буйынса закондарҙы үтәргә бурыслы. "Экология өлкәһен көйләүсе норматив база һәм закондар өҫтәмә эшкәртеү талап итә. Ер аҫты байлыҡтарын файҙаланыусыларға йоғонто яһау механизмдары етешмәй һәм улар эшмәкәрлегенә ҡарата күрелгән саралар йыш ҡына һүнлай. Ләкин беҙҙең район йәмәғәтселеге һәм предприятие вәкилдәре менән булған был һөйләшеү күҙгә-күҙ ҡарап аралашыуҙың ҡапма-ҡаршылыҡҡа ҡарағанда һөҙөмтәлерәк икәнен күрһәтте, бындай диалог ваҡытында дөрөҫ ҡарарҙарға килергә була. Беҙ шулай уҡ предприятие эшмәкәрлегенә контроль булдырыу буйынса эшсе төркөм төҙөнөк. Әгәр район башлығы, бер яҡтан, эш урындары булдырыу кәрәклеген, икенсе яҡтан, экологияны һаҡлау бурысын аңлай һәм шуға ярашлы ваҡытында заманса саралар күрә икән, халыҡта ла ризаһыҙлыҡ тыумаясаҡ",- тине вице-премьер А.Бадранов Баймаҡ район хакимиәтендә уҙған кәңәшмәнән һуң.

Мәғлүм булыуынса, Федераль Йыйылышҡа Мөрәжәғәтнамәһендә Рәсәй Президенты Владимир Путин экологияға зыян килтереүсе предприятиеларға ҡарата финанс яуаплылығы йөкмәтеүсе закон ҡабул итеүҙе тиҙләтергә ҡушты. Рәсәй Президенты тирә-яҡ мөхитте һаҡлауҙа ҡаты саралар ҡулланырға саҡырҙы. "Тәбиғәт иҫәбенә килем алдың икән - артыңдан йыйыштыр!" - бына шундай мөнәсәбәт булырға тейеш, тине В. Путин. Бының менән ул килем артынан ҡыуып, экология закондарын боҙоусы һәм тәбиғәткә төкөрөп ҡараусы предприятие етәкселәренә асыҡтан-асыҡ ишараланы. Әйткәндәй, былтыр Рәсәй Тәбиғәтте һаҡлауҙы күҙәтеү ведомствоһының Көньяҡ Урал төбәк-ара идаралығы прокуратура һәм Башҡортостан буйынса Федераль хәүефһеҙлек советы менән берлектә предприятиела тәбиғәтте һаҡлау буйынса закондар үтәлешен тикшерҙе. Тикшереүселәр "Таналыҡ" компанияһының Таналыҡ сәсмәләре лицензияланған участка сиктәренән ситтә лә 48 389 кв.метр майҙанда бульдозер-гидравлик ысул менән ҡаҙыныу эштәре алып барғанлығын һәм 500 млн һумлыҡ зыян килтерелгәнлеген асыҡланы. Һөҙөмтәлә предприятие һәм уның етәксеһенә ҡарата административ эш ҡуҙғатылды. "Таналыҡ" компанияһы Мәскәүҙә теркәлгән һәм уның хужаһы - Владимир Хамуляк. Башҡортостандағы тағы ике алтын табыу ойошмаһы - "Граф" һәм "Солтан" компаниялары ла уның ҡулында.

**Азат ҒИЗЗӘТУЛЛИН.**



## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфө хакимиәте башлығы Сергей Греков оператив кәңәшмәлә кадрҙар үҙгәреше тураһында хәбәр итте. Өфөнөң социаль мәсьәләләр буйынса вице-мэры итеп Башҡортостан Республикаһы Башлығының Ижтимағи-сәйәси үҫеш идаралығы начальнигы Гөлләриә Ялсыҡаева тәғәйенләнде. Ул опека һәм попечителлек, мәғариф, мәҙәниәт мәсьәләләре өсөн яуаплы. Шулай уҡ Винер Әлибаевтың мэрияның контроль идаралығы начальнигы вазифаһын биләүе билдәле булды.

✓Польшала шашка буйынса гәмәлдәге донъя чемпионы Тамара Танһыҡҡужина (Өфө, Рәсәй) һәм дәғүәсе Наталия Садовска (Варшава, Польша) араһында халыҡ-ара шашка буйынса донъя чемпионы исеме өсөн уйын бара. Әле иҫәп Польша спортсыһы файҙаһына 20:16. Матч туғыҙ раундтан тора, һәр берећендә 12-шәр мәрәй уйнатыла. Донъя тажы өсөн алыш 3 майҙа тамамлана.

✓27 майҙа Өфөлә Илдар Абдразаҡовтың IV Халыҡ-ара музыка фестивале асыла. Гала-концерт күренекле педагог, Рәсәйҙең атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, башҡорт вокал мәктәбен ойоштороусы Миләүшә Мортазинаның 95 йәшенә арнала. Гала-концертта опера сәхнәһе йондоҙҙары һәм Миләүшә Мортазина класы уҡыусылары ҡатнаша

✓Бер нисә тапҡыр "Рәсәйҙең иң көслө кешеһе" исеменә лайыҡ булған Эльбрус Ниғмәтуллин яңы рекорд ҡуйырға әҙерләнә. "Был юлы мин вертолетты өҫтәмә ултыртырға йыйынам. Был ваҡиғаның яҡынса датаһы - Башҡортостанда май-июнь айҙары", - тине Эльбрус Ниғмәтуллин. Бынан алда "стронгмэн" Өфө аэропортында 36 тонналыҡ "Боинг-737-500" самолетын урынынан ҡуҙғатты һәм уны 25 метрға һөйрәп алып барҙы. Шулай итеп, 46 йәшлек Эльбрус Ниғмәтуллин ил рекорды ҡуйҙы.

✓24 апрелдә Өфө аэропортынан Калининградҡа быйыл беренсе тура авиарейс асылды. Осоу ваҡыты - яҡынса өс сәғәт. Рейстар яҙғы-йәйге миҙгелдә, октябрь аҙағына тиклем аҙнаһына ике тапҡыр: шаршамбы һәм шәмбе көндәрендә башҡарыла. Самолет Өфөнән - киске сәғәт 8-се 15 минутта, Калининградтан иһә көндөҙгө 1-се 10 минутта (урындағы ваҡыт) сыға.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# ДИКТАНТ ЯҘҘЫҠ



**Ошо көндәрҙә Башҡорт теленән халыҡ-ара диктант акцияһы үтте. Сара етенсе тапҡыр ойошторолдо һәм Рәсәйҙең 17 төбәгендә, 12 сит илдә йәшәүсе башҡорт телен белеүселәрҙе берләштерҙе.**

Башҡорт дәүләт университетында башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү маҡсатында башланғыс алғайны был акция һәм тәүге йылда унда ни бары 3505 кеше ҡатнашҡайны. Йылдан-йыл башҡортса диктант яҙырға теләүселәр һаны артып, былтыр улар 305600-гә етте. Әлбиттә, бында диктантты өс категорияға бүлеп ойоштороу ҙа ҙур роль уйнаны. Шулай уҡ бөтә мәғариф учреждениеларының әүҙем ҡатнашыуы, Башҡортостан юлдаш телевидениеһында тура эфирҙа диктант тексын уҡыу ҙа ҡатнашыусылар һанын бермә-бер арттырҙы. Быйыл да диктант офлайн форматта бөтә мәғариф учреждениелары, дәүләт структуралары, китапхана, музей, йәмәғәт ойошмалары штабтарында үтте, онлайн уны телевизорҙан ҡарап та, сайтта 26 апрелгә тиклем урынлаштырылған видеояҙманы тыңлап та яҙып булды. Дөйөм халыҡ өсөн Башҡортостан юлдаш телевидениеһында диктантты Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Президиумы рәйесе Эльвира Айытҡолова, "Бүреләр" рок-төркөмө солисы Илшат Абдуллин һәм "Без башҡортлар" хәрәкәте етәксеһе, йырсы Альберт Исмаил уҡыны.

Ә бына төп ойошторпоусы - Башҡорт дәүләт университетында башҡорт телендә иркен һөйләшеүселәргә диктантты РФ Дәүләт Думаһы депутаты Зөһрә Рәхмәтуллина, башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалектында һөйләшеүселәргә БР Фәндәр Академияһы президенты Әлфис Ғаязов уҡыны. Телде башланғыс кимәлдә белеүселәр уны университеттың башҡорт филологияһы, шәрҡиәтте өйрәнеү һәм журналистика факультеты деканы Гөлфирә Абдуллина менән яҙҙы. Диктант тексына килгәндә, филология фәндәре докторы, профессор Ғайса Хөсәйенов һәм "Ағиҙел" журналының бүлек мөхәррире Гөлнара Хәлфетдинова иждаһынан өҙөк тәҡдим ителде. "Ваҡыт табып, бөгөн был аудиторияларға йыйылыуығыҙ өсөн оло рәхмәтемде белдерәм. Өфөлә йәшәүселәр генә түгел, республиканың төрлө райондарынан да беҙҙең 400-гә яҡын кеше һыйған өс аудиторияны тултырып килгәнһегеҙ. Әлбиттә, туған телебеҙҙе һаҡлау һәм үҫтереүҙә сит илдәр ярҙам итмәйәсәк. Быны тик урыда, үҙебеҙ генә эшләй алабыҙ һәм БДУ был йәһәттән алдынғылар рәтендә: профессорҙарыбыҙ ҙа етерлек, берҙән-бер Диссертация советы ла - беҙҙә, йәш белгестәр әҙерләйбеҙ", - тине БДУ ректоры Николай Морозкин йыйылған халыҡты тәбрикләп. Әйткәндәй, ул үҙе лә йыл да акцияға ҡушыла һәм диктант яҙыуҙан ситтә ҡалғаны юҡ.

Башҡорт теленән халыҡ-ара диктант һөҙөмтәләрен бер ай дауамында bashdiktant.ru сайтында урынлаштырасаҡтар.

**Камила ҒӘЛИЕВА.**

ИҪКӘРТЕҮ

# БИТЛЕКТӘРҘЕ ТАШЛАМАЙЫҠ!



**Бәғзе бер ауылдарҙа клубтарҙа, элекке һымаҡ иркенләп, йыйын йыйып, һәр төрлө саралар ҙа үткәрә башланылар. "Пандемия сигенеп бара", йәнәһе...**

Урыҫта "Соҡорҙо аша һикереп сыҡмай тороп, "Һоп!" тип әйтергә ашыҡма!" тигән әйтем йөрөй. Үҙемә "Спутник - V" тигән вакцинаны яһатыуыма ҡарамаҫтан, ошо юҫыҡта яҡташтарымды мотлаҡ иҫкәртеүҙе кәрәк тип һанайым. Бынан 3-4 ай тирәһе Рәсәй кимәлендә ковид йоҡторғандарҙың һаны көнөнә утыҙ меңгә етеп бара ине. Кәмей килә, 8 мең тирәһендә тукталып ҡалыуы (республикабыҙҙа яҡынса йөҙ алтмыш-йөҙ етмештән туҡһан тирәһенә төшөүе) әле был ҡурҡыныс вирустан ҡотолдоҡ, тип, ваҡытынан алда "нөктаны бушатырға" һылтау түгел, ҡәҙерле туғандар. Әле урамдарҙа күптәрҙең битлекһеҙ йөрөүен күрә башланыҡ. Ул ғына ла түгел, магазиндарҙа һәм һәр төрлө йыйындарҙа ла битлекте инҡар итәләр. Ә илдә инфекциянан үлгәндәр һаны көн дә әле булна 400-гә яҡын көйө торғанлығын (Башҡортостанда көн һайын кәмендә 1-3 кешененең ғүмере өҙөлә) иҫебеҙҙән сығармайыҡ! "Иртә ҡыҫҡырған кәкүктең башы ауырта", тигәндәй, битлектәребеҙҙе (айырыуса халыҡ күп йыйылған урындарҙа) сисергә ашыҡмайыҡ.

Хәҙер яҡташтарыбыҙ бер-берейһен "ауыҙ асыу" (ифтар) мәжлесенә саҡырыша башланы. Йүтәлләп, тымаулап торғандар ана шундай ҡунаҡ-мунаҡтарҙан да тыйылып торһон ине. Теге йәки был билдәле шәхестең "тажзәхмәт"тән вафат булыуы хаҡында ишеткәләп торабыҙ. Был ауырыу тик әртистәрҙе генә алып китә икән, тип уйлайҙыр бәғзеләр. Ябай кешеләр ҙә яҡты донъя менән хушлашып тора (тик уларҙың һәр береһе тураһында белмәйбеҙ). Илебеҙ башлығының "Үлемһеҙ полк" акцияһын 9-сы майҙа "онлайн" форматта үткәреү хаҡындағы күрһәтмәһе лә тигенгә түгел. Кешеләрҙең үҙҙәрен һаҡламауы был афәттең ҡабаттан көсәйеүенә килтереү ихтималлығы хаҡында илдең Баш санитар табибы ла әйткеләй. Тағы бер аҙ ғына сабырлыҡ ҡылайыҡ инде, дуҫтар. Вакциналанырға тырышайыҡ. Был бәлә лә үтеп китер ул, ин шәә Аллаһ.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ, отставкалағы хәрби табип.**

ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ

# ЯНҒЫНДАН ҺАҠЛАНЫУ...

## көн тәртибендә



**Муниципалитетта үткән сираттағы оператив кәңәшмә "Хәтер баҡсаһы" Бөтә Рәсәй акцияһында баш ҡаланың 82 майҙансығында 1700 ағас ултыртылыуы тураһындағы мәғлүмәттән башланды.**

Шулай уҡ кәңәшмәлә ҡала бюджетының тулыланыуы һәм бурыслылар тураһында ла сығыш булды. Был хаҡта хакимиәттең Финанс идаралығы начальнигы Гөлнара Вәлиева бәйән итте. 26 апрелгә ҡарата ҡала бюджетына һалым һәм һалым булмаған сығанаҡтарҙан 4 миллиард 448 миллион һум (йыллыҡ планға ҡарата 34,4 процент) килем ингән. Был - былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда 471 миллион һумға күберәк. Ҡуртым нигеҙендә эшләүселәрҙең ҡала бюджетына 95 миллион һум бурысы бар.

Бюджеттың сығым өлөшө 6 миллиард 943 миллион һум күләмендә финансланған. Иң ҙур өлөштө социаль өлкә (61,9 процент) һәм торлаҡ-коммуналь хужалыҡ менән милли иҡтисад (23,7 процент) алып тора.

Гөлнара Вәлиева муниципаль программаларҙы бюджет тураһындағы ҡарарға яраҡлаштырыу зарурлығын билдәләне. 27 апрелгә ҡарата шундай 15 программа бар һәм был Бюджет кодексын боҙоу булып тора. Программаларҙа аныҡлау булмаһа, өҫтәмә рәүештә бүленгән аҡса маҡсатҡа ярашлы түгел тип табыла һәм кире ҡайтарылырға тейеш.

Көн тәртибенә сығарылған мәсьәләләрҙең иң мөһиме булып янғын хәүефһеҙлеген тәьмин итеү торҙо. Был хаҡта Өфө ҡалаһының янғын һағы идаралығы начальнигы Шамил Тоҡомбәтов бәйән итте. Мәғлүм булыуынса, янғын хәүефе тыуҙырған яҙғы-йәйге миҙгел етеү менән янғын һағы хеҙмәте бүлексәләре профилактика эштәрен башлай. Быйыл Башҡортостан Хөкүмәте ҡарары менән бындай осор 15 апрелдән 15 октябргә тиклем дауам итә. Шамил Тоҡомбәтов белдереүенсә, янғын хәүефе янаған территориялар исемлеге төҙөлгән. Уға ауылдар (1), балаларҙың ял һәм һауыҡтырыу лагерҙарын ойоштороу территориялары (2), баҡсалар (14) инә.

Тәбиғәттәге янғын сығанаҡтарына оператив сығыу һәм уларҙы һүндереү өсөн 10 мобиль төркөм, уларҙың маршруттары билдәләнгән. Бынан тыш, 15 апрелдән алып урмандарҙы һауанан, шул иҫәптән квадрокоптер ҡулланып, тикшереү уҙғарыла. Быйыл "Торлаҡ" профилактик операцияһына ярашлы, 17 мең тикшереү ойошторолған, 104 кеше янғын хәүефһеҙлеге буйынса инструктаж үткән.

Шуны ла хәтерҙән сығарырға ярамай: Башҡортостан Республикаһы Башлығы ҡарары менән 17 апрелдән республика территорияһында янғынға ҡаршы махсус режим индерелгән. Һыуҙан ҡала, уттан ҡалмай, тиһәләр ҙә, әле һыу ҙа, ут та иң ҙур хәүеф сығанағы булып торған мәл. Һаҡ булайыҡ.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Йөрәк астмаһы

❖ Әлморон емешен йыуырға, ҡоротоп һөртөргә һәм ваҡларға. 2 ҡалаҡ ваҡланған емешкә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 10-12 сәғәт төнәтергә. Һөҙөргә һәм ирталә-кисле ашарҙан 10 минут алда ярты шар стакан эсергә.

❖ 1 ҡалаҡ киптереп ваҡланған татлы тамырға ярты литр һыу ҡойоп, талғын утта 40-45 минут ҡайнатырға. Һыуытырға, һөҙөргә, шунан 0,5 грамм мумие ҡушырға. Дауаны иртәнсәк ашарҙан ярты сәғәт алда 1 стакан эсергә.

## Ҡул быуындары һыҙлаһа

❖ 10 литрлыҡ ҡастрүлдә һыу ҡайнатып, шуға ус тирәһеләй ваҡланған кесерткәнде һалырға һәм 5 минут тотҡас, утын һүндерергә. 10-15 минут төнәткәндән һуң, төнәтмәне таҫка ҡойоп алырға. Ошо таҫка ҡулдарҙы 15 минут тығып торорға. Һыу һыуына барған һайын иплән кенә эҫеһен өҫтәй барырға. Ҡулдарҙы төнәтмәлә тотҡан көйө бөтә быуындарға еңелсә генә массаж яһарға. Тәүге ике көндә 5-7 минутлыҡ массаж кәрәк, аҙаҡ 3-5 минутлыҡ та етә. Процедура тамамланғас, ҡулдарҙы золотой ус йәки гөлйемеш төнәтмәһе (дарыухананан алырға мөмкин) менән ыуырға. Шунан бейәләй кейеп, йоҡларға ятырға. Ошо рәүешле 5-7 тапҡыр дауаланыу ҙа һөҙөмтәле, әммә кәрәк саҡта бер айҙан ҡабатларға мөмкин.

## Мигрень

❖ 1 ҡалаҡ ялан туҡранбашына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, ярты сәғәт төнәтергә, һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр ярты шар стакан эсергә.

❖ 15-20 грамм ромашка сәскәһенә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, сәй кеүек бешерергә. Бер стакан төнәтмәне өскә бүлеп, көнөнә 3 тапҡыр эсергә.

## Тартыуҙы ташлау

❖ Тәмәке тартыуҙы ташларға теләгәндә һолоноң 100 грамм бешмәгән орлогона ярты литр араҡы ҡойоп, йылы урында 7 көн төнәтергә, ваҡыты-ваҡыты менән һелкеп болғатып торорға. Төнәтмәне көнөнә 4-5 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ эсергә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✓ XIII-XIV быуаттарҙа ҡәбилә Ағиҙел йылғаһы үҙәнендә туплана. Көньяҡта башҡорт ҡырғыҙҙарының ерҙәре Ыҡ һәм Зәй йылғалары тиклем барып етә. Үҙ сығышын улар Сыңғыҙхан нәҫеленән Тонаҡ бей һәм Ҡадыҡ бейгә бәйләй.



ЙОЛАНДАН ЙӨН ТАП!



# БАШҠОРТ ТУҠЫМАҺЫ

Миәкә районы Тамъян-Таймаҫ ауылынан алынған таҫтамалда (РЭМ, кол. 6973-19) орнамент төрлө дәүмәлдәге ҡыя шаҡмаҡтарҙан тора, элементтар айырымланған, ҡыҙыл төҫтәге остара аҡ-ҡара һыҙаттар менән өскә бүленгән. Урта өлөштә (ул башҡаларына ҡарағанда бер ярымға киңерәк) үҙәктә бер -береһенә терәтеп ҡуйылған ҡыя шаҡмаҡтарҙан "һигеҙ һаны" туҡылған, уның уңында ла, һул яғында ла ике ҙур ҡыя шаҡмаҡ урынлашҡан; ҙур булмаған ҡыя шаҡмаҡтар таҫтамалдың ситендә генә үткән һыҙаттың мөйөштәрен биләй. Төрлө төҫтәге фигураларҙың эсе күп тапҡырҙар ҡабатланған ҡыя шаҡмаҡ һыҙаттарынан тора, йәки арҡыры-буй һыҙаттар ярҙамында 4 бәләкәй ҡыя шаҡмаҡҡа бүленгән. Ҙур ҡыя шаҡмаҡтарҙың сығынтылары үҙенсәлекле - ике төҫтән эшләнгән, диагональ буйынса айырымланған, тура мөйөшлө. Орнаменттың өҫкө һәм аҫҡы өлөштәрендә ҡаймаһы көкерсәкле ҡыя шаҡмаҡтан һәм аралыҡтарында һигеҙ асалы йондоҙҙан торған биҙәк һуғылған. Таҫтамал остары аҡ киндер һыҙаты менән тамамлана, унда ыҡсым ғына йондоҙҙар өсәрләп теҙелгән, был ҡайма әйберҙе айырыуса йәмләй. Ҡырмыҫҡалы районы Таҙлар ауылындағы таҫтамалдың остары (кол. 6973-17) тулыһынса төрлө төҫлө ҡыя шаҡмаҡтар менән биҙәлгән. Уларҙы өҙәк-өҙәк итеп һуғылған көкерсәктәрҙән торған тар ғына һыҙаттар өс өлөшкә бүлеп арҡыры үтә.



*Таҫтамалдағы ҡыя шаҡмаҡ орнамент (БР, Ҡырмыҫҡалы районы, Таҙлар ауылы). РЭМ. XX б. уртаһы*

Дәүләкән районы Ҡаҙанғол ауылынан алынған шаршауҙың (кол. 6973-12) урта өлөшө эсендә ҡыя шаҡмаҡҡа оҡшаш биҙәк төшөрөлгән ҙур булмаған һигеҙмөйөштәр менән бер тигеҙ генә итеп тултырылған. Ә һуҙылған ваҡ ҡыя шаҡмаҡтар киң ҡаймалағы төҫлө һыҙаттарҙы биҙәй.



*Һуғылған шаршау (БР, Дәүләкән районы, Ҡаҙанғол ауылы). РЭМ. XX б. уртаһы*

**Светлана ШИТОВА.**
**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

БАШҠОРТ ТАРИХЫ ЙЫЛЫ

# ЫРЫУ ЙЫЙЫНДАРЫ

### Таныптар таныта...

**Республикала башҡорт ырыуҙары йыйындары уҙғары дауам итә. Был юлы эстафетаны танып башҡорттары ҡабул итеп алды. Таныптар ҡәбиләһе ҡаҙансы, ҡайпан, ҡыр (Ҡара), һыу (Өфө) ырыуҙарын үҙ эсенә ала. Башҡортостандың үҙ ирке менән Рус дәүләтенә ҡушылыуынан һуң, ҡәбилә биләмәһенә ҡараған аҫаба ерҙәр Себер даруғаһының Таныптар улысын тәшкил итә, башҡорттарҙың балыҡсы, гәрә, ғәйнә, йылан, унлар, уран ырыуҙары менән күрше йәшәй.**

XVIII-XIX быуаттарҙа Бөрө һәм Уса өйәҙҙәренә, ә 1798-1854 йылдарҙа, Башҡортостанда идара итеүҙең кантон системаһы осоронда - 1-се, 5-се (артабан 10-сы, 11-се) башҡорт кантондарына ҡарай. Бөгөн таныптар башҡорттарына Асҡын районының Алъяғыш, Баҙансат, Башҡортостан, Вашъяҙы, Дәүләт, Ерекле Шишмә, Иҫке Ҡаҙансы, Иҫке Ҡара, Иҫке Мутабаш, Йырмаялан, Йәнкисәк, Ҡаракүл, Ҡарткисәк, Кубияҙ, Ҡушкүл, Ҡыйғаҙы, Ҡышлауйылға, Ҡәйүм, Мутайылға, Олойылға, Олокүл, Сат, Солтанай, Төлгәҙбаш, Төпрәле, Хәтмулла, Әбдәл, Әүәҙәй, Янауыл, Яңы Бағаҙы, Яңы Ҡаҙансы, Яңы Ҡара, Яңы Ҡарткисәк, Яңы Ҡубияҙ, Яңы Мутабаш, Яңы Шишмә, Балтас районының Имән, Иҫке Балтас, Иҫке Илекәй, Көнтүгеш, Ҡомъяҙы, Маты, Мишәр, Мөнәгәз, Тоҙлоғош, Тутағас, Тушкыр, Түбәнге Һикеяҙ, Уртайылға, Штәнде, Яңы Балтас, Яңы Тушкыр, Ҡариҙел районының Ураҙбаҡты, Бағаҙытамаҡ, Дәүләт, Иҫке Бағаҙы, Урта Бағаҙы, Тәтешле районының Асауҙы, Ауыҡ-Бүләк, Байҡыбаш, Беләш, Бүлкайпан, Бәҙрәш, Иҫке Ҡайпан, Иҫке Салдау, Иҫке Һикеяҙ, Иҫке Шарҙаҡ, Кәлтәй, Ҡарман, Ҡыҫҡыйылға, Сәүкияҙ, Танып Шишмә, Түбәнге Кәлтәй, Үрге Сәләй, Яңы Ҡайпан, Яңы Салдау, Яңы Шарҙаҡ ауылдары һәм өләшләтә Пермь крайы биләмәләре инә.

Уҙған йомала танып башҡорттарының төп ауылы булған Иҫке Балтаста оло ҡор йыйылды. Ғәҙәттәгесә, сара делегаттар һәм ҡунаҡтарҙың район мәҙәниәт һарайында ойошторолған бай күргәҙмә менән танышыуынан башланды. Унда Балтас, Тәтешле, Ҡариҙел, Асҡын райондарынан килгән таныптар ырыуы вәкилдәренең ҡул эштәре, йорт йыһаздары, милли кейемдәре, шәжәрәләре урын алғайны.

Тәтешле районы делегаттары билдәле яҡташтары Башҡортостандың һәм Татарстандың халыҡ артисы Хәниә Фәрхиҙең яҡты иҫтәлегенә бағышланған күргәҙмәһе, йырсының шәжәрәһе менән таныштырҙы. "Эстрадабыҙҙың сағыу йондоҙо Хәниә Фәрхиҙең шәжәрәһен алып килдек. Башҡорт моно яңғырағанда, уның йырҙары ла үлемһеҙ булыр тип ышанам. Бик яратты апайым тыуған яғын, йыш ҡайтырға тырышты. "Башҡортостанымды тыуған яғым булараҡ яраттым, ә инде Татарстанды йырсы булараҡ", - тип әйтә ине. Тыуған ауылы Үрге Сәләйҙең бер урамына Хәниә Фәрхи исеме бирелде. Быйыл уның ижадына, тормош юлына бағышланған музей ҙа асыласаҡ", - тип белдерҙе йырсының һеңлеһе Фирүҙә Ибәтуллина.

Артабан йыйылыусылар тарихты сәхнәләштергән театрлаштырылған тамаша ҡарап, сал тарихҡа ҡайтып ураны. Пленар ултырышта танып ырыуы вәкилдәре, делегаттар сығыш яһаны. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының Тарих һәм башҡорт халҡын үҫтереү мәсьәләләре буйынса комиссия рәйесе урынбаҫары, БР Стратегик тикшеренеүҙәр институтының Социомәҙәни анализ үҙәге етәксеһе Юлдаш Йосопов танып ырыуының герб өлгөһө менән таныштырҙы. Унда ырыу билдәләре - ағас, ҡош, оран, тамға һүрәтләнгән. "Геральдика системаһына ингән өсөн һәр башҡорт ырыуының гербын эшләп сығарырға кәрәк. Ырыуҙар гербин Рәсәйҙә тәүгә эшләйбеҙ. Киләсәктә танып ырыуы ла донъя геральдика талаптарына яуап биргән гербын ҡабул итер тип өмөтләнәм", - тине Юлдаш Йосопов. Рая Хәмәеваның Гөлнара Шәймөхәмәтова һүҙҙәренә яҙған йыры ырыу гимны итеп раҫланды. Съезда таныып ырыуы йәмәғәт ойошмаһының совет ағзалары һайланды.

### Башҡорт ҡырғыҙҙары

**Башҡорттарҙың ҡырғыҙ ырыуы Йәнәсәй ҡырғыҙҙары нәҫеленән барлыҡҡа килгән. Йәнәсәй ҡырғыҙҙары монголдар менән тығыҙ бәйләнештә булған, тигән фекерҙәр бар. Н. Я. Бичурин фекеренсә, боронғо ҡырғыҙҙар (хәгәстәр, хағастар) монгол йәки төрки-монгол ҡатнаш сығышлы булған.**

VIII-X быуаттарҙа улар Һырдарья буйҙарына күсенә, артабан - Волганың уң ярына, ә унан инде Бөгөлмә-Бәләбәй ҡалҡыулығына барып сығалар, тип раҫлай тарихсылар. XIII-XIV быуаттарҙа ҡәбилә Ағиҙел йылғаһы үҙәнендә туплана. Көньяҡта башҡорт ҡырғыҙҙарының ерҙәре Ыҡ һәм Зәй йылғалары үрҙәренә тиклем барып етә. Үҙ сығышын ҡырғыҙ ырыуы башҡорттары Сыңғыҙхан нәҫеленән Тонаҡ бей һәм Ҡадыҡ бейгә бәйләй.

Ҡырғыҙҙарҙың боронғо шәжәрәһен Бөгөлмә мөғәллиме Әхмәтғәли Хәлимов кемдәндер ишетеп, 1913 йылда "Шура" журналының 10-сы һанында баҫтырып сығара. Унда улар нәҫел тамырын Ҡорҡот атаға бәйләргә тырыша, әммә Илеш районынан крайҙы өйрәнеүсе Фидан Мәрүәров төҙөгән шәжәрә Ҡалдар бейҙән башлана һәм ул ысынбарлыҡҡа ныҡыраҡ тап килә.

Бөгөн ҡырғыҙ ҡәбилә-ырыу вәкилдәре Башҡортостандың Бағалы районы Иҫке Ҡатай, Иҫке Ҡорос, Иҫке Ҡуян, Камай, Килкабыҙ, Ҡамышлытамаҡ, Мулланур, Саҡат, Үҫтем, Тоҡтағол, Яңы Ҡатай, Илеш районы Баҙы-Ҡуян, Иҫке Айыу, Иҫке Күктау, Иҫке Ҡырғыҙ, Иҫке Татыш, Иҫәнбай, Үрмәт, Иштирәк, Ҡарабаш, Тыпый, Уяндыҡ, Үрге Юлдаш, Шаммат, Ябалаҡ, Яңы Күктау, Краснокама районы Иҫке Мошты, Уртауыл, Яңы Мошты, Туймазы районы Аблай, Бәтке, Илеш, Туҡмаҡҡаран, Үрмәкәй, Шаран районы Бурһыҡ, Ерекле, Күгәрсен-Бүләк, Сәкәнтамаҡ, Түбәнге Зәйет, Түбәнге Ташлы, Татарстандың Аҡтаныш районы Айыш, Аҡтаныш, Иҫке Әлим, Кәҙкәй (Ҡаҙыҡ-ай), Тынламаҫ, Чөгәнә, Яңы Әлим, Баулы районы Ташлы, Ютазы районы Аҡбаш, Бәйрәкә, Иҫке Ҡарайерек, Кәрәкәшле, Ташкисеү ауылдарында йәшәй. Ҡырғыҙ ырыуының иң билдәле вәкилдәренә нефтсе Рәлиф Сафин менән уның ҡыҙы йырсы Алһыу инә.

Уҙған аҙнала Илеш районының Үрге Йәркәй ауылында Ҡырғыҙ ырыуы вәкилдәренең йыйыны үтте. Хужалар ҡунаҡтарҙы Мәҙәниәт йорто алдында уҡ ҡаршыланы. Мәҙәниәт йортоноң фойеһында Илеш, Бағалы, Краснокама, Шаран райондарының вәкилдәре бай күргәҙмә ойошторғайны. Ҡырғыҙ ырыуы башҡорттарының милли аш-һыуҙары, ҡул оҫталарының эштәре, милли кейем өлгөләре, шәжәрәләр күргәҙмәгә йәм өҫтәне. Делегаттар һәм ҡунаҡтар өсөн "Ҡырғыҙ ырыуының тарихи биттәре" тип исемләнгән экскурсия үткәрелде. Йыйын сиктәрендә ойошторолған күргәҙмәлә ҡырғыҙҙарҙың бай тарихына ҙур урын бирелгән. "Урта быуаттар башында ҡырғыҙҙар Йәнәсәй йылғаһы буйында йәшәгәндәр. Үҙҙәренең Ҡырғыҙ ҡағанаты дәүләтен төҙөйҙәр. Әммә Сыңғыҙхан был дәүләтте баҫып ала, тар-мар итә, халҡы төрлө яҡтарға тарала. Урта Азияға, көньяҡ Кавказ яҡтарына барып урынлашалар. XIV-XV быуаттарҙа Башҡортостандың көнбайыш яҡтарына килеп төпләнәләр. Ҡырғыҙҙарҙың башлығы Ҡушыҡ бей үҙ теләге менән Рус дәүләтенә ҡереү өсөн Иван Грозныйға мөрәжәғәт итә. Әлеге Илеш, Шаран, Бағалы, Краснокама, Туймазы райондарының территорияһында Ҡырғыҙ улысын барлыҡҡа килтерәләр һәм шулай итеп Ҡырғыҙ ырыуының тарихы башланып китә", - ти Илеш районынан тыуған яҡты өйрәнеүсе Рөстәм Камалов.

Йыйын артабан пленар ултырышта дауам итте. Ҡунаҡтар, төрлө райондарҙан килгән ырыу вәкилдәре тарихҡа һәм мәҙәниәткә ҡағылышлы сығыштар яһап, уй-фекерҙәре менән уртаҡлашты. Ҡорҙа ҡатнашыусылар ырыу гербын ҡараны, шулай уҡ гимн да ҡабул итте.

Пленар ултырыш менән бер үк ваҡытта М. Гәрәев исемендәге Башҡорт тарихи-мәҙәни үҙәгендә Республика халыҡ ижады үҙәгенең "Ата-бабалар мирасы" исемле фольклор семинары үтте.

**Земфира ХӘБИРОВА әҙерләне.**

✓ ***Батша властары, башҡорттарҙы тынысландырыу маҡсатында, уларҙың һорау-талаптарын ҡәнәғәтләндерергә мәжбүр була. Мәҫәлән, Китап Баймырҙин ырыуҙаштарының аҫаба ерҙәренә "оберегательный грамота" алыуға өлгәшә.***



ЫРЫУЫҢ КЕМ?

# ЫРЫУЫБЫҘ - ЙӘЛДӘК,

## Дәште Ҡыпсаҡ вариҫтары булабыҙ



Йәлдәк олоҫо башҡорттарының Рус дәүләтенә мөнәсәбәте, XVI быуат урталарында Волга-Урал һәм Себер территорияһында барған ҡатмарлы сәйәси ситуация менән бермә-бер бәйле рәүештә үҙгәреп тора. Үҙ заманында Ҡаҙан хандары, Нуғай ханлығы менән союздаш булып, уларҙың ҡеүәтле атлы ғәскәрен үҙ мәнфәғәттәрендә йәлеп итеү мөмкинлегенә эйә була. Көньяҡ һәм көнбайыш башҡорт ырыуҙары ла нуғайҙар менән килешеп йәшәү шарттарында көн итә. Әммә XVII быуат баштарында Волга - Урал арауығында яңы ҡеүәтле көс - төркиҙәр ҡалмыҡ тип атап йөрөткән 300 меңлек монгол-ойрат урҙаһы пәйҙә була. Улар Оло Нуғай Урҙаһын буйһондороп, Яйыҡ, Үр (Орь), Илек, Эмба йылғалары буйындағы башҡорт ерҙәрен дә баҫып ала. Нуғай дәүләте ҡурсауынан мәхрүм ҡалған башҡорт ырыуҙарына ҡалмыҡ иҙеүенә тарыу төп хәүефкә әйләнә. Башҡорт юлбашсыларына, рус хакимдары менән килешеп, ҡалмыҡтарға ҡаршы тороуҙан башҡа сара ҡалмай. Шулай итеп, бер нисә тиҫтә йылға һуҙылған башҡорт-ҡалмыҡ яуҙары башлана.

Тап ошо осорҙа Мәскәү хакимлығын танымаған Күсем хан вариҫтары ҡалмыҡ ғәскәрен үҙҙәренең союздашы итеп ала. Улар ҡалмыҡтар ярҙамында элекке Себер ханлығын тергеҙеү мөмкинлегенә ышана. Әммә ул саҡта башҡорт ырыуҙарының уртаҡ дошманына әйләнгән ҡалмыҡтар менән берләшкән Күсем хан тоҡомдары Себер даруғаһы башҡорттарын үҙҙәренән ситләштерә. Шулай ҙа сәйәси тотороҡһоҙлоҡ шарттарында, Өфө хакимиәте чиновниктарының баш-баштаҡлығынан ыҙаланған айырым башҡорт кландары Күсемләр лагеры яғына сыға. Уларға Йәлдәк олоҫо башҡорттарының байтаҡ өлөшө ҡушыла. Рәсәй тарихында ошо ваҡиғалар һуңынан ҡалмыҡ ханы исеме менән "Дайчин болғанышы", тип атала башлай.

Әммә был сыуалыштан башҡорттар өсөн әллә ниндәй файҙа булмаясағын башҡорт юлбашсыларының күбеһе яҡшы аңлай, сөнки ҡалмыҡ тайшалары башҡорттарҙы үҙҙәренән кәм һанап, буйһондороп тотоу сәйәсәтен өҫтөн күрә.

1649 йылда ҡалмыҡ тайшаһы Дайчин былай тип яҙа: " ...А опасен я только от одного Уфимского города от русских людей и от башкирцев, потому что чинят мне шкоду большую - на улусы приходят войною, людей побивают и в полон емлют. Но чаю, что и добром башкирцы будут у меня ..."

Йәлдәк башҡорттарының Рус дәүләте ҡулы аҫтына ингән осорҙа тарихи Башҡортостандың ҡайһы тарафында йәшәүе хаҡында фараз итергә генә була. Бындай фекер өсөн ерлек тә бар: айырым сығанаҡтарҙағы мәғлүмәттәр йәлдәк ырыуының йә Ҡаҙан, йә Себер даруғалары территорияһында йәшәүе хаҡында һөйләй. 1643 йылға ҡараған бер документта Йәлдәк олоҫо башҡорттарынан Йәнмөхәммәт (Енметка) Аҡколаҡов ырыуҙаштары менән батша Алексей Михайловичҡа үҙҙәренә Ағиҙел йылғаһы буйындағы элекке ерҙәрен биреүҙе һорап мөрәжәғәт иткәндәрендә 1637 йылдан бирле властарға ҡаршы тороуҙан туҡтауҙарын белдерә: "от измены они обратились и приехали с Яику реки в Уфимский уезд в старые свои жилья и жили де они на берегу по Белой реке по обе стороны в вотчинах своих..." Күрәһең, ошоға тиклем Күсем хан вариҫтары һәм ҡалмыҡтар менән бергә батша ғәскәренә ҡаршы сыҡҡан йәлдәк башҡорттары артабан күп ҡорбандар талап иткән көрәштән ваз кискән.

Батша властары, башҡорттарҙы тынысландырыу маҡсатында, уларҙың һорау-талаптарын ҡәнәғәтләндерергә мәжбүр була. Мәҫәлән, Йәлдәк олоҫо башҡорто Китап Баймырҙин 1662 йылда властарҙан үҙ ырыуҙаштары биләгән аҫаба ерҙәргә "оберегательный грамота" алыуға өлгәшә: "велено де им Китяпке с товарищи дедовскими и отцовскими вотчинами, которые писаны в их челобитье, владети по-прежнему".

Йәлдәк башҡорттары батша чиновниктары золомона ҡаршы ойошторолған ихтилалдарҙа әүҙем ҡатнаша. 1662 - 1664 йылдарҙа "Дайчиновщина" тип аталған ихтилал етәкселәренән булған Йәлдәк олоҫо башҡорттары Килей һәм Әтегәш Тәнекәевтәрҙе ғәйепләп, Өфө воеводаһы А.М. Волконский шулай яҙа: "И в прошлом же во 171 году (1663 - **Ред. иҫк.**) весною вы ж, башкирцы, Атыгеш и Килей Таникеевы и Белярской волости Менен и Сарт с товарищи летом, забыв бога и великого государя премногую к себе милости и жалованье, изменили в другой и отъехали в дальние свои кочевья, и ваша братия молодые люди воруют, под Мензелинск и в Казанский же уезд и в иные места изгоном приходят, и людей побивают, и в полон емлют, и всякое воровство делают".

Һуңынан воевода, батша ярлыҡауына өмөтләндереп, башҡорт ихтилалы юлбашсыларын баш һалырға саҡыра. Әлбиттә, йәлдәк башҡорттарының барыһы ла ихтилалға ҡушылған, тип әйтеп булмай. 1714 йылда Ҡаҙан өйәҙенән Мусай Сайков һәм керәшен Якушка Исаев Таныпл буйынан үҙҙәренә тәғәйен ата-бабалары ерен һорап яҙған хатта шундай мәғлүмәт бирген: "...исстари де прадед их башкирец Бурай владел вотчиною бортным ухожьем по Таныпу реке, и тот прадед их Бурай переехал жить из Уфимского уезду в Казанский уезд и жил в Казанском уезде и умре..." 1662 - 1664 йылдарға тиклем Борай Ерғазиндың аҫаба ерҙәре ошонда булған.

1735 - 1740 йылдарҙа ла йәлдәктәрҙең күпселеге, старшина Әхмәр мулла Әсәнов ҡулы аҫтындағыларынан башҡалары, ихтилалсылар рәтендә була. Ҡазыбаш ауылы башҡорто Усман Ҡорманалиндан һорау алыу ҡағыҙында былай тиелә: "...их Елдяцкой волости башкирец Юсуп-мулла Токчюрин, Явгильда Таулин с товарыщи с воровскими неприятельскими людьми башкирцами в степи ездили за Вологоцким полком, которые де и поныне ездят безпрестанно неведомо куды".

Аҡай Күсемовтың арҡаҙашы, Йылан олоҫо башҡорто Мәсәғүт Уразаев йәлдәк башҡорттарын ихтилалға ҡушылырға саҡырып йөрөй, был хаҡта ла мәғлүмәт бар: "...ему послушны деревни Салтанбековой башкирцы Аскар Салтанбеков с товарыщи, деревни Аксашевой башкирец Курманай-абыз с деревенскими жителями". Аҡай батыр дошман ҡулына эләккәс, Аскар Солтанбәков баш һалырға мәжбүр була, ошо хаҡта каратель отряды башлығы А.И. Тевкелев ошондай мәғлүмәт бирген: "А сего ноября 11 дня явился ко мне с повинной Казанской дороги Елдяцкой волости башкирец Аскар Салтанбеков, который был в воровстве с вором Акаем, того ради онаго явившегося вора, по важности его дела, по получении о том его воровстве особливого Ея Императорского Величества указу, освобожден на поруки..."

Йәлдәк олоҫо башҡорттарының 1773 - 1775 йылдарҙағы дөйөм башҡорт күтәрелешендә ҡатнашыуы хаҡында мәғлүмәт күп түгел, әммә улар ҙа был ихтилалдан ситтә ҡалмаған. Өфө провинция канцелярияһының 1775 йылдың 16 февраленә ҡараған ведомостарында Йәлдәк олоҫонан 311 башҡорт һәм 116 яһаҡлы татарҙың йәлдәк старшинаһы Баязит Килмәтов етәкселек иткән команда составында хөкүмәт ғәскәрҙәренә ҡаршы көрәштә ҡатнашыуы теркәлгән.

1918 йылдың апрелендә Йәлдәк олоҫо башҡорттары, Башкурдистан республикаһы составына ҡушылыу ниәтендә, большевиктар власына ҡаршы сығып, баш күтәрә. Был ваҡиға тарихҡа Борай башҡорт автономиялы районын (Борай кантонын) иғлан итеү исеме аҫтында ингән.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ әҙерләне.**

**(Аҙағы. Башы 17-се һанда).**

---

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 76*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Ирҙәр үлә, башын һала...

112-се Башҡорт атлы дивизияһы Сталинград өсөн барған ҡанлы алыштарҙа аяуһыҙ ҙур юғалтыуҙарға дусар була. Тирә-яҡта осһоҙ-ҡырыйһыҙ Дон далалары, урман тигәндәре лә көҙөн яланғасланып ҡалған һирәк ағаслыҡтарҙан ғибәрәт. Яңы ғына яуған ап-аҡ ҡарлы яландарҙа атлы ғәскәргә күктән улар өҫтөнә ажғырып ябырылған дошман самолётарынан ҡайҙа булһа ла йәшенеп, ҡасып ҡотолор әмәл дә юҡ һымаҡ. Ҡыҙғаныс, 1942 йылдың ошо дәһшәтле осоронда һауаларҙа совет самолёт-истребителдәре үтә аҙ булып, фашист ҡоҙғондары нисек теләй, шулай хакимлыҡ ҡыла. Брянск фронтында дан ҡаҙанып, орден-миҙалдар менән бүләкләнгән дивизиябыҙ батырҙарының байтағы ошо далаларҙа һәләк булып, ер ҡуйынына тапшырыла. Әммә башҡорт атлылары артҡа сигенмәй, яуыз дошманды ҡыуыуын дауам итә.

Ошо саҡтағы ваҡиғаларҙы фронт көндәлегенә теркәп барған комиссар Сәғит Әлибаев яҙмаларында ошо трагик һәм бер үк ваҡытта героик көндәр бик ентекле сағылдырылған.

"20 ноябрь. Кисәге беҙҙең фараз дөрөҫләнде: яҡтырыу менән үк, дошман беҙгә табан килә башланы. Автоматтан, пулемёттан атыу айырыуса көсәйҙе. Таһир (Кусимов. - **Ред. иҫк.**), начштаб Хәнәфи Нурғәлиев - окопта, мин өҫтә ултыра инем, улар янына төштөм.

Башын күтәргән берәү сафтан сыға бара, сөнки автомат һәм пулемёт уты бик көслө, пулялар яуа ғына. Йомошсо-элемтәселәр шыуышып ҡына йөрөй. Унда хәрәкәт итеүсе 294-се полктан, үҙҙәренең хәлен белдереп, беҙҙең менән кәңәшләшеү өсөн вәкил килде.

Дошман ҡыйыу ғына хәрәкәт итмәксе. Өс танкыһы килеп сыҡты.

Шул мәлдә Кусимов ни эшләптер һул яҡтағы соҡорға күсте, унан тағы күтәрелде. Бер нисә минут та үтмәне, полк командиры ҡысҡырып ебәрҙе: "Ай-яй-яй! Посыльныйҙар! Ярҙам итегеҙ!" Шундуҡ мин шыуышып уның эргәһенә барып еттем. Таһирҙы күтәреп алып та киттеләр. Шул минут эргәлә генә дошманға атып ятҡан элемтә начальнигы лейтенант Яков Донец яраланды. Килә ятҡан дошман танкыһын емергән тип, ПТР тотоп йүгергән минбат командиры лейтенант Мырҙағәли Шафиков та ауҙы. Уға ошо тирәлә булған 4-се эскадрондың санинструкторы Кәрим Ҡәипов ярҙам итте - яраһын бәйләне. Ул арала унда хәрәкәт иткән теге полктың эскадрондары сигенде һәм дошманға беҙҙең флангыға үтергә мөмкинлек тыуҙы. Беҙгә ҡамалыу ҡурҡынысы тыуғанлыҡтан, мин Рәхмәтуллинға уң яҡҡа ҡарата ла ут асырға - дошмандың флангыға сығыу юлын өҙөргә ҡуштым.

Танкылар һаман килә. Ҡамап ҡуймаһын тип, Шамил Рәхмәтуллин пушкаларын бер аҙ артҡа тартты. Орудие командирҙары Ғәлимйән Ихсанов һәм Ғабдрахмановтар ҡаршы килгән өс танкыны ла сафтан сығарҙылар, береһе янды. Ундан килеп сыҡҡан дүртенсе танкыны ла Шамил Рәхмәтуллин артиллеристары туҡтатты...

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

**✓ Бына шундай тарихтар тыңлап үҫкәнгә лә күңелгә яҡындыр инде ҡала балаһына башҡорт мөхите. Үҙ балаларыма ла был тарихты һөйләргә, быуындар бәйләнешен һаҡларға, милли рух мәсьәләләрен аңлатырға тырышам.**



# ҠАЙҘА

## шунда кәрәкле

**Өфөлә тыуып үҫеп, бар ғүмерен тыуған ҡалаһына бағышлаған кешеләр араһында милләттәшебеҙ, Өфө статистика, информатика һәм иҫәп-хисап техникаһы колледжы директоры, педагогия фәндәре кандидаты, Башҡортостандың Урта һөнәри белем биреү учреждениелары директорҙары советы рәйесе Сәйфетдин Зәйнетдин улы ҠУНЫСБАЕВ та бар. Уҡыусыларыбыҙ иғтибарына уның менән әңгәмә тәҡдим итәбеҙ.**

### Бала саҡ хәтирәләре

Мин ғаиләлә дүртенсе бала булып Өфөнөң Ғафури урамындағы 1-се балалар табыу йортонда тыуғанмын. Өс апайым бар. Тәүге бала саҡ хәтирәләрем ул саҡта яңы төҙөлөп ятҡан Менделеев урамына бәйле, беҙ шундағы яңы йортта йәшәнек. Балалар баҡсаһына нишләптер үҙемдән бер йәшкә өлкәнерәк балалар төркөмөнә биргәндәр. Төркөмдәге дуҫтарымдың мәктәпкә барырға йәштәре еткәндә миңә тик 5 йәш кенә тулған. Атайым: "Мәктәпкә барырға әле һиңә иртә, тағы бер йыл балалар баҡсаһына йөрөйһөң инде", - тигәс, иптәштәремдән тороп ҡалыуымды ауыр ҡабул итеп, балалар баҡсаһына башҡаса йөрөмәнем. Үҙемде ҙур кеше тип хис итә инем, хатта әсәйем миңә шундай ололарса йөкләмә лә биреп ҡуйғайны: көн һайын өс литрлыҡ бидон тотоп, һөт артынан йүгерәм. Ул әлеге магазиндарҙағы кеүек түгел, яңы һауып килтерелгән ысын һөт ине.

Уҡырға Өфөнөң 42-се мәктәбенә төштөм. Тәүге көндәге беренсе дәрес хәтеремдә ҡалған. Уҡытыусы таҡтаға төрлө йәнлектәрҙең һүрәттәрен теҙеп элгән дә, беҙҙән уларҙың атамаһын һорай. Башҡа балалар ыңғайына мин дә ҡул күтәреп, "Ҡуян" тигән булдым. "Дөрөҫ түгел, ултыр", тине уҡытыусы руссалап. Мин аптыраным, дәрес тамамланыу менән ҡайтып киттем. Ҡайтҡас, "Мәктәптә алдашалар, бүтән бармайым", тинем. Атайым: "Заяц тип әйт, уҡытыусы ҡуян тигәнде аңламай бит", - тип ипләп кенә аңлатты. Шулай ике телде лә белеп үҫтем. Башҡорт теле - минең күңелем теле, ул миңә яҡын һәм мин һәр саҡ туған телемдә аралашам. Әммә ниндәйҙер ҡатмарлы фекерҙәрҙе еткергәндә руссаға күсеп китәм.

Үҫмер йылдарым да ҡыҙыҡ үтте. Советтар Союзы үҙе үк күңелгә яҡын осор бит инде, ул ваҡытта кешеләр ҙә икенсе төрлө ине. Кеше аҡса менән үлсәнмәне, үҙ-ара мөнсәбәттәр ҙә башҡасараҡ булды, шуғалыр, бала саҡ, йәшлек йылдары һағындырып иҫкә төшә. Мин 3-сө синыфта уҡыған саҡта беҙгә 3 бүлмәле фатир бирҙеләр, шунда күскәс, 29-сы мәктәпкә йөрөнөм, аҙаҡ яңы төҙөлгән 97-се мәктәптә белем алдым. Мәктәптә комсомол секретары булдым, спорт менән әүҙем шөғөлләндем, күп төрлө саралар ойоштора торғайныҡ. Уҡыуҙа ла һынатманым, атайымдың һүҙен тоттом. Ул: "Йә "икеле", йә "дүртле-бишле" алып ҡайт, "өслөң" булмаһын. Ишектән ней сыға алмай, ней инә алмай, ҡыҫылып йөрөмә", - тигән нәсихәтен әйткәйне.

Атайым сығышы менән Ейәнсура районы Элмәле ауылынан, был ауылда бер генә урам һәм ул Бөйөк Ватан һуғышы яугиры, Советтар Союзы Геройы Сәлихйән Ҡунысбаев исемен йөрөтә хәҙер. Атай баш ҡалаға эшкә килгән, ғүмер буйы зыянлы цехта, Гидравлика заводында термист булып эшләне. Бына шул ауыр эш шарттары уның һаулығын ҡаҡшатты ла инде, яҡты донъяны бик иртә ташлап китте. Ә әсәйем Шишмә районы ҡыҙы, ул әле 92 йәшен туйланы. Ул һуғыш осоронда 13 кенә йәштә булған, байтаҡ ауырлыҡтар күргән. Тыныс холоҡло, бик тыйнаҡ, көслө кеше. Ул бер ҡасан да "Эй, бәпесем" тип әпәүләп ултырманы, әммә тормошта уңыштар ҡаҙанырға, эшләргә, ныҡышмал булырға, ауырлыҡтарҙы еңергә өйрәтте. Нәҡ әсәйем, кешеләргә кәрәкле кеше булып үҫергә, тигән уйҙы һеңдергән күңелгә. Ә атайым шиғри күңелле кеше ине, ул мине, кинйә малайҙы, иркәләтеп, башҡорт әкиәттәре тупланған ҙур китаптан әкиәттәр уҡып, ғаиләбеҙҙең тарихын, боронғоно һөйләп үҫтерҙе. Хәтеремдә, хатта ауыл халҡының нисек итеп оло табын ҡороп, ит бешереп, бишбармаҡ тәғәмләүен, уларҙың нисек күңел асыуын, ниндәй йырҙар башҡарыуын, үҙҙәрен нисек тотоуын да бәйән итә торғайны. "Бишбармаҡ бешерәләр, итте хужа матур итеп өлөшләй һәм таратырҙан алда иң тәмле урындарын һоғондороп ашатып сыға. Шунан ит һәм һалманы ашайҙар, аҙағынан ҡоротлап һурпа, сәй эсәләр. Ҡымыҙ эсеп, йырлашып-бейешеп күңел асалар, һис тә араҡы эсеүҙәрен хәтерләмәйем", - тип һөйләгәндәре әле булһа иҫтә.

Тарих тигәндән, олатайым һунарсы булған минең, бүре аулаған. Уның һунар итер өсөн генә тотҡан, ҡырҙа тибенлектә иркен йөрөгән һәм ҡырпаҡ ҡар төшкәс кенә кешнәп үҙе ҡайтып етер аты булған. Олатай бүрене суҡмар менән генә һуғып алған. Атайым һөйләүенсә, бер ваҡыт олатай ете бүре һуғып алып ҡайтҡан да, өйгә индереп һалып, өләсәй менән икәүләшеп сәй эсеп ултыралар икән. Өләсәй ултыра торғас: "Анау бер бүрең, ҡара, тере ләбаһа", - тигән. Олатай: "Эй, бөлгән ул", - тип ҡул һелтәп кенә ҡуйған. Бер ваҡыт был бүре шап иттереп өҫтәл аша һикереп, ишектән сығып ҡасҡан! Олатай кәсәһенән сәйен һемереп: "Һә, бөлмәгән булған икән", - тигән ти.

Бына шундай тарихтар тыңлап үҫкәнгә лә күңелгә яҡындыр инде ҡала балаһына башҡорт мөхите. Үҙ балаларыма ла был тарихты һөйләргә, быуындар бәйләнешен һаҡларға, милли рух мәсьәләләрен аңлатырға тырышам. Дөрөҫөн әйткәндә, был бит педагогиканың бик мөһим мәсьәләһе. Педагогика атай-әсәй һәм балалар, йәки уҡытыусы һәм балалар араһында ғына барлыҡҡа килмәй, ул - мөхит, йәмғиәттең торошо. Тимәк, ниндәйҙер сәйәсмән ауыҙын асып һүҙ әйтә икән, ул да педагогика менән шөғөлләнә. Кешене махсус саралар, ысулдар менән үҙе йәшәгән мөхиттән айырып тәрбиәләп булмай. Әлбиттә, холҡон саҡ ҡына яҡшыртырға мөмкин. Бөгөнгө көндән сығып фекер йөрөтһәк, был өлкәлә проблемалар бик күп. Сөнки йәмғиәт тә, дәүләт тә уҡытыусыларға бер төрлө бурыстар ҡуя, ә кеше урамға сыға, телевизор ҡабыҙа йә интернеттан бөтөнләй икенсе мөхитте күҙәтә. Булмағанды балаға аңлатып, өйрәтеп, күңеленә һеңдереп үҫтереү мөмкин түгел. Беҙҙең рухи һәм матди мираҫты, мөхитте һаҡлау, йәш быуынға дөрөҫ тәрбиә биреү бик ҡатмарлы эш һәм ул бөгөн уҡытыусыларҙан ғына түгел, дөйөм йәмғиәттең торошона бәйле. Минең өләсәй "Батшаларға сабырлыҡ бирһен инде", ти торғайны...

### Хеҙмәт юлы

Бөтә тормошом осраҡтарҙан тора һымаҡ. Мәктәпте тамамлағас та атайым: "Заводҡа бар, эшләп ҡара, хеҙмәт итеп ҡайт та, шунан ҡайҙа уҡырға барырынды билдәләрһең", - тине. Күңелемә тарих фәне яҡын ине, әммә юғары уҡыу йортоноң көндөҙгө бүлегенә үтеп булманы һәм мин Өфөнөң 63-сө урта һөнәри-техник училищеһында радиоаппаратура һәм приборҙар монтажсыһы тигән эшсе һөнәрен үҙләштерҙем, уҡып йөрөгәндә үк заводҡа эшкә төштөм. Бөгөн, мәҫәлән, немецтар тәжрибәһенә таянып индерергә тырышҡан "дуаль белем биреү" шул осорҙа уҡ әллә күпмегә яҡшыраҡ, көслөрәк тормошҡа ашырылған, тимәк. Мин эшләгән был завод хәрби сәнәғәт өсөн продукция етештерә торғайны, ул хәҙер "Прогресс" тип атала. Миңә 18 генә йәш, өсөнсө сменаға эшкә йөрөйөм. Хеҙмәт мәҙәниәте шул тиклем үҙенсәлекле ойошторолған ине: һәр 45 минут һайын бөтә эшселәр эш ҡоралдарын, кәрәк-яраҡтарын ҡалдырып, асыҡ урынға сығып баҫа һәм физик күнекмәләр яһай торғайны, күңелле үтә ине был минуттар. Бынан тыш, һәр 2 сәғәт һайын беҙ үҙебеҙгә тәғәйен ваҡытта бушаныу бүлмәһенә йөрөй торғайныҡ. Унда









*✓ Быйылғы уҡыу йылында һөнәри белем биреү учреждениеларына ғаризалар юғары уҡыу йорттарынан ике тапҡырға күберәк булған. Был йәштәр ихтыяжының асыҡ күрһәткесе.*



# ТЫУҒАНМЫН,

## булып йәшәйем…

шундай ярым-ҡараңғылыҡ, янып торған ҙур аквариум тора, дивандар теҙелеп киткән, тынысландырғыс көй уйнай, тағы ла "кислород коктейле" бирә торғайнылармы шул. Аңлауығыҙса, ябай эшсәндәр ҙә, квалификациялы белгестәр ҙә бына ниндәй юғары шарттарҙа эшләгән. Мин тормошомдоң был осорон тик яҡшы яҡтан иҫкә алам, барыһы ла ябай кеше өсөн ойошторолоуына һоҡланам.

Әрме хеҙмәтенән һуң юрист һөнәрен үҙләштерергә ҡарар иттем һәм юғары уҡыу йортон тамамлап, юрист, юрисконсульт булып эшләнем, артабан Өфө ҡала хакимиәтендә Муниципаль милек идаралығы буйынса комитетта, Фән һәм юғары, урта белем биреү дәүләт комитетында, Башҡортостан Президенты Хакимиәтендә хеҙмәт юлымды дауам иттем, ә 2001 йылдан Өфө статистика, информатика һәм иҫәп-хисап техникаһы колледжын етәкләйем. 2006 йылдан республика Урта һөнәри белем биреү учреждениелары директорҙар советы рәйесемен, ә 2014 йылдан бер ни тиклем өҙөклөк менән Волга буйы федераль округы директорҙары Советы рәйесе итеп йәнә һайландым.

### Директор бурысы

Төп бурысым - булғанды һаҡлау һәм үҫтереү, тип иҫәпләйем. Сөнки беҙҙең колледж нигеҙ һалынғандан бирле һөнәри-техник белем биреүҙә иң алдынғыларҙан булған. Шуға бөгөн беҙҙең Рәсәй кимәлендә юғары баһаланыуыбыҙ минең генә ҡаҙаныш түгел. Совет майҙанында урынлашҡан бөгөнгө Архитектура министрлығының бинаһы ҡасандыр беҙҙең техникум өсөн махсус төҙөлгән, беҙ Союздың дәүләт планына ингәнбеҙ һәм мөһим бурыстар үтәгәнбеҙ. Хатта республикалағы тәүге компьютер башта беҙгә, шунан ғына Статистика буйынса дәүләт комитетына алып киленгән. Ошо компьютер ярҙамында программалаштырыу өлкәһендә йәш белгестәрҙе уҡытҡандар, аҙаҡ ул дәүләт хужалыҡ иҫәбе бурыстарын үтәгән: бөтә тиерлек предприятиелар килеп, үҙҙәренең финанс мәғлүмәттәрен перфокарталарға сығартып алған. Шуға республиканы компьютерлаштырыу, информатизациялауға ҡағылышлы барлыҡ мәсьәләләрҙең башланғысында торабыҙ, тип әйтерлек. Был хәлдәр 60 йылдан элек тә булған, аҙаҡ беҙҙең план-иҡтисад техникумы "механизация һәм учет" тип үҙгәртелгән. Шунан бирле беҙ политехник белем биреү учреждениеһына әүерелдек, йөҙөбөҙгә ҡыҙыллыҡ килтергәнебеҙ юҡ. Уҡыу йортоноң юғары статусы - коллективтың, балалар ҡанатын нығытырлыҡ белем биреүсе уҡытыусылар ҡаҙанышы. Коллективыбыҙҙа тәрән нығынған традициялар йәшәй, шулай булыуға ҡарамаҫтан, заман талаптарына ярашлы гел алға ынтылабыҙ, үҙгәрәбеҙ һәм күп ҡырлы эшмәкәрлек алып барабыҙ. Ә үҙемә килгәндә, директор булараҡ, эш хаҡын арттырыуҙан тыш, мин уңайлы эш шарттары тыуҙырыуҙы төп бурысым тип иҫәпләйем һәм кешенең эшенә килгеһе килеп торһон, коллективына ылыҡһын, тип тырышам.

### Эшсе һөнәрҙәренә ихтыяж

В. Маяковскийҙың шундай юлдары бар: "Бөтә һөнәрҙәр мөһим, бөтә һөнәрҙәр кәрәк". Әлбиттә, киләсәктә ниндәй эшсе һөнәрҙәренә ихтыяж артыуын күп осраҡта баҙар хәл итә, ә ул беҙҙә яңы ойошоп килә. Шуға күп процестар стихиялы үҫешә, ниндәйҙер генә өлөшө планға ярашлы бара. Һис шикһеҙ, IT-технологияларға бәйле белем биреү йүнәлештәре күпмелер ваҡыт юғары һорау менән ҡулланылыр, әммә бөгөн беҙ шундай хәлгә килеп юлыҡтыҡ: IT-оҫталыҡ бөтә тиерлек әҙерлек йүнәлештәрендә лә талап ителә. Шул уҡ ваҡытта IT-технологияларҙың үҫеш идеологияһы үҙе үк алға китеш булған һайын ҡулланылышта ябайлашыу маҡсатына ярашлы ҡоролоуын иҫәпкә алғанда, был өлкәлә тар һөнәри йүнәлештәргә һорау кәмей барасаҡ, тип фаразларға була. Бөгөн бөтәһе лә программалаштырыуҙың иң ябай нигеҙҙәрен белә, киләсәктә был белем киңәйә барасаҡ һәм программалаштырыу өлкәһе өсөн генә белгестәр әҙерләү артыҡ кәрәк булмауы бар. Уның урынына программалаштырыу бүтән һөнәрҙәр өсөн кәрәкле белем нигеҙе булараҡ башҡа өлкәләрҙә киң ҡулланыла башлар.

Эшсе һөнәрҙәренә ихтыяж юҡ тиеү менән килешмәйем. Был мәсьәләне хәл итеү беҙҙән генә тормай, кеше лайыҡлы хеҙмәт урыны, яҡшы эш хаҡы һәм уңайлы шарттар булдырылыуын күрһә, урта һөнәри белемме ул, юғарымы - ҡарап тормай, уҡый һәм эшләй. Бөгөн йәштәр эшсе һөнәрен үҙләштерергә ынтылмай, тигән фекер менән дә килешеп етмәйем. Сөнки быны 2020-2021 уҡыу йылындағы ҡабул итеү кампанияһына нигеҙләнеп кенә лә кире ҡағырға мөмкин. Яңыраҡ Рәсәй Урта махсус белем биреү учреждениелары директорҙар союзы президенты Виктор Демин ошондай мәғлүмәт еткерҙе: быйылғы уҡыу йылында һөнәри белем биреү учреждениеларына ғаризалар юғары уҡыу йорттарынан ике тапҡырға күберәк булған. Был йәштәр ихтыяжының асыҡ күрһәткесе. Әйтергә кәрәк, беҙҙең колледжда ла ҡайһы бер һөнәрҙәр буйынса бер урынға 25-30 абитуриент дәғүә итте, тик "отличниктар" уҡыған төркөмдәр бар. Тимәк, башҡа ергә уҡырға инә алмағанлыҡтан килмәйҙәр колледжға. Балалар 11 класты тамамламай, быға Берҙәм дәүләт имтиханы йоғонтоһо тип кенә ҡарау дөрөҫ булмаҫ, башҡа бик күп өҫтөнлөклө факторҙар ҙа ҙур роль уйнай.

Мәҫәлән, шул уҡ "WorldSkills" - "Йәш профессионалдар", "Абилимпикс" чемпионаттары, колледждың төрлө ижади һәм спорт түңәрәктәренең әүҙем эшмәкәрлеге. "Йәш профессионалдар" чемпионатына "Программные решения для бизнеса", "Веб-дизайн и разработка", "Корпоративная защита от внутренних угроз информационной безопасности", "Разработка мобильных приложений", "Правоохранительная деятельность "Полицейский", "Машинное обучение и большие данные", "Разработка дополненной и виртуальной реальности" тигән компетенцияларҙа студенттарыбыҙ ҙур уңыштарға өлгәшә, алтын һәм көмөш миҙалдар яулап, үҙҙәренең һөнәри оҫталығын иҫбатлай. Был ярыштарҙа колледж һәм вуз студенттары араһында бүленеш юҡ, юғары уҡыу йорттары өсөн айырым ойоштороп ҡарағайнылар - килеп сыҡманы. Сөнки хәҙер кешеләр реаль нәмәләр өсөн тауыш бирә. Һөнәри белем алған балалар колледжды тамамлағас та артабан нимә эшләрен, ҡайҙа барырын күҙ алдына яҡшы килтерә, уларҙың ынтылышы бар һәм белем алыуҙы карьера төҙөү менән бергә алып бара ла алалар.

Әлбиттә, был өлкәлә әле хәл ителәһе мәсьәләләр бар һәм шуларҙың иң мөһиме - йәш һөнәрмәндәрҙе эшкә урынлаштырыу. Еңеүселәр эшкә төшкәс, былдағы сәнәғәт предприятиеларының инфраструктураһы улар ярышҡан халыҡ-ара кимәлгә тап килмәүе арҡаһында тулы кимәлдә үҙҙәрен артабан камиллаштыра, тормошҡа ашыра алмауы бар. Шул уҡ мәғариф өлкәһендәге реформаларҙың училищеларҙы бөтөрөп тиерлек ҡуйыуы бик ауыр ҡабул ителде. Бында эшсе һөнәрҙәре лә, урта һөнәри белем биреү буйынса ла сифат аҡһауы көн кеүек асыҡ. Бәлки, бер ни тиклем ваҡыт уҙғандан һуң закон сығарыусылар был аҙымдан баш тартыр, сөнки былар араһында айырма ҙур.

Әйтергә кәрәк, һуңғы биш йыл эсендә һөнәрҙәр теҙмәһе һиҙелерлек үҙгәреш кисерҙе, сөнки беҙ "Топ-50" техник һөнәрҙәрҙе индерә башланыҡ, уларҙың эстәлеге лә башҡасараҡ. Бөгөн беҙҙә 2700-гә яҡын студент 11 йүнәлеш буйынса һөнәр үҙләштерә. "Селтәр һәм системалы етәкселек итеү", "Информацион системалар һәм программалаштырыу", "Автоматлаштырылған системаларҙың мәғлүмәти хәүефһеҙлеген тәьмин итеү", "Логистика буйынса операцион эшмәкәрлек", "Финанстар" йүнәлештәре буйынса һөнәр үҙләштерергә 9-сы синыфтан һуң ғаризалар ҡабул итәбеҙ. "Ер һәм милек мөнәсәбәттәре", "Иҡтисад һәм бухгалтер иҫәбе", "Хоҡуҡ һәм социаль тәьминәтте ойоштороу", "Хоҡуҡ һаҡлау эшмәкәрлеге", "Хоҡуҡ һәм суд етәкселеге" тигән йүнәлештәргә 9-сы синыфтан һуң да, 11-се синыфты тамамлап та уҡырға килергә була. Ә бына "Компьютер системалары һәм комплекстар" йүнәлешендәге һөнәрҙәр тик урта дөйөм белем алыу тураһындағы аттестаты булған балалар өсөн тәғәйенләнгән. Шуны айырып әйтергә кәрәк, хәрби хеҙмәт юлы үткән, органдарҙа юғары вазифаларҙа эшләгән профессионалды эшкә саҡырыу менән хоҡуҡ һаҡлау эшмәкәрлеге йүнәлеше әүҙем үҫешә. 2020-2021 уҡыу йылына ҡабул итеү һөҙөмтәләре 1 бюджет урынға 30-ҙан ашыу абитуриент дәғүә итеүен күрһәтте. Беҙҙең сығарылыш студенттары барыһы ла эшкә урынлаша, кемдәрелер белемен артабан юғары уҡыу йорттарында камиллаштыра.

### Өфө - баш ҡалам

Өфө - минең тыуған ҡалам, бала сағым да, йәшлек осором да ошонда үтте, ир ҡорона еткәс тә мин уны ташлап ситкә киткәнем юҡ. Әммә ул мине көн дә хайран итә: Ағиҙел аша күперҙән ҡалаға килеп ингән урындан баҡһаң, ниндәйҙер көнбайыш мегаполисын хәтерләтә төҫлө. Баш ҡала йылдан-йыл үҙгәрә, күркәмләнә, бейек-бейек йорттар барлыҡҡа килә, төҙөкләнә. Был ҡалала үҙенә башҡа халыҡ йәшәй, улар үҙмаҡсатлы, тыныс, баҫалҡы булыуҙары менән айырылып тора. Өфө - сангвиниктар ҡалаһы тиергә була, уларҙы ниндәйҙер киҫкен хәлгә килтереү өсөн күп тырышлыҡ һалырға кәрәктер. Иң төп үҙенсәлеге: бында шул тиклем күп төрлө мәҙәниәттәр һыйышҡан, кешеләр милли һәм дини айырмалыҡтарына ҡарамай, бер-береһен аңлап, хөрмәт итеп, татыу йәшәй.

Ҡала үҫешә, үҙенә генә хас һыҙаттары барлыҡҡа килә һәм мин Өфө ҡала Советының Архитектура һәм төҙөлөш комитетында депутат булараҡ, бөгөн ҡабул итергә әҙерлек барған ҡаланың яңы Генераль планындағы ҡыҙыҡлы проекттар, киләсәккә күҙалланған стратегиялар, пландар уны тағы ла технологик, мәҙәни, социаль юҫыҡтарҙа үҫтерергә мөмкинлек бирер, тип уйлайым. Ҡалала йәмәғәт транспорты, ҡала агломерацияһы, урман-парк зоналарын һаҡлауға бәйле мәсьәләләр көнүҙәк. Генераль планда Ҡариҙел йылғаһы аша күпер төҙөү, торлаҡ йорттар өсөн яңы территориялар билдәләү кеүек пункттар күрһәтелгән, тап ошондай ҡарарҙар ҡаланы заманса, кешегә йәшәү өсөн уңайлы итәсәк тә инде. Ҡала етәкселегенең эҙмә-эҙлекле эшмәкәрлеге ҡыуандыра, барыһына ла бик уйлап, үлсәп тотоналар. Өфөнөң мәҙәни мираҫын һаҡлау ҙа мөһим, был йәһәттән яҡшы эш алып барыла, боронғо йорттар яйлап төҙөкләндерелә. Шул уҡ ваҡытта йорттар араһында, кварталара төҙөлөштәрҙе лә алып барыу зарур. Юғиһә, беҙҙә күпме "хрущевкалар", кешеләр бәҙрәфкә тышҡа йөрөргә мәжбүр булған ағас йорттар бар әле. Бигерәк тә ҡала уртаһында урынлашҡан ибәтәйһеҙ өйҙәр булыуы яҡшы түгел, уларҙа кешеләр йәшәргә теләгәндән түгел, ә мәсьәләләр хәл ителмәүе, ҡайҙа барырға белмәгәндән тора бит. Шуға ошондай ағас өйҙәр урынына бейек, матур, яңы йорттар һалына башлауын күрһәм, ҡыуанам. Был бөгөнгө көндә беҙҙең төп маҡсат, ҡалалағы мөхитте халыҡ мәнфәғәтен ҡайғыртып яҡшыртыу, уңайлы шарттар булдырыу кәрәк.

Ҡаланың киләсәге яҡты булыуын күрәм. Беҙҙең Өфө ете ҡалҡыулыҡта урынлашҡан Рим ҡалаһы кеүек, бөтә юлдар беҙгә алып килә. Әлбиттә, мин Өфөнө һис тә Рим менән сағыштырырға теләмәйем, сөнки унда үҙем булғаным да юҡ. Өфө - бик боронғо башҡорт ҡалаһы, уның ике йылға ҡушылдығында урынлашыуы, төрлө географик зоналар, юлдар һәм мәҙәниәттәр киҫелешендә тороуы иҫ киткес үҙенсәлек. Боронғо Өфө ҡаласығына бәйле серҙәрҙе, был урында табылған ҡаҙылма байлыҡтарҙы, ҡаланың атамаһы нимәне аңлатыуын асыҡлау, бәлки, беҙҙән һуң килгән быуындарға ла бурыс булып күсер. Өфө казактар килеп текмә төҙөгәндән һуң ғына барлыҡҡа килгән ҡала түгел, уның тарихы беҙ күҙ алдына ла килтерә алмаған төпкөлдәргә барып тоташа...

Өфө - минең тыуған төйәгем. Үрҙә телгә алғайным инде, мөмкинлектәр күп булһа ла, бер ҡасан да уны ташлап китергә теләк тыуманы. Рәсәйҙең, йәки сит илдәрҙең ниндәй билдәле ҡалаларына сәфәр йөрөһәм дә, тыуған ҡалама әйләнеп ҡайтам. Ҡайҙа тыуғанмын, шунда кәрәкле булып йәшәүем менән бәхетлемен.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Ҡарағайға ҡарап тал үҫер, хеҙмәтеңә ҡарап дан үҫер" тигән башҡорт халыҡ мәҡәле бар. Сәйфетдин Зәйнетдин улы тураһында әйтелгән кеүек был тапҡыр һүҙҙәр. Ул нәҡ ҡарағай ише йәштәргә өлгө булырҙай, тыуған ҡалаһы, халҡының киләсәге мәнфәғәтендә хеҙмәт ҡаҙанған шәхес.**

**Сәриә ҒАРИПОВА**
**яҙып алды.**

**✔ Бигерәк ауыр ҙаһа ғүмер кисереүе. Бар ғүмерем ошо тотҡонда үткән кеүек. Ҡол булып йәшәгәнмен. Байлыҡтың, әйберҙәрҙең, бисәнең, замандың ҡоло булып. Был минең ғүмер түгел һымаҡ.**






Ауылдағы Әхмәт ҡарттың күркәм генә һунар эте иҫенә төштө. Аҡтырнаҡ ине шикелле исеме. Трассанан баяғы ете саҡрым араны йәйәүләп ҡайтып килгәнендә, буранда аҙашып, хәлһеҙ булып йығылған ҡартты шул Аҡтырнаҡ, һөйрәп, оло юлға сығарған да бер ылауҙы саҡырып килтергән. Шул йәнлек нисек аҡылһыҙ булһын инде. Айыуға ла, бүрегә лә шул эте менән йөрөнө. Уны ныҡ яратты Әхмәт бабай. Үҙе нимә ашай, шуның менән генә һыйлай торғайны. Этте өйгә индерергә ярамай, бәлә килер, тиһәләр ҙә, һыуыҡ көндәрҙә өйөнә индереп йоҡлата ине. Бер һунарҙа шул эте яңғыҙаҡ бүре менән айҡашып китә. Әхмәт уны-быны уйлап тормай, бүрегә атып та ебәрә. Тик... йәҙрәһе үҙ этенә эләгә. Ихатаһына алып ҡайтҡас, ергә ятып иланы һунарсы. Зөбәйер үҙе күрҙе. Ҡарт: "Ғәфү ит, ғәфү ит, яңылышлыҡ булды", - тип этен ҡосаҡлап башынан тотоп һелкеткәндә үле Аҡтырнаҡтың арҡыры ҡыҫылып ҡалған теле саңға буялып бөткәйне. Шуны иҫләй ул. Баҡса артында ҡәҙерләп күмделәр. Ике аҙналап эсеп йөрөнө лә, шул ҡәбергә ятып, ҡарт та йән бирҙе.

Һөйәк кимерә торғас, ирҙең теше килеп төштө. Уны тотоп ҡарап торҙо ла кеҫәһенә һалды.

- Аҡыл тешелер. Хәҙер уның кәрәге лә юҡ. - Ятып, һөйәкте оҙаҡ яланы. Ҡосағына ҡыҫып ятты.

Бөгөн төш күрҙе. Асыҡ күрҙе. Соҡорға арҡандар килеп төштө, күп арҡандар. Кешеләр ҙә күп соҡорҙа. Берәү арҡан буйлап менеп китте. Икенсеһе, Авраам, мине лә тарт, тип үрмәләне. Менеп еткәне, Моисей, Давид, минән ҡалма, тип, тағы береһен тартып мендерә, тағы тарта. Икенсе арҡанда берәү менеп бара, таныш кеүек. Кем әле ул? Зөбәйер уға, Вәли, мине лә тартып мендер әле, тип үтенә. Вәли тигәне: "Ваҡытым юҡ", - ти ҙә өҫкә үрмәләй. Тик, нишләптер, менә лә алмай. Баҡһаң, икенсе берәү уны аҫҡа тарта икән. Тартыша торғас, арҡан өҙөлөп китте лә... тертләп уянып китте ир. Юҡ, уяна алмай бер булды.

- Уятығыҙ, уятығыҙ тим! Был төшөм миңә оҡшамай, - тип аҡырҙы, сәбәләнде. - Оҡшамай! Уятығыҙ. Уятығыҙ мине лә, уятығыҙ уны ла, уятығыҙ Вәли менән Ғәлиҙе, башҡаһын да. Был төшөм миңә оҡшама-ай!

## Алтынсы көн

Ир ыңғырашып көскә ҡалҡынып ултырҙы. Шешкән аяғын ҡарап алды. Шеше бөтмәгән, ләкин һыҙламай ине. Ҡаҙаҡ менән һыҙыҡ һыҙҙы. Ер битендә күренер-күренмәҫ кенә алтынсы һыҙыҡ барлыҡҡа килде. Һыҙыҡ аҫтынан ҡойолған тупраҡты усына йыйып, ауыҙына ҡапты.

"Ҡалай тәмле. Прәник тәме сығып тора, - тип уйланы. Һыҙыҡ өҫтөн ялап алды. Ирен ситтәре, теле һоро-ҡара төҫкә мансылды. - Ер тәмле була икән дә ул", - бармағы менән ипләп кенә соҡоп, тағы ауыҙына һалды.

- Их, кешенең сабырлығы етмәгән шул, әллә ваҡыты етмәгән. Тағы ике сирек ҡаҙыһа, һыуы ла сығыр ине. Ҡоҙоҡ эшләп, ҡаплап ҡуйыр ине. Мин төшмәҫ инем. Улай тип уйлаһаң, мин бөтөнләй тыумаҫ инем. Тимәк, үлемем ошонда булырға тейеш булғандыр. Был әҙәм ҡоҙоҡ ҡаҙмаған, ә кешегә ҡәбер соҡоған. Минең ҡәберем был. Ләхет кенә алаһы ҡалған. Уйлаһаң, кешене йәшәткән ҡоҙоҡ менән мәйет ятыр ҡәбер араһы улай алыҫ та түгел икән...

- Балам, һин үлергә ашыҡма!

Кемдең тауышы был? Уф, шул тиклем таныш, шул тиклем танһыҡ тауыш. Аҡылына еңеллек килдеме?

- Әсәй, һинме? Мин тотҡонлоҡта ятам. Һин шуны беләһеңме икән, әсәй?

Әсәһенең тауышы ап-асыҡ ишетелде.

- Беләм, балам, беләм. Һин өшөмәһен өсөн ҡояш булып мин янам бит, балам.

- Ә мин, йүләр, әбейҙәр сыуағы быйыл ҡалай оҙаҡҡа һуҙылды, тип ҡояшты әрләйем. Һыуһаным, шуға ғына, әсәй.

- Ямғыр яуҙырайым улайһа, балам. - Ямғыр яуған тауыш ишетелде. Юҡ ямғырҙа ир битен йыуҙы, һыу эсте. - Һыуһының ҡандымы, балам?

- Күпме эсһәм дә, әллә нишләп һыуһыным ҡанмай ҙа ҡуясы, әсәй.

- Ултырып ҡына минең менән ҡайнар сәй эсеп алһаң, килешер ине лә, бушамайһың шул, ваҡыт таба алмай бер булаһығыҙ бит.

- Әсәй, мин үлергә булдым. Ике үкенесем ҡаласаҡ. Береһе - һин, һине ҡайғыға һаласаҡмын. Икенсеһе - кредит, кем түләйәсәк уны? Ҡыҙыма үҫергә, уҡырға кәрәк. Ана шул ҡоршау тота. Кредитты түләр өсөн генә бынан сығырға кәрәк ине миңә, әсәй.

- Минең өсөн борсолмаһаң да була, балам, ҡайғырыр хәлдән уҙғанмын инде. Һин генә йәшәй күр.

- Был фани донъяға мине кредитҡа алмағанһыңдыр бит, әсәй? Әллә Аллаһ бабайҙан ғүмерҙе ҡуртымға ғына алып торҙоңмо миңә?

- Нишләп улай тиһең, балам?

- Бигерәк ауыр ҙаһа ғүмер кисереүе. Бар ғүмерем ошо тотҡонда үткән кеүек. Ҡол булып йәшәгәнмен. Байлыҡтың, әйберҙәрҙең, бисәнең, замандың ҡоло булып. Был минең ғүмер түгел һымаҡ.

- Мин ғүмерҙе һин йәшәһен өсөн биргәйнем. Ул хәләл, тик һинеке генә!

- Ә мин йәшәмәйем, көн итәм.

- Зарланма, улым, күктә ҡояш янамы әле?

Ир башын күтәрҙе.

- Көн бөгөн болотло, тик яҡты былай. Яна, эйе, яна. Ысынлап та, ҡалай миңә генә ҡарап тора ул. Йылы, рәхәт.

- Ҡояш йылыһын тойғас, зарланма. Гүрҙәгеләр уның яҡтылығын да күрә алмай.

- Нисек гүрҙәгеләр? Һин әле ул тарафтарға ашыҡма.

- Борсолма, улым, атайың мине бында көтөп торған, ул хөрмәләр өҙөп, өрөктәр йыйып ҡаршы алды инде.

- Атай? Мин уны ныҡ һағынам. Нисек атай ҡаршы алды, һин, һин...

- Юлға сыҡмай тор, улым, тинем дәһә. 273-сө автобусҡа ултырып киткәнеңде күрҙем мин.

- Минең илағым килә, әсәй.

- Күңелеңде бушат һуң, балам.

- Күңелем буш былай ҙа, бупбуш, уға күҙ йәше тейһә лә, таш ярсығы ҡағылһа ла, сиркәү ҡыңғырауҙары кеүек яңғырап китә, сөнки ул буп-буш.

- Кеше күңеле буш булмаҫ, балам. Шундай мәлең генәлер, улым, юлға сыҡмай тор, тигәйнем дә, тыңламаның.

- Беҙ бит байлыҡ йыйыр өсөн генә тыуғанбыҙ, әсәй, мин дә, киленең дә. Ни бысағыма бынау Иглин яланында ятҡан ер миңә. Тыуған ауылымда атай йорто буш тора.

- Баш ҡаланан йыраҡ тип, тыуған нигеҙҙе әллә нишләп һыуыттың шул, балам. Атайың, улдарыма ныҡлы нигеҙ, оло йорт ҡалдырам, тип тырышҡайны ла. Хәҙер етемһерәп ултыра инде. Ни мине алып киттең.

- Ауырыу килеш яңғыҙыңды нисек ҡалдырам инде, әсәй. Һин һаман...

- Зар түгел был. Хәстәреңде, йылы ҡарашыңды, килендең ҡайнар сәйен күреп йәшәнем, зар юҡ. Тик ауылды һағына торғайным. Һин киттең дә юғалдың, мин... Һеҙҙең эш тә эш, эш тә эш.

- Башымдан һыйпа әле, әсәй. Мин бында яңғыҙым бит.

- Баянан бирле һыйпайым бит. Ҡояш нурҙары менән, бына ошолай яғымлы ғына итеп...

Ир иҙрәп рәхәтләнеп йоҡлап китте.

## Алтынсы төн

Күк йөҙөн болоттар ҡапланы. Ҡараңғы булды бөгөнгө төн. Ир ҡуҙғалмай тик ятты. Күҙенәме, аңынамы ап-аҡ кейемле кешеләр күренде, аҙан тауыштары, Ҡөрьән доғалары уҡыған илаһи моң ишетелде. Ул урынынан да ҡуҙғалманы. Ыңғырашманы ла.

## Етенсе көн

Күк йөҙө ныҡ болотло ине. Ир, әле көнмө, әллә төнмө икәнен аңғармай тик ятты. Уға бер төрлө рәхәт тә ине. Аҡ кейемле кешеләр уны күтәреп ҡайҙалыр алып та киттеләр, берсә ҡаҡ ергә һалдылар.

Шул саҡ ҡоҙоҡ башынан кемдеңдер башы күренде. Дөрөҫөрәге, ир уны күрмәне. Ләкин "Зөбәйер, Зөбәйер! Утыҙ етенсе участок..." - тигән тауышты ул ишеткәндәй булды. "Соҡор башында кемдер бар" - был тауыш аңына шундай хәбәр ебәрҙе. Аҡ кейемле әруахтар юҡҡа сыҡҡандай булды.

- Һыу бир... - тип ыңғырашып, ир ҡуҙғалып ҡуйҙы.

- Ул тере, ул тере! Бында килегеҙ! - тип һөрәнләне берәү. Ир йайлап ҡына ҡалҡынып ултырҙы.

- Зөбәйер, һинме ул? - Бисәһенең тауышын таныны ир. Танымаңы ла.

- Һыу бир, фәрештә, - тип ҡулын һуҙҙы.

- Хәҙер, хәҙер, Зөбәйер, был мин, Әминә ләһә, - ҡатыны пластик шешә менән һыу төшөрөп ебәрҙе. Ир, уның боролмалы ҡапҡасын аса алмай, алдына ҡуйҙы ла тотоп тик ултырҙы.

- Хоҙайым, мең рәхмәт, минең үтенестәремде ишеттең, эс. Зөбәйер, эс, - тип өтөкләнде бисәһе. Үҙе ҡалҡынып кешеләрҙе саҡырҙы. Ир шешәне асты ла бер-ике генә йотом һыу эсте. Ҡарһаланманы.

- Ысын һыу, - был хәлдәрҙең өндә барғанын аңлай башланы, шикелле. Тын да алырға ҡурҡып, өҫтән бар хәлде ҡарап торған ҡатыны берсә иланы, берсә йылмайҙы.

- Үлмәйһең, үлмәйһең, һин тере, һин тере икәнһең, ҡәҙерлем минең. Эҙләмәгән еребеҙ ҡалманы. Полиция ла эҙләй, волонтер тигәндәре лә һәр соҡорҙо ҡарай. Йөрәгем бына ошонда алып килде. Ышанаһыңмы? Нисә көн Ҡырмыҫҡалыла эҙләнем. Эҙләнек. Беҙҙең бәхеткә генә күрә тере ҡалғанһың. Үлтереп кенә китмәһәләр ярар ине, тип доғалар уҡып бер булдым. Ҡайһы ерең ауырта, алтыным? - тип бер туҡтауһыҙ һөйләнде үҙе. Ирен тыны менән тартып алырҙай булып уға мөлдөрәп ҡараны. Ир тағы һыу уртланы ла:

- Әсәйемдең хәле нисек, фәрештә? - тип һораны.

- Фәрештә? Ҡыҙыҡ. Иҫәнаман ғына. Көн дә һине һорай. Юғалғаныңды әйтмәй торҙоҡ, эшкә китте, командировкаға, тип алдайым көн дә. - Ҡатын ни эшләргә белмәне. Тағы ҡалҡынып кешеләрҙе саҡырҙы. - Тағы соҡор ауыҙына ятып хәбәрен теҙҙе. Шулай хәбәргә әүрәтһә, ире ҡалҡыныр төҫлө ине уға. - Бөгөн иртән ҡәйнәм, 273-сө автобусҡа ултыр ҙа Зөбәйерҙе алып ҡайт, ти. Төшөмә инде, 273-сө автобус, тип асыҡтан-асыҡ итеп әйтте, ти һине. Аптырап, шул автобустың маршрутын ҡараһам, "пригород, Иглино" тигән. Сәриә ҡыҙым ғына түҙмәй илай. Аптырап, шуға ултырҙым да киттем. 37-се участок бар икәнен белгәс, ҡысҡырам-ҡысҡырам... Һин бында булғанһың, берҙән-берем минең. Ниндәй шатлыҡ!

- Өйгә ҡайтып арҡан алып кил, бар. Роналду тереләмме?

- Хәҙер алып киләм, хәҙер, аҡыллым. Кем уныһы, терелгәндер. Иң мөһиме, һин тере, ҡәҙерлем.

- Һин фәрештәме? - Ир быялаға әйләнгән күҙҙәре менән өҫкә баҡты. Тағы һыу уртланы.

- Эйе, эйе, фәрештәң, һинең фәрештәң, Әминә мин, Зөбәйер. Һине таптым.

- Мине әсәйем тапты. Мин ҡайҙа?

- Соҡорҙа. Хәҙер сығарам үҙеңде. Күпме әйтәм мин һиңә, һаҡланып, үҙеңде ҡарап йөрө, тип... Күпме әйтәм, тыңламайһың бит. Хәҙер сығарабыҙ!

- Мин сыҡмайым, мин соҡорҙа йәшәйем, - Ир һыуҙы уртланы ла яңынан бөгәрләнеп ятты.

- Нисек сыҡмайһың? - Ҡатын аптырап китте. Шунан эргәһендәгеләргә ҡарап өндәште: - Аҡылы зәғифләнә, тиҙерәк булығыҙ әле.

- Һыу, һыу кәрәк ине.

- Хәҙер ҡайтып сәй эсәбеҙ. Баллап, мәтрүшкәләп кенә, - ҡатын шулай әүрәтергә булды. Ир тағы тороп ултырҙы. Шунан стенаға йәбешеп, һыңар аяғына баҫты.

- Һин мине яратаһыңмы, Әминә? - тине ишетелер-ишетелмәҫ кенә. Үҙе ҡарашын ерҙән алманы. Тегеһе ишетте:

- Яратмаһам, ете ҡат ер аҫтынан табаммы һуң мин һине, иҫәрем.

- Мин ҡайтмайым! Был - минең соҡор! Мин ҡалам. - Ир яңынан ултырҙы. Һыу эсеп алды. Был юлы ғорт-ғорт килеп ҡомһоҙланып эсте лә шешәне ситкә ырғытты. - Өҫтә соҡор ҡаҙырға ла кешеләр кәрәк.

Кешеләр килгән тауыштар ишетелде. Арҡан төшөрҙөләр.

- Кәрәкмәй миңә арҡан. Буш арҡан. Һыу бирегеҙ, һыу.

Арҡанды яңынан тартып алдылар, шунан уға ҙурыраҡ һыулы шешәне бәйләп төшөрҙөләр.

- Ҡабаланып эсмә, өҙлөгөрһең, - тип кәңәш тә бирҙе ҡатыны.

Ир йайлап, оҙаҡ итеп һыу эсте. Уф, ҡалай рәхәт. Тамаҡ төбөнән ярып төшөп киткән шыйыҡса аңды, күңелде таҙартты, кәйефте күтәрҙе. Ҡараңғы көндә соҡор эсе нурланғандан-нурлана барҙы. Рәхәт ине. Ҡалған һыуҙы башына ҡойҙо, битен, күҙҙәрен һыпырҙы. Өҫтә уға ҡарап ҡатҡан ҡатынының күҙҙәренән йәштәр атылып сыҡты.

- Күк аҫтында бер нәмә лә мәңгелек түгел, тиҙәр, - ир үҙенсә һөйләнеп, күккә ҡарап ҡатты. Уны күҙәткән күҙҙәрҙе ул күрмәне лә. - Бына ғазап, күҙ йәштәре мәңгелек, шуларҙы йотоп ебәрер өсөн бер йотом һыу, шуларҙы йыуып төшөрөр өсөн бер ус һыу етә. Бына нимә ул мәңгелек! Хәҙер бына таҙарындым.

- Тотон арҡанға! - тигән тауышҡа тертләп китте. Шунан өҫтә бер нисә кеше торғанын шәйләне.

- Миңә башҡа бер нәмә кәрәкмәй. Ҡалдырығыҙ мине ошонда! Мин сыҡмайым, - тине Ир.

- Тотон, тиҙәр һиңә. Баҫҡыс килтерегеҙ, үҙем төшмәйсә булмай, - тип екеренде кемдер.

- Кәрәкмәй, кәрәкмәй! Бер аршин ер бар, һыу бар. Мин бында ҡалам. Мин ҡалам! Үҙегеҙ өҫкә менегеҙ! - тине Ир...

Төбәлгән ҡараштарҙан ҡаушап, үҙе стенаға һыйынды ла, һыҙлаған аяғы менән ҡулъяулыҡҡа төрөлгән йомғаҡты иҙгәнсе баҫҡанын да һиҙмәне...

**(Аҙағы. Башы 11-17-сы һандарҙа).**

✓ *Шулай ҙа башҡорттар бөлгөнлөккә төшкән колхоздарынан, үҙ ауыҙҙарынан өҙөп, илбаҫарҙарҙан хәтһеҙ ҡаза күргәндәргә, донъяһыҙ тороп ҡалғандарға ебәреү өсөн дүрт йөҙ баш самаһы тана-торпо йыйҙы.*



ТАРИХ ҺӨЙЛӘЙЕМ...

# ӘҘӘМ ЫШАНМАҪЛЫҠ СӘЙӘХӘТ



1944 йыл. Апрель. "Бәләкәй түбә", "Яйыҡ", "Ҡалҡан" колхоздары рәйестәре Ишмәкәй ауылынан Мөхәмәҙи Буранбаевты, Илтабандан Әхмәт Закировты, Ҡалҡандан Фәрзәнә Йоносованы саҡыртып ала. Мөхәмәҙи туғыҙ йәшендә инәйһеҙ ҡалған, тормоштоң әсеһен татырға өлгөргән етем. Бығаса мал ҡарап, ер тырматып, ашлыҡ һуғып, башҡа хужалыҡ эштәрен бөтөрөшкән ун алты йәшлек үҫмерҙәргә талап бер үк:

- Ҡустым... һеңлем... Оло ағайҙарығыҙ һуғышта. Ҡайтҡандары гәрип. Эш кешеләре етешмәй. Дошмандан азат ителгән ерҙәргә мал ҡыуышырға һеҙҙе лә ебәрмәй әмәл юҡ. Иртәгә үк Учалыға заготскотҡа барығыҙ...

Үҫмерҙәр ниндәй оҙон, ҡыйын юлға сығасаҡтарын да белмәй, уны күҙ алдына ла килтермәй. Туйғансы ашарға алырға аҙыҡ-түлеккә ҡыҫаныс. Фәрзәнәгә өйҙән һоло ононан бешерелгән ике йәймә, Мөхәмәҙигә бер-нисә һоло күмәсе бирәләр. Әхмәт байыраҡ, уның тоҡсайында - биш килограмм һоло. Үҫмерҙәр ошо ризыҡтарын тотоп, өҫтәрендә бер ҡат күлдәк-ыштан, бишмәт менән Учалы ауылындағы мал йыйыу урынына юлға сыға.

Яҙ иртәләгән, ҡар ереп бөткән. Азат ителгән ерҙәргә оҙатырға колхоздарҙан тана-торпо йыялар. Килгән малды ябып, ас тотоп булмай, көтөргә алып сығалар. Шул ваҡытта Фәрзәнә зыяратта бер ябыҡ эттең бала ҡулын кимереп йөрөткәнен күрә. Зыҡ ҡубып, шалашып, эттән ҡулды һалдырып алалар һәм ерләйҙәр. Күрәһең, бала үлгәс, ҡышҡы ҡаты һыуыҡта туң ерҙе соҡоп ҡәбер ҡаҙырлыҡ та ир-ат булмаған. Әле ас эт арлы-бирле күмелгән мәйеттең ҡулын умырып алған, һуғыш юҡ ерҙә ошондай йән өшөткөс күренеш, ә яу ҡырҙарында хәлдәр ҡот осҡостор инде.

Яйыҡ буйында ла халыҡ ас-яланғас көндәр кисерә, үҫтергәнде-йыйғанды фронтҡа оҙата, әле ҡара ергә баҫыуҙы дүрт күҙ менән көтә. Шулай ҙа башҡорттар бөлгөнлөккә төшкән колхоздарынан, үҙ ауыҙҙарынан өҙөп, илбаҫарҙарҙан хәтһеҙ ҡаза күргәндәргә, донъяһыҙ тороп ҡалғандарға ебәреү өсөн дүрт йөҙ баш самаһы тана-торпо йыйҙы. Бәлә-ҡаза күргәндәргә, ҡайғы кисергәндәргә ярҙам ҡулы һуҙыу башҡортта әүәлдән килгән изге йола. "Кешегә шәфҡәт ит, уҙамаңға хөрмәт ит" тигән аманат әйткән олатайҙар. Ә һыйыр биреү ғәйәт ҙур шәфҡәт. Һыйыры барҙың һыйы бар бит.

Ошондай шәфҡәт өсөн тупланған мал өс көтөүгә бүленеп, һәр көтөүҙе ете кеше оҙата барырға тейеш була. Гуртоправтар, йәғни көтөү башлыҡтары итеп Әһел Мөбәрәков, Ғәбиҙулла Кәлимуллин, Петр Петухов тәғәйенләнә. Танаулы булһын, юғалмаһын өсөн таналарға тамға һуғыла. 5 апрелдә, төштән һуң, егерме бер кеше өс көтөүҙе әйҙәп, меңәр-меңәр саҡрымлыҡ юлға сыға. Әйҙәүселәр йәйәү. Тик сиған арбаларына оҡшатып тауар менән көпләнгән алты арбаға аттар егелеп, юл кәрәк-ярағы тейәлгән, бер мылтыҡ та һалынған. Баш осонда ҡыҙыл әләм елберҙәй. Ағас күсәрле башҡорт арбалары ғәжәп ныҡ булған икән, ҡырылмай-нитмәй Украинаға хәтле тәгәрәй.

Төрлө хужалыҡтан йыйылған мал буйһонмаҫҡа итә, ҡасыу яғына ҡайыра. Ҡаскандарын ҡыуып, кире бороп, Мөхәмәҙи, Әхмәт, юлдаштары айһылдағансы йүгерә. Уларға ололарҙан-оло, изгеләрҙән-изге бурыс йөкмәтелгән, уны намыҫ менән үтәргә кәрәк. Арыһаң да, хәлдән яҙһаң да, таш яуһа ла.

Тәүге көндө ун биш саҡрымлап ара үтеп, Иманғол ауылы янында туҡталыш яһайҙар. Иртәгеһенә таң һарыһынан ҡуҙғалалар. Сыбыртҡылар шартлай, "һәш-һәш", "әйҙә, әйҙә" тигән тауыштар тынмай, тамаҡтар ҡарлыға. Оҙон көн буйы тәпәйләп, аяҡтар талып, арып, арманһыҙ булалар. Байрамғол ерендә ял итәләр. Өсөнсө көндө Ҡаҙаҡкүл күперен сығып, ялға туҡтайҙар. Тәндәре яҙылырға ла өлгөрмәй, Белореткә табан йүнәләләр, текә, оҙон-оҙон үрҙәр үрләйҙәр, тау-түбәләрҙе артылалар, ҡара урмандар үтәләр. Көтөүҙәрҙе бер-бер артлы алып баралар, бер баш малды ла күҙҙән яҙҙырырға, юғалтырға ярамай.

Көн артынан көн үтә. Урау булһа ла юл буйлап китәләр. Апрель айы бит әле, юлдар бысраҡ. Тиренән тегелгән аяҡ кейемдәре, сарыҡтар еүешләнеп, ебеп, эшләктән сыға. Белореттың ауыр юлдарын үтеп, Ишембай еренә аяҡ баҫалар. Маҡарҙа һәр кемгә бер нисәшәр пар сабата һатып алалар. Улар ҙа оҙаҡҡа сыҙамай, таушала. Үҫмерҙәр ялан аяҡ та мал ҡыуа, ҡарттар әйтмешләй, нужа ҡалас ашата. Ләкин юлсылар ярым-яңғыҙ түгел, бер-береһенең хәленә керер, кәйефен күтәрер, донъяла күпте күргән һәм башынан уҙғарған юлдаштары бар. Аҡҡужанан Әүәл ҡарт, Әсмә әбей, Сәфәрҙән Таһир ҡарт, Ураҙҙан Разия еңгә, Ҡоҙаштан Таһира Ямалетдинова, Илтабандан Зыя Сәғитов, Ахундан Рәсүл Дауытов, Кирәбенән Шереметов, Вознесенканан әсәһе менән урыҫ малайы Нил... Нил Мөхәмәҙиҙе, Әхмәтте урыҫсаға өйрәтә, башҡорт араһында йәшәгәс, башҡортса йырлап та ебәрә:

*Алтын мәсет яналыр,*
*Алтындары тамалыр.*
*Алтын кеүек атаҡайым*
*Төрмәләрҙә яталыр.*

Ниңә шулай йырлағандыр. Тыңдаштәре төпсөнмәй, ирмәк күреп, уны йырлата ғына. Бәлки, Нилдең атаһына ла "халыҡ дошманы" ярлығы йәбештереп, ҡулға алған, төрмәгә япҡан булғандарҙыр. Бәлки, ул йырҙы икенсе берәүҙән отоп алғандыр. Ә Таһир ҡарт иһә сабата кейеп һәлпәндәүҙе йырға һалып:

*Лапти пляшут,*
*Лапти пляшут,*
*Лапти песенки поют, -*

тип урыҫса көй һупалай. Ҡалай итеп булһа ла күңелдәрҙе күтәреп, аҙымдарҙы еңеләйтеп атлайҙар ҙа атлайҙар. Барыу юлын һыулауға ҡарап билдәләйҙәр, был хаҡта ауыл кешеләренән белешәләр. Әлбиттә, һыйыр аяғы менән әллә ни юл ырамай. Әммә көн һайын алға барғас, байтаҡ ер-һыу үтәләр. Мал ҡыуыусылар тотҡарланырға тырышмай, мәгәр Өфө эргәһендәге Сиған яланында оҙаҡ ҡына туҡтап торалар.

Юлдың ыҙаһы күп. Башҡортостанды сыҡҡансы Ағиҙел йылғаһын биш мәртәбә кисәләр. Малдар йөҙә, ағып, арғы ярҙың төрлө урындарына барып сыға. Йүгерешеп йыйып килтерәләр. Ололарҙан кемдер һамаҡ та әйткеләй:

*Ат башына көн килһә,*
*Ауыҙлығы менән һыу эсер.*
*Ир башына көн килһә,*
*Сабатаһы менән һыу кисер.*

- Даръяға төшөү нимә ул? Башың төшһә, башмаҡ булырһың, күлдән һурпа эсерһең, - тип мәрәкәләп яуаплайҙар. Әле ирҙәр генә түгел, ҡатынҡыҙҙар ҙа сабатаһы менән һыу кисә, ергә ятып һыу эсә. Иҙел кискәс, үҫмерҙәрҙә лә иҫ керә. Донъяның әсесөһө бына ҡалай була икән...

Төнгөлөккә мал ашарлыҡ ҡау, япраҡ булған ерҙәргәрәк туҡтайҙар. Ҡатынҡыҙ һыйырҙарҙы, быҙаулаған таналарҙы һауа. Һөт-ҡаймаҡ мул, теләгәнсә эсәләр. Ойотҡоһон сепрәк тоҡсайҙарға һалалар, һыуы һарҡҡас, эремсеген ашайҙар. Дегет-фәлән булмағас, шығыр-шығыр иткән арба тәгәрмәстәрен дә ҡаймаҡ менән майлайҙар. Һөт менән генә тамаҡ туймай, әлбиттә. Икмәк бешереү йорто булған урындарҙан икмәк тә һатып алалар.

Туҡталыштарҙа усаҡ яғалар, тирәләй ултырып йылыналар. Төндәрен һалҡын. Шуға ла усаҡ урындарының утлы көл-күмерен һыпырып ташлап, йылы ергә ятып, серем итәләр. Кейеменә ут тоҡанып, кемдер янып та китә яҙа. Малайҙар аҫтарына бишмәттәрен һалып тәгәрәй. Өшөп, бер-береһенә һырығышалар. Мөхәмәҙи Разия еңгәгә арҡаһын терәп йоҡлай. Таһир ҡарт күберәк ҡарауылда тора. Көндәҙҙәрен һәүкәштәр алға барһа, төндәрен ниңәлер артҡа борола, кире китмәксе итә. Мал да шулай тыуған төйәгенә тартыла. Юл йөрөүгә лә күнегәләр. Аттарҙы егә башлаһалар, иң тәүҙә ҙур ала һыйыр ҡуҙғала, шунан ятҡан урындарынан башҡалары тора, юлға ыңғайлай. Ала һыйыр - көтөү башы.

Ағайҙар малайҙарға ағайлыҡтарын күрһәтә, тегеләй-былай йүгертә. Эштән кеше үлмәй ул, тип, егәләр генә. Көн буйы йәйәү барып, мал ҡыуып арыһалар ҙа, көтөү башлыҡтары йәлләмәй төнгә ҡарауылға ла баҫтыра.

- Шулай бер ҡарауылда торғанда йоҡоға талғанмын... Гуртоправ Ғәбиҙулла ағай яңағыма һалмаһынмы. Тәкмәсеп киттем. Илағыларым килде. Аяҡ аҫтындағы дүңгәк һымаҡ ҡарауына йәнем көйҙө, һарыуым ҡайнаны. Яҡшылап ҡына уятһа, һәйбәтләп кенә өндәшһә булған да бит. Юҡ, яңаҡҡа йоҙроҡ менән тондороу кәрәк. Йоҡлап, малды ҡарауһыҙ ҡалдырыуыма ныҡ асыуы килгән булғандыр инде уның да, - тип, Мөхәмәҙи ағай күңел яраларын да һөйләп алды. Рәнйеү онотолмай икән.

Йөрөгәндең юлы үтә. Гел таш юлдан, оло юлдан баралар, гел яланда ҡуналар. Ялан уларҙың өйө. Ямғырҙар яуғанда өҫтәре лысма һыу булып, иҫке-моҫҡо кейемдәренән һыу ағып, тамып тора. Өшөйҙәр, дер ҡалтырайҙар. Йонсоу үҙәктәренә үтһә лә, әллә нисек ауырымайҙар. Тәгәрәгән ташҡа үлән үҫмәҫ, тигәндәй, хәрәкәттә бәрәкәттер, туктауһыҙ йөрөгән кешегә ауырыу йоҡмайҙыр, һалҡын теймәйҙер. Әсе елдәр иҫеп, ҡар ҡатыш ямғыр яуғанда бер генә мәртәбә малдарҙы ҡураларға ябып, йылы өйҙә йоҡларға насип була. Башҡа ваҡытта тупраҡ-япраҡ - түшәк, тәбиғәт ҡосағы - ҡосаҡ.

Күрмәгәнде күреп, Волга буйына килеп етәләр. Куйбышевтан түбән Духовенск тирәһендә оло һыуҙы паром менән сығыуҙы бер нисә көн көтөп көтөк булалар. Башҡа яҡтарҙан да мал ҡыуалар. Йылға йәйрәп ята, иртәнсәк күҙгә күеүк йылтырай, көндөҙ иҫәпһеҙ тулҡындарын ҡаға. Яр буйы ҡомлоҡ. Малды ситтәрәк йөрөтөп ашаталар. Ағас япрағын ғына көйшәй торғас, таналар ябыға. Ниһайәт, паромға инергә учалыларҙың сираты етә. Әммә көтөүҙе туплағансы, быларҙың сиратына ҡуй көтөүе үтеп өлгөрә. Паром әйләнеп, һарыҡтар ҙа, кешеләр ҙә бата. Ығы-зығыла уларҙы учалылар тип фараз ҡылып, тыуған яҡтарына үлеүҙәре тураһында ҡайғылы хәбәр ебәрәләр.

Әммә учалылар Хвалынск ҡалаһына табан Волганы имен-аман йөҙөп сыға. Тик бер башмаҡ ҡына паромдан ҡолап ағып китә. Ниндәйҙер күл буйына етеп, үләнле ерҙә бирешкән малды бер нисә көн буйы ашаталар. Алда юл бик оҙон әле. Тирә-йүндән бала-саға һауыт-һаба тотоп һөт алырға килә. Һарыҡ ҡыуыусыларҙы ла һөт менән, ҡатыҡ менән һыйлайҙар. Күҙенә аҡ һалған, һуҡырайған малды тапшыралар. Юлда таналар быҙаулай. Быҙауҙарҙы арбаға һалып, яҡындағы хужалыҡҡа тиклем алып барып һәм тапшырып китәләр.

**Сәлимйән БӘЗРЕТДИНОВ.**
**"Ғүмер артында - ғүмер" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

ИНТЕРНЕТТАН



# НАСАР ЙОҠЛАҺАҢ...

■ Төндә насар йоҡлаһаң, йоҡларға ятыр алдынан физик күнекмәләр эшләп ал, тип кәңәш итә ғалимдар. АҠШ-ның Йоҡо милли фонды үткәргән һорау алыуҙарҙа ҡатнашыусылар яуаптары буйынса бер нисә төркөмгә бүленгән: уларҙың ҡайһылары күнекмәләрҙе даими яһаған, ҡайһылары еңелсә генә спорт менән шөғөлләнгән, ҡайһылары бөтөнләй ҡыбырларға яратмаған. Кем ниндәй ҙә булһа күнегеү төрө яһаған, улар яҡшыраҡ йоҡлаған. Кемдәрҙер матур төштәр күреүен дә билдәләгән. Көнөнә 10 минут ҡына йәйәү йөрөү ҙә йоҡоноң сифатын күпкә яҡшырта, ти белгестәр.

■ Альберта университеты ғалимдары депрессияны пациенттың тауышына ҡарап билдәләргә өйрәнгән. Уларға яһалма интеллект ярҙамға килгән. Билдәле булыуынса, тауыш тембрында кешенең кәйефе тураһында мәғлүмәт һалынған була. Мобиль ҡушымта хужаһы телефондан һөйләшкәндә тауыш өлгөләрен йыйып бара һәм уның кәйефе, шулай уҡ депрессия барлығы йә юҡлығы тураһында маркерҙар билдәләй. Был технология әлегә камиллаштырыла һәм киләсәктә ул медицина персоналдарына дауа үткәреү өсөн ярҙам итеүе мөмкин. Эксперттар әйтеүенсә, депрессия һөҙөмтәһендә кеше эшкә һәләтлелеген дә юғалтыуы бар. Шулай уҡ суицид осраҡтарының күбеһе депрессия кисереү һөҙөмтәһендә башҡарыла.

■ Банан, ноҡот борсағы һәм ер сәтләүегенә бай диета балаларҙың эсәк миклофлораһын яҡшырта. Дөйөм алғанда, бындай диета уларҙың һөйәктәре, баш мейеһе үҫешенә ыңғай йоғонто яһай. Был продукттарҙы пребиотик тип әйтергә лә була, тип белдерә Вашингтон университеты белгестәре. 12-18 айлыҡ балаларҙы күҙәткәндән һуң улар ошондай һығымтаға килгән. Банан, соя, ер сәтләүеге оно һәм ноҡот борсағы пастаһынан торған рацион иң ҡулайлыһы тип табылған. Ә бына дөгө, ҡуҙаҡлылар, киреһенсә, эсәк микрофлораһына зыян итә.

■ Кафе һәм рестарандарҙың йәйге верандаларында тукланыу сәләмәтлеккә зыян килтерә, тип иҫкәртә Роспотребнадзор. Ризыҡҡа ҡунған ҡала саңы гигиена талаптарына бер нисек тә тура килмәй. Асыҡ һауалағы ауыр металл тоҙҙары, бигерәк тә ҡурғаш менән кадмий зарарлы. Мәҫәлән, ҡурғаш ҡыҙыл ҡан тәнсәләре барлыҡҡа килеү процесына тәьҫир итеп, эсәк, ҡан тамырҙарына зыян итә. Ҡурғаш менән ағыуланыуҙан баш мейеһе эшмәкәрлеге лә үҙгәрә, хатта когнитив һәләттәр, хәтер юғалыуы, галлюцинациялар барлыҡҡа килеүе ихтимал. Ҡурғаш машиналар бүлеп сығарған газда була. Кадмий организмға ризыҡ һәм тәмәке төтөнө аша әләгә һәм үпкәләргә ултыра. Ул канцерогендар менән дә хәүефле. Ауыр металдарҙан тыш, автоюлға яҡын һауала ҡором, күмер өлөшсәләре, шина туҙаны һәм асфальт ҡатламы туҙыуы һөҙөмтәһендә бүленгән матдәләр бар. Аллергия менән ауырыусыларға ла йәйге верандаларҙа ашау кәңәш ителмәй, үҫемлектәрҙең һеркәһе, микроорганизмдар күҙәнәктәре әләгеүе мөмкин.

ЙОЛА ТОТҠАН ЯҘЛЫҠМАҪ!

# МИЛЛИ РИЗЫҠТАРҘА - ЙӘНШИШМӘ ТӘМЕ

**Сибай ҡалаһының тыуған яҡты өйрәнеү музейы ул көндө башҡорт халҡының милли ризыҡтарына бағышланған тәрбиәүи сара үткәрҙе. Музейҙың ғилми эштәр бүлеге мөдире, тарих фәндәре кандидаты Миңнур Шаһиева телмәр тотоп, былай тине: "Беҙҙең ҡаланың "Аманат" ағинәйҙәр ойошмаһы ағзалары ысын мәғәнәһендә мәҙәниәтебеҙҙе күтәрмәләүселәр ролен үтәй бөгөн. Февраль айында беҙ улар менән берлектә "Тәмле" башҡорт милли аштары күргәҙмә-бәйгеһен үткәрҙек. Сара бик уңышлы үтте. Ҡатнашыусылар күп булды. Был эште дауам итеү, йәштәргә, уҡыусыларға ла өйрәтеү маҡсатында бына бөгөн ошо уҡ темаға тәрбиәүи дәрес ойошторорға булдыҡ..."**



Һәм бына беҙ музей хеҙмәткәрҙәре һәм "Аманат" ағинәйҙәр ойошмаһы (етәксеһе Венера Йәнбәкова) ағзалары ойошторған үҙенсәлекле сараны тамаша ҡылабыҙ. Табын-күргәҙмә хужабикәләре башта ҡунаҡтарға һәр ризыҡты тәмләтеп сыға. Абхазия туристарҙы шарап һәм бал дегустациялары менән ылыҡтырһа, сибайҙар ҡымыҙ, айран, ҡатыҡ, ҡорот, ҡойолтмаҡ, ҡаймаҡ тәмләтеү буйынса билдәле төбәк булмаҡсы. Бер ниндәй санэпидстанция ла кәрәкмәй, сөнки улар әҙерләгән ашамлыҡтарҙа Йәншишмә тәме - Ирәндек сәскәләренең шифаһы һәм таштарының көүәте бар. Һәм улар бар сырхауға дауа ғына.

Тәрбиәүи сараға егермеләп аш-һыу оҫтаһы һәм Башҡорт дәүләт университетының Сибай филиалынан утыҙлап студент һәм уҡытыусылар саҡырылған. Егеттәр һәм ҡыҙҙар башҡорт милли аш төрҙәре хаҡында ишетеп тә, күреп тә, тәмләп тә белә, әлбиттә, ләкин ағинәйҙәр был ризыҡтарҙы һаулыҡҡа дауа һәм етеш донъя көтөү ысулы булараҡ һөйләп, йөкмәткеле дәрес ойошторҙо. Дәресте алып барыусы Миңнур Шәриф ҡыҙы һәр сығышҡа ҡушып, урындағы йолаларға бәйле мәғлүмәттәр өҫтәп торҙо.

Сараны күптән түгел генә ошо ойошмаға тупланған Төйәләҫ биҫтәһе ағинәйҙәре башланы. Иң башта улар буҙа эсемлеген нисек аңнат һәм сифатлы итеп эшләүҙе тасуирланы: "Һолоно йыуып, киптереп, блендерҙан он итеп үткәреп, ун минут ҡына ҡайнатаһың. Һыуынғас, эре иләктән һөҙөп кенә алаһың, шунан бер литрына бер стакан самалап, яңы кефир һалаһың, бер ҡалаҡ шәкәр өҫтәйһең. Бер көндә ҡабарып әҙер була, ҡырҡыуланмай, һыуһыңға ла, дауаға ла шәп була..." Шунан бызырлап ҡына күпереп торған буҙаны стакандарға ҡойоп, табындағыларға тараттылар. Йәштәр ҙә, өлкәндәр ҙә бик яратып тәмләп эсеп ҡуйҙы.

Тағы бер Төйәләҫ ағинәйе таныш еҫле дарыу үләненән әсетке күтәреп килгән: "Беҙ ҡомалаҡ тураһында ла онотмайыҡ әле, - тине ул. - Ҡомалаҡ әсеткеһе - В витамины сығанағы. Арыш оно йә беренсе сортлы бойҙай оно, йә көрпәһе менән болгап, әсетке (икмәк башы) яһайбыҙ, уға ҡомалаҡ ҡайнатҡан эҫе һыуҙы ҡоябыҙ. Бик файҙалы эсемлек был, сама белеп кенә икешәр аҙна эсеп алғанда, кеше бермә-бер нығына..."

Өсөнсө ағинәй "Корот ыҫлау" хаҡында һөйләп ташланы. Ыҫланған ҡорот тураһында ишетеү менән үк ауыҙҙан һыуҙар килә башлай. Кем ярата, кем юҡ, әммә бер кем дә битараф ҡалмай ыҫланған ҡорот алдында. Әле лә ҡоротто бармаҡ башылай ғына бүлгеләп, тамашасыларға тәҡдим иттеләр. Бер кем дә баш тартманы, шундуҡ тел осона оҙаттылар ҙа, ҡәнәғәт сытырайып, тәмләп ултырҙылар. Тел тигәндән, был бәйгене "шаян тел биҫтәләре ярышы" тип тә атап булыр ине. Ағинәйҙәрҙең телмәрендә мәҡәл, әйтем, шаян лаҡаптар уйнап ҡына торҙо, тамашасы гөрләшеп ҡул сапты. Бына шулай таныҡ бит туған тел тылсымы - башҡорт телендә үткән халыҡсан байрамдарыбыҙ шул хәтле ихлас, йәнле, йор һәм тапҡыр телле була.

Шунан Сибай ағинәйе Фәниә апай Хәмитова халыҡҡа бер риторик һорау ҡуйҙы: "Йәшәү эликсиры, "ҡансәйе" беҙҙең үҙебеҙҙә бар, беләһегеҙме? Бына ул (быяла банка ҡапҡасын аса): бәпембә плюс шәкәр, йәки бәпембә плюс бал! Рецебы: бәпембә сәскә атҡас, иртәнсәк, таҙа ғына урындан йыйып, ҡат-ҡат итеп банка төбөнә теҙәһең, ҡатламы һайын шәкәр һалаһың да ағас төйгөс менән төйәһең, төйәтөйә тултыраһың да сепрәк ҡаплап, ҡараңғы урынға ҡуяһың. Бәпембә һуты йәйлап шәкәргә йәки балға күсә, йәшкелт-һоро "бал" - бөтә ауырыуҙан дауа. Уны яртышар балғалаҡлап ҡына йылы һыуға болғатып, көнөнә өс мәртәбә ун көн эсәһең. Бик килешә, организм таҙара..."

Төйәләҫ ағинәйҙәре етәксеһе Сәғиҙә Байназарова һүҙ башлай: "Сөсикмәкте ғаиләһен, балаһын уйлаған һәр әсә, һәр башҡорт ҡатын-ҡыҙы бешерә белә. Хәҙистә лә, Мөхәммәт бәйғәмбәр сөсө икмәк кенә ашаған, тип әйтелә бит. Сөсикмәк бешереүҙә һәр хужабикәнең үҙ мәнеһе барҙыр, минең әүәлдән белгән бер ысулым былай: 1 сынаяҡ (200 мл) һөт (әсегән булһа, тағы һәйбәтерәк), шул хәтле йылы һыу, ярты сынаяҡ кефир, 2-3 ҡалаҡ ҡаймаҡ, йәки аҡ май йәки шыйыҡ май, бер балғалаҡ тоҙ, ярты балғалаҡ аш содаһы, бер йомортҡа ла һытып һалырға була. Яҡшылап үҙләнгәнсе ун минутлап йомшаҡ ҡына ҡамыр итеп баҫаһың. Газ плитәһе мейесендә ҡырҡ минутта бешеп сыға, алғас та таҫтамалға урап, яйлап һыуытығыҙ..."

"Тәмле" бәйгеләрендә ал бирмәгән Римма Ғәзимова иһә (Баймаҡ районы Төркмән ауылынан) бар халыҡты көлдөрә-көлдөрә "Тыжыҡ" тигән ашамлыҡ тураһында һөйләне. Ашап ҡараманыҡ, әммә шуны белдек: "Малдың ҡарынына йә күҙләнсеккә (күҙлекәй, күҙҙекәй, тиҙәр) иң тәмле ит-майы, эсәк йә йөрәк-бауыры ваҡлап тултырыла ла тыштан бәйләп ҡуйыла. Бүрек хәтле тыжыҡты ҡаҙанда бешереп алып, эҫе килеш кенә ҡырҡып таратып ашайһың".

Тағы бер аш-һыу тураһында шулай яңғыраттылар: "Беҙҙекеләр арымай, ашағаны - һары май! Һары майҙың файҙаһын һөйләп тороу артыҡ. Тибет монахтары һәр бер дауаға "чи майы" ҡуша, ти, баҡһаң, "чи майы" - ул беҙҙеңсә иретелгән һары май икән. Ул яҡшы һаҡланһа - ҡараңғы, һалҡын, елдәң ерҙә торһа, ете йылдан һуң да боҙолмай. Ете йыл түгел, ете ай ҙа һаҡламайбыҙ шул һары майҙы, ашап бөтәбеҙ йә һатып бөтәбеҙ. Уә!"

Ағинәйҙәр өҫтәл уртаһына өр-яңы ап-аҡ көбөсәкте мендереп ҡуйғас, барыбыҙ ҙа һағайҙыҡ. Был тиктәҫкә түгел! Көбөсәктә аҡ май бешәләр бит! Быны белмәгән башҡорт барҙыр, әммә һирәктер. Иң затлы аҡ май һәм таныҡ айран шулай яһала. Нисек бешелә әле аҡ май? "Өс литр йылы һөткә бер банка әсеңкерәгән ҡаймаҡты һалып туҡыйбыҙ!" Шунан? "Шул! Туҡып-туҡып, айраның ҡойоп алаһың, шунан аҡ майын да һоҫоп алырға ғына ҡала..." Ҡыҫҡаһы, сараға йыйылыусыларҙың барыһы ла бер секундҡа тынып көтөп торҙо - барыбыҙ ҙа көбөсәктән сыҡҡан аҡ майҙы тәмләнек! Шәп булды.

✓ *"Иғтибар итегеҙ, милли биҙәктәребеҙ бөгөн күҙ алдында. Һәр биҙәк, орнаментта оло мәғәнә ята. Таҫтамалдағы, аҫалы балаҫтағы орнаменттар уҡыла, уларҙың мәғлүмәт тапшыра торған "теле" бар.*



Ҡурайсы Марат Тулыбаевтың апаһы Ғәлиә ханым Вәлиева сепаратор менән һөт үткәреп, ҡаймағын айырып күрһәтте, ойомос (ойотҡо, ойотҡан) һалып, яңы ҡатыҡ та тәмләтте.

Сибай ағинәйе Венера Йәнбәкова ла февраль айында йыйылыусыларҙы шаҡ ҡатырған булған: биш метрлы (!) тултырма бешергән. Эслеген боронғоса әҙерләгән ул, йәғни эре малдың үпкә-бауыр-йөрәген балта менән ваҡлап сапҡылап, өсәр ҡарыш һайын бәйләп, эсәккә тултырған, бер юлы оло ҡаҙанда бешереп алған, аҙаҡ бәйләнгән еренән ҡырҡып бирҙе, ярты Сибайҙы һыйлаған. Был юлы Венера апай тултырманы "ҡыҫҡа" иткән, ни бары бер метр ғына ине! Ана шулай шаянлыҡ һәм тапҡырлыҡ менән туй аштары (сермә, йүрмә һ.б), сәксәктәр ("Ҡуштау" бауырһағы) бешереп, килгән туристарҙан бигерәк үҙ-үҙҙәрен таң ҡалдыра беҙҙең оҫта ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ.

Ошо урынға еткәс, дәрес тамам һымаҡ ине, ләкин шунда Сибай ҡалаһының "Алтын" биҫтәһендәге ағинәйҙәр төркөмө етәксеһе Гөлшат Тауылбаева ҡалҡып сыҡты. Улар оло бәлеш, ләүәш, эс-ҡарындан пирожкизар килтергән. Бәлештәрен ваҡлап ҡырҡып, халыҡҡа тараттылар, әҫе итеп үлән сәйе яһап бирҙеләр, шулай итеп "төйәләстәрҙе ҡаҡсалҡан бәрҙеләр". Уларҙың йор шаяртыуҙарына музейҙағылар гөр килеп көлдө.

Быға яуап иткән һымаҡ, Төйәләс ағинәйе "бик важный һәм хәтәр шәп" хәбәре онотолоп ҡалғанын әйтеп, уртаға сыҡты: "Йәшерен-батырын эш түгел, борондан "Мейе кибеү" тигән төшөнсә бар, хәтер яҡшырһын өсөн әүәлдән баш түбәһенә һары май, тауыҡтың эс майын иретеп һалғандар, сәй ҡағыҙы (фольга) менән ҡаплап торғандар. Бигерәк тә мунсанан һуң быны эшләү мотлаҡ: сәс тамырҙарына файҙаһы ҙур, баш тиреһе лә һауыға, бигерәк тә хәтер яҡшыра, сөнки ҡан тамырҙарына ла һары май тейешле витамин-аминокислоталарын, йәғни үҙенең ҡеүәтен еткерә. Һары майҙы шуға ла данлайбыҙ. Булды хәҙергә, ҡалғанын өсөнсө бәйгелә һөйләрбеҙ!"

Ысынлап та, мейе кибеп китте, тиешеп, барыһы ла тәнәфес һораны.

...Урамда 2021 йыл. Ун йыл элек ағинәй тигән ойошма юҡ ине әле, әммә дәрте, белеме ташып торған, бөтә йөрәге менән халҡына хеҙмәт итергә теләгән ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ ошо ойошма сафына баҫып, алға сыҡты. Улар үҙ сәләмәтлеген генә уйламай, йәштәрҙе, балаларҙы уйлай, алыҫ сәйәхәттәргә йә модалы кейемгә иҫе китмәй, ә ҡәҙерле өләсәйҙәре кеүек, боронғоса кейемде кейеһе һәм балаларына кейҙергеһе, бөтә халыҡҡа милли байлыҡ тип тапшырғыһы килә. Йәштәргә тәмле ашамлыҡтары менән бергә аҡыллы уй-кәңәштәрен дә тапшырырға теләй улар. Был юлы ла һәр ризыҡ тәмләгән саҡта бер аҡыл ебен үткәреп ҡалды улар йәштәрҙең хәтер күҙәүенә - "киләсәктә бер кәрәкмәһә, бер кәрәгер", тинеләр.

Биш минутлыҡ ялдан һәм музыкаль күстәнәстән һуң, ағинәйҙәр менән йәштәр тәрбиә темаһына һөйләшеүгә күсте, мөхәббәт тураһында һүҙ сыҡҡас, барыһы ла айырыуса йәнләнде. Студенттар араһында тормош иптәше һайлау тураһындағы йыш ҡына белем алыу менән йәнәш бара. "Уҡыйбыҙ, тип кейәүгә сыҡмай, өйләнмәй ҡалмағыҙ. Ваҡытында кейәүгә сығығыҙ, кәләш алығыҙ",- тине уларға ағинәйҙәр. Йәштәр ихлас ризалашты. Артабанғы кәңәштәр ҙә уларға тәбәлгәйне:

"Кейәүгә сығыу йә кәләш алыу мәле - никах сәғәте һәр кем өсөн изге, мөһим ваҡиға. Ныҡлы ғаилә ҡороу өсөн беренсе нәүбәттә нимә кәрәк, мөхәббәтме, байлыҡмы, характер-холҡмо? Ҡыҙҙар егеттәрҙән һөйөү һәм тоғролоҡ көтә, егеттәр ҡыҙҙарҙан наҙ һәм мөхәббәт өмөт итә. Ғаилә тотҡаһы - сабырлыҡ. Сабырлыҡ тигән мәңгелек хазинаны улар ҡайҙан ала? Сабырлыҡты белмәгәнгә тормошта бик ҡиммәт түләргә тура киләсәк..."

"Туйҙарығыҙҙы үткәрергә ваҡыт етер, хәйерле сәғәтте килһен никах көнөгөҙ. Ул мәлдә хөрмәт итегеҙ, матур йолаларҙы белегеҙ. Белмәһәгеҙ, ағинәйҙәргә әйтегеҙ, оялып тормағыҙ, ололарға мөрәжәғәт итегеҙ, улар һеҙҙе өйрәтергә бурыслы..."

"Ҡәйнә-ҡайныларығыҙ менән бергә йәшәп алырға тырышығыҙ. Отпускыға улар янына ҡайтып, бер нисә аҙна йәшәгеҙ. Ярҙам итегеҙ, һөйләшегеҙ, шул саҡта тормош ҡорған кешегәҙҙе ныҡыраҡ аңларһығыҙ, уның әлегә һеҙгә аңлашылмаған яҡтарын асыҡларһығыҙ, уны тағы ла ныҡыраҡ ярата башларһығыҙ. Сөнки яҡшы белгән нәмәне генә яратып була..."

"Егеттәргә ниндәй кәләш кәрәк, уны нисек күҙ алдына килтерәһегеҙ? Аҡыллы, тыйнаҡ, кешелекле булһын тиһегеҙ. Тағы ла матур булһын, мине тыңлаһын, тиһегеҙ. Дөрөҫ әйтәһегеҙ, ләкин ир-егет кәләшен тыңлата ла белергә тейеш. Туҡмап түгел, тиргәп түгел, яйын-көйөн табып ҡатыныңды ғаиләлә йәшәргә өйрәтеү - ирҙең бурысы. Бер кем дә әҙер ир, әҙер ҡатын алмай, һәр ғаиләлә бер-береһенә өйрәнеү һәм яйлашыу бара. Яңынан тәрбиәләү түгел, ә хөрмәт менән өйрәтеү, ҡабул итеү бара..."

"Минең улым мәрйә ҡыҙын алмаҡ булды, ҡаршы төштөм. Үҙемә ҡыйын, нишләргә? Улымды бәхетһеҙ итеп ҡуймайым, тип ҡуркам. Ләкин ул ҡыҙ үҫкән ғаиләлә башҡа милләтте ҡабул итмәйҙәр, тип ишеттем. Шуға мин улымды ул "тамуҡҡа" тыҡҡым килмәне, ваҡытында йырағыраҡ китһен, тинем. Дөрөҫ эшләнемме, юҡмы? Бындай ваҡытта үҙегеҙҙе ғәйепләмәгеҙ, Хоҙай Тәғәлә һәр ваҡыт берәй мөмкинлекте кешенең алдына сығара, һеҙ үҙегеҙгә хәүефһеҙ юлды һайлағанһығыҙ икән, үкенергә ярамай, үкенергә яҙмаһын..."

Йәштәр йотлоғоп тыңлай. Ағинәйҙәр үҙ тормош тәжрибәһе менән уртаҡлаша...

"Шәхестәр янында яҡын йөрөгөҙ, йәштәр, өйрәнеп йөрөгөҙ. Беҙҙең Сибайҙа ла бар бөтә республикаға билдәле шәхес өлгөләре..."

"Йәштәрҙең башына төрлө уй-хыялдар күп инә. Фекерҙәрегеҙгә иғтибар итегеҙ, уларҙы байытығыҙ, кешеләр менән, халҡығыҙ менән уртаҡлашып өйрәнегеҙ. Интернетта аҙышыу бындай аралашыуҙы киңәйтә, үҫтерә, ләкин интернет һурып торған энергияғыҙҙы теләһә ниндәй темаға әрәм итмәгеҙ..."

"Иғтибар итегеҙ, милли биҙәктәребеҙ бөгөн күҙ алдында. Һәр биҙәк, орнаментта оло мәғәнә ята. Таҫтамалдағы, аҫалы балаҫтағы орнаменттар уҡыла, уларҙың мәғлүмәт тапшыра торған "теле" бар. Был белем һәр кешегә, һәр ғаиләгә һәм ырыуға тоҫҡалған, уға ғына күсергә тейешле донъяуи мәғлүмәт. Орнаменттарҙы яңыса заманса ҡараш менән өйрәнерлек йәш этнографтар, ғалимдар кәрәк. Уҡығыҙ, этнографтар булығыҙ..."

**Шулай итеп, ағинәйҙәр һөйләне, ә йәштәр тыңланы. Сибай институтында уҡыған йәштәребеҙҙең шулай аңлы, рухлы, ололар нәсихәтен дә күңеленә һеңдерә торғандарҙан икәненә тағы бер тапҡыр инандыҡ. Йәштәр һәм ағинәйҙәр сыр-сыу килеп сәй эсеп ҡалды, беҙ артабан юлландыҡ. Хуш, Сибай! Хуш, йәшлекле һәм ағинәйле ҡала!**

**Сәрүәр СУРИНА.**

*ЙӘН ӘРНЕҮЕ*

# ЭТ ДУҪ ҠЫНА ТҮГЕЛ



**Хәтәр дәүерҙә йәшәйбеҙ. Интернет аша әллә күпме яңылыҡ ишетәбеҙ, ваҡиғалар шаһиты булабыҙ. Мине һуңғы ваҡытта аптыратҡаны шул: кешеләр берәҙәк эттәрҙе, бесәйҙәрҙе яҡлап бер була. Хатта был юҫыҡта закондар ҙа ҡабул ителә. Ә кешене кем йәлләр? Эт, бесәйҙән ауырыу йоҡторған кешеләрҙе кем ҡурсалар?**

Күп йылдар ветеринар булып эшләнем. Шуға ышаныслы әйтәм: эт-бесәй - йоғошло сир таратыусы хайуандар. Етмәһә, һуңғы ваҡытта эттәрҙән таланған балалар хаҡында ла күп ишеттек.

Эттәрҙән ауырыу төрлө юл менән күсә. Мәҫәлән, йөнөнән. Һыйпаның икән, кешегә ҡысынма, лишай, демодекоз ауырыуҙары тыуҙыра торған һәр төрлө паразит йоға. Икенсе юлы - эттең шайығы аша туберкулез, гельминтоз, токсоплазмоз, лептоспироз, лямблиоз, ҡоторҙоҡ сире эләгеүе ихтимал. Паразит һәм вирустар аҙыҡ аша ла йоға. Әлбиттә, өлкән кеше эт мискәһенән алып аҙыҡ ашамаҫ. Әммә бер ни аңламаған бала өсөн был ерәнеү тыуҙырмай.

Эттең ҡаны. Дүрт аяҡлы дуҫығыҙ йәрәхәтләнһә, уның яраһын бәйләйһегеҙ йә ике эт һуғышып киткәндә - айырағыҙ, ти. Шул саҡ уның ҡаны хәүеф тыуҙыра ла инде.

Шулай уҡ йыш ҡына эттәрҙән кешегә эхинококкоз йоға. Был таҫма ҡорт бик ҡурҡыныс. Кешегә генә түгел, башҡа йорт хайуандарына ла күсә ул. Мал һуйғанда ярты үпкәһе юҡҡа сыҡҡан һарыҡтарҙы осратҡаным булды. Эсәк-ҡарынында йөҙәм шәлкемеләй булып ҡорт ятҡанын да күрҙем. Ошо ҡорттан үлеп ҡалған, инвалид булып ҡалған таныштарым да бар. Бер ирҙе оҙаҡ йылдар рактан дауаланылар. Ысынында, яман шеш түгел, эхинококкоз булып сыҡты.

Нимә эшләргә һуң? Законды ҡәтғиләштерергә! Эт тотҡан кешеләрҙән яуаплылыҡ талап итергә, этен сығарып ебәрһә, штраф һалырға. 21-се быуатта йәшәйбеҙ, һәр кемдең этенә микрочип ҡуйып булмаймы икән ни? Аҙаҡ шунын аша хужаһына яза бирергә мөмкин. Ә әлегә берәҙәк эттәрҙе атыуҙан башҡа сара ҡалмай. Шулай уҡ эт тотоусылар дүрт аяҡлы дуҫын даими бағып, прививка эшләтеп торорға, бауҙан ысҡындырмаҫҡа бурыслы. Эйе, атып бөтөргә тигәндә, күптәр шау-шыу ҡуптарыр, йөрәкһеҙ, ҡаты бәғерле, тиер... Мин дә йәлләйем уларҙы. Шулай ҙа таланған, ауырыған кешеләр ныҡыраҡ йәл. Эт дуҫ ҡына түгел шул...

**Фәйзрахман УСМАНОВ.**
**Баймаҡ районы.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ҠУРҠЫУҘЫ ҺӘМ БОРСОЛОУҘЫ ЕҢЕҮ

Ҡурҡыу тойғоһо элек-электән булған. Атай-олатайҙарыбыҙ күк күкрәүенән һәм йәшендән, ырағай хайуандарҙан һәм бер-береһенән ҡурҡҡан.

Нух ныҡ ҡурҡыуҙан кәмәһенең ситенә менеп баҫҡан. "Ҡурҡыу" һүҙе Библияла дүрт йөҙ тапҡырҙан ашыу ҡабатлана. Халыҡтар үҙ-ара һуғыша башлағас, донъя талаштартыш киңәйеүҙән ҡурҡа. Ә ҡалған ваҡытта беҙ менәрләгән ҙур һәм ваҡ нәмәләрҙән, шулай уҡ үҙ-үҙебеҙҙән, көндәлек тормошобоҙҙа килеп тыуған хәлдәрҙән ҡурҡабыҙ. Яҡты донъяға тыуғанда беҙ ике ҡурҡыу тойғоһо менән генә тыуғанбыҙ: йығылыу алдында ҡурҡыу һәм көслө тауыштан ҡурҡыу. Ҡалған ҡурҡыуҙарҙы беҙ үҙебеҙ уйлап тапҡанбыҙ.

Ҡурҡыуҙың ҡиәфәте күп төрлө. Тоташ, ябыҡ аралыҡтан ҡурҡыу - клаустрофобия, асыҡ аралыҡтан ҡурҡыу - агорафобия, бесәйҙәрҙән ҡурҡыу - айлурофобия, бейеклектән ҡурҡыу - акрофобия, һыуҙан ҡурҡыу - гидрофобия, ҡараңғылыҡтан ҡурҡыу - ноктофобия һәм, ахыр килеп, бөтәһенән дә иң насары - уңышһыҙлыҡтан ҡурҡыу.

Ҡурҡыу - ул үҙ-үҙеңдә тулы ышаныс булдырырға матаашҡанда үлемесле тәьҫир итеүсе деструктив тойғо. Әгәр ҡурҡһаң, ыңғай фекерләй алмайһың, ә уңышҡа өлгәшеү юлында был бит иң мөһиме.

Төп иғтибарыңды уңышһыҙлыҡҡа йүнәлтеп, һин үҙеңде еңелеүгә дусар итәһең. Уңышһыҙлыҡ сценарийы даими ҡабатлана. Уңышһыҙлыҡтарың һәм, ғөмүмән, үҙеңдең уңышһыҙ кеше булыуың хаҡында көнөнә нисә тапҡыр уйлайһың? Кеше менән һөйләшкәндә лә үҙеңде уңышһыҙ тип атайһыңмы? "Ниндәй уңышһыҙ кеше булдым мин", "мин бер нәмәне лә кәрәгенсә эшләй алмайым", "белемем етеңкерәмәй" йәки "йәмһеҙмен шул" тип уйлағаның бармы?

Бала саҡта алған тәрбиә менән бергә ошондай кире уйҙар һине булған мөмкинлектәреңә "мин булдыра алмайым" тип яуап бирергә мәжбүр итә.

Ҡурҡыуҙан нисек ҡотолорға һуң? Аҡылыңды ыңғайға көйләү һинә ҡурҡыуыңды еңергә ярҙам итәсәк. Ҡурҡыуҙан ҡотолоу үҙең хаҡында ыңғай фекерләүҙән башлана. Шуны бел: һинең эсеңдә юлыңды сикләүсе бөтә нәмәне еңергә һәләтле Көс бар. Үҙ фекереңде ныҡытыу өсөн ыңғай раҫлауҙарҙы файҙалан, шул саҡта зиһенең уларҙы факт булараҡ ҡабул итеп, ҡурҡыу урынына ҡуясаҡ.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**



## 3 МАЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро".
10.00 Новости.
10.15 "На дачу!" с Наташей Барбье. [6+]
11.15, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
13.55 Д/ф "Александр Панкратов-Черный. По законам военного времени". [16+]
15.20 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. [12+]
16.50 Т/с "Ничто не случается дважды". [16+]
21.00 Время.
21.20 Т/с Премьера. "По законам военного времени. Победа!" [12+]
23.20 Премьера сезона. "Док-ток". [16+]
0.20 Вечерний Ургант. [16+]
1.10 Д/ф "Война священная". [12+]
2.00 Наедине со всеми. [16+]
2.45 Модный приговор. [6+]
3.35 Давай поженимся! [16+]
4.15 Мужское / Женское. [16+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Дочь Агидели". [12+]**
**9.00, 14.15 Үткән гүмер. [12+]**
**9.30, 23.00 Күстәнәс. [12+]**
**10.00, 0.00 Т/с "Сын отца народов". [16+]**
**11.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**11.45 Специальный репортаж. [12+]**
**12.00 Праздник Весны и Труда. [12+]**
**13.15 "Гора новостей". [6+]**
**13.30 "Взлетай! " Репортаж с Третьего форума школьного образования. [6+]**
**13.45 Бирешмә. Йырла. [6+]**
**14.45, 5.00 "Бай". [12+]**
**15.15 Әлләсе... [6+]**
**16.00 Концерт группы "Каравансарай" - 30 лет. [12+]**
**18.15 "Пофутболим?" [12+]**
**19.00 "Мосты". Творческий вечер заслуженной артистки РБ Гульшат Гайсиной. [12+]**
**21.00 Тайм-аут. [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Юбилей Уфимской городской башкирской гимназии №20 им.Ф.Мустафиной. [6+]**
**23.30 Топ 5 клипов. [12+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Сваха". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 4 МАЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро".
10.00 Новости.
10.15 "На дачу!" с Наташей Барбье. [6+]
11.15, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
13.55 Д/ф "Игорь Николаев. "Я люблю тебя до слез". [16+]
16.30 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. [12+]
18.00 Т/с "Ничто не случается дважды". [16+]
21.00 Время.
21.20 Т/с Премьера. "Неопалимая Купина". [16+]
23.20 Премьера сезона. "Док-ток". [16+]
0.20 Вечерний Ургант. [16+]
1.10 Д/ф "Правдивая история. Тегеран-43". [12+]
2.00 Наедине со всеми. [16+]
2.45 Модный приговор. [6+]
3.35 Давай поженимся! [16+]
4.15 Мужское / Женское. [16+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 0.00 Т/с "Сын отца народов". [16+]**
**11.00 Истории в табличках. [6+]**
**11.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.45, 18.00 "100 шагов на войне…." Отрывки из военной прозы башкирских писателей. [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 "Дорога к храму". [0+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Юбилей Уфимской городской башкирской гимназии №20 им.Ф.Мустафиной. [6+]**
**15.45 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 Д/ф "Весна 45-го". [12+]**
**17.30 "Времечко".**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.45 Генеральная уборка. [12+]**
**21.00 Детей много не бывает. [6+]**
**22.00 Тормош. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Моя звезда". [12+]**
**5.00 Автограф. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 5 МАЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро".
10.00 Новости.
10.15 "На дачу!" с Наташей Барбье. [6+]
11.15, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
13.55 Д/ф "Александр Ширвиндт. Ирония спасает от всего". [16+]
16.30 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. [12+]
18.00 Т/с "Ничто не случается дважды". [16+]
21.00 Время.
21.20 Т/с Премьера. "Неопалимая Купина". [16+]
23.20 Д/ф Премьера. "Наполеон: Путь императора". К 200-летию со дня смерти. [12+]
1.00 Д/ф "Правдивая история. Тегеран-43". [12+]
1.50 Наедине со всеми. [16+]
2.35 Модный приговор. [6+]
3.25 Давай поженимся! [16+]
4.05 Мужское / Женское. [16+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 0.00 Т/с "Сын отца народов". [16+]**
**11.00 Истории в табличках. [6+]**
**11.15 "Краски войны". [12+]**
**11.45, 17.00 "100 шагов на войне…." Отрывки из военной прозы башкирских писателей. [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 "Аль-Фатиха". [0+]**
**15.00, 17.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "Апчхи". [0+]**
**15.30 "Сулпылар". [0+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 Тайм-аут. [12+]**
**17.30 Министерство правды.**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.45 "Честно говоря". [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байык-2021". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Песнь о любви". [12+]**
**5.00 "Аль-Фатиха". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 6 МАЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро".
10.00 Новости.
10.15 "На дачу!" с Наташей Барбье. [6+]
11.15, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
13.55 Д/ф "Любовь Успенская. Почти любовь, почти падение". [16+]
16.30 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. [12+]
18.00 Т/с "Ничто не случается дважды". [16+]
21.00 Время.
21.20 Т/с Премьера. "Неопалимая Купина". [16+]
23.20 Большая игра. [16+]
0.20 Вечерний Ургант. [16+]
1.10 Д/ф "Война и мир Даниила Гранина". [16+]
1.55 Наедине со всеми. [16+]
2.40 Модный приговор. [6+]
3.30 Давай поженимся! [16+]
4.10 Мужское / Женское. [16+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 0.00 Т/с "Сын отца народов". [16+]**
**11.00 Истории в табличках. [6+]**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30, 5.00 Автограф. [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Бирешмә. Профи. [12+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 "Автомобили Второй мировой". [12+]**
**17.30 "Времечко".**
**18.00, 4.45 "100 шагов на войне…." Отрывки из военной прозы башкирских писателей. [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**21.00 Башкорттар. [6+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 "Ете егет". [12+]**
**23.45 История одного села. [12+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Между небом и землей". [12+]**

## 7 МАЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро".
10.00 Новости.
10.15 "На дачу!" с Наташей Барбье. [6+]
11.15, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
13.55 Д/ф "Михаил Танич. Не забывай". [16+]
16.30 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. [12+]
18.00 Т/с "Ничто не случается дважды". [16+]
21.00 Время.
21.20 Т/с Премьера. "Неопалимая Купина". [16+]
23.20 Вечерний Ургант. [16+]
0.15 Х/ф "Довлатов". [16+]
2.15 Наедине со всеми. [16+]
2.55 Модный приговор. [6+]
3.45 Давай поженимся! [16+]
4.25 Мужское / Женское. [16+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 16.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 0.00 Т/с "Сын отца народов". [16+]**
**11.00, 18.00 Истории в табличках. [6+]**
**11.15, 21.00 "Йома". [0+]**
**11.45 "100 шагов на войне…." Отрывки из военной прозы башкирских писателей. [12+]**
**12.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**12.30 "Краски войны". [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30, 5.00 Үткән гүмер. [12+]**
**14.00 "Красная кнопка". [16+]**
**15.00 Торжественное собрание и праздничный концерт, посвященные Дню Победы.**
**16.45 "Гора новостей". [6+]**
**17.00 Д/ф "Огненный танкист". [12+]**
**17.45 "100 шагов на войне…." Отрывки из военной прозы башкирских писателей. [6+]**
**18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**19.00 "Башкорт йыры-2021". [12+]**
**19.45 История одного села. [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**22.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**23.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**23.30 "Пером и оружием". [12+]**
**2.15 Спектакль "Красный Паша". [12+]**
**5.30 "Млечный путь". [12+]**

## 8 МАЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Умницы и умники. [12+]
9.45 Слово пастыря. [0+]
10.00 Новости.
10.15 "На дачу!" с Наташей Барбье. [6+]
11.10 Д/ф "Василий Лановой". [16+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Д/ф "Леонид Быков. "Арфы нет - возьмите бубен!" [16+]
13.20 Х/ф "Они сражались за Родину". [0+]
16.20 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. [12+]
17.50 Песни Великой Победы. [12+]
19.35 "Поле чудес". Праздничный выпуск. [16+]
21.00 Время.
21.20 Сегодня вечером. [16+]
0.00 Х/ф "На войне как на войне". [12+]
1.35 Х/ф "Время собирать камни". [16+]
3.05 Наедине со всеми. [16+]
3.50 Д/с "Россия от края до края". [12+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [12+]**
**8.45 История одного села. [12+]**
**9.00 Күстәнәс. [12+]**
**9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**10.00 "Физра". [6+]**
**10.15 "Выше всех!" [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Книга сказок". [0+]**
**11.00 "Сыйырсык". [6+]**
**11.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**11.30 Автограф. [12+]**
**12.00, 5.45 "Алтын тирмә". [0+]**
**12.45 Д/ф "Жизнь после смерти". [12+]**
**13.15, 19.15, 4.45 "100 шагов на войне…." Отрывки из военной прозы башкирских писателей. [12+]**
**13.30 Башкорттар. [6+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Д/ф "Эвакогоспиталь". [12+]**
**16.30 Концерт заслуженного артиста РБ Марселя Кутуева. [12+]**
**19.00 "Вклад в Победу". [12+]**
**19.30, 22.00 Яңы моң. [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.30, 1.45 Новости недели (на баш.яз.).**
**23.15 "Весна Победы". Концерт. [12+]**
**0.00 Т/с "Сын отца народов". [16+]**
**2.30 Спектакль "Суд матери". [12+]**
**4.15 Д/ф "Чума. Хроники Третьего рейха". [12+]**
**5.00 Д/ф "Конная гвардия: умирает, но не сдается…" [12+]**

## 9 МАЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.00, 11.50 Новости.
5.10 "День Победы". Праздничный канал.
9.30 Х/ф "Офицеры". Легендарное кино в цвете. [6+]
12.00 Москва. Красная площадь. Парад, посвященный Дню Победы.
13.00 Новости (с субтитрами).
14.00 "Офицеры". Концерт в Кремле. [12+]
15.10 Х/ф "Диверсант. Крым". [16+]
18.35 Х/ф Премьера. "Подольские курсанты". [16+]
21.00 Время.
21.35 Х/ф "В бой идут одни "старики". [12+]
23.05 Концерт Елены Ваенги "Военные песни". [12+]
0.15 Х/ф "Жди меня". [12+]
3.40 "Наедине со всеми". [16+]

### БСТ

**7.00 "С праздником Великой Победы!" Концерт. [12+]**
**7.45, 16.00, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**8.00, 11.15, 11.45 "С Днем Победы!"**
**10.00 Парад Победы, посвященный 76-летию Победы в Великой Отечественной Войне.**
**11.30, 21.30 Новости (на рус. яз.).**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.15 Д/ф "Соловецкие юнги". [6+]**
**16.15, 22.00, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**16.30 Истории в табличках. [6+]**
**17.00, 19.00 "Башкорт йыры" представляет… [12+]**
**18.55 Светлой Памяти павших в борьбе против фашизма. Минута молчания.**
**21.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.15, 23.45 "100 шагов на войне…." Отрывки из военной прозы башкирских писателей. [12+]**
**22.55 Праздничный салют.**
**23.00, 4.15 Д/ф "Последняя высота". [12+]**
**0.00 Х/ф "Молодая гвардия". [12+]**
**1.45 Спектакль "Шаймуратов генерал". [12+]**
**3.45 Историческая среда. [12+]**
**4.45 "Млечный путь". [12+]**

ПРОВОДИТСЯ НАБОР ОХРАННИКОВ
Районы работы: **ДЕМСКИЙ, ЦЕНТР, ЗЕЛЕНАЯ РОЩА**
График работы - сутки через двое
**Заработная плата от 18 000 руб.**
Телефон: **8 (937) 475-16-75**

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**4, 5, 6 май "...Ат уйнатып алдан бара..."** (З. Бураҡаева). 14.00 12+
**5 май "Амеля"** (А. Балгазина, Н. Крашененников). 19.00 12+
**6 май "Мөхәббәт ҡоштары"** (И. Йомағолов), музыкаль комедия. 16+
**7 май "Рөстәмдең сере"** (Ғ.Ҡотой, С. Баженова). 12.00 6+
**"Эҙләнем, бәгерем, һине"** (Т. Миннуллин), мелодрама. 12+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**4 май "Көт мине..."** Бөйөк Еңеүгә арналған концерт. 6+
**5 май "Билдәһеҙ һалдат"** М. Кәрим шиғырҙарына кантанта. 6+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**8 май "Живи!"** (Р. Сванидзе), 12.00, 14.00 6+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**3 май "Три богатыря и "Соловей-разбойник"** (А. Зарипов), әкиәт. 12.00 0+
**6 май "Әлепле артистары"** (Аманулла), комедия. 12+
**7 май "Биғылый"** (С. Ильясов), булған хәл. 12+

### Сибай театр-концерт берекмәһе

**6 май "Еңеү яҙы"** концерт. 6+

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1442 һижри йыл.*

| Май (Рамаҙан) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ахшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 3 (21) дүшәмбе | 4:05 | 5:35 | 13:30 | 19:22 | 20:52 | 22:22 |
| 4 (22) шишәмбе | 4:03 | 5:33 | 13:30 | 19:24 | 20:54 | 22:24 |
| 5 (23) шаршамбы | 4:00 | 5:30 | 13:30 | 19:26 | 20:56 | 22:26 |
| 6 (24) кесе йома | 3:58 | 5:28 | 13:30 | 19:28 | 20:58 | 22:28 |
| 7 (25) йома | 3:56 | 5:26 | 13:30 | 19:30 | 21:00 | 22:30 |
| 8 (26) шәмбе | 3:55 | 5:25 | 13:30 | 19:31 | 21:01 | 22:31 |
| 9 (27) йәкшәмбе | 3:53 | 5:23 | 13:30 | 19:33 | 21:03 | 22:33 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

✓ *Аллаһ рәсүле Ғәйшәгә Ҡәҙер кисендә киләһе доғаны әйтергә кәңәш иткән: "Аллаһүммә, иннәкә ғәфүүн, түхиббүл ғәфүә, фәғфү ғәнни!" - "Аллаһым! Ысынында, һин - Ғәфү Итеүсе, һин ғәфү итергә яратаһың, мине ғәфү итсе!*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# БАШҠОРТ УҘАМАНЫ КӘСЕПТӘРЕ




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнә.

**17-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Атама. Евразия. Ҡармаҡ. Африка. Аҫрау. Ыҙан. Тамада. Анар. Ренессанс. Өҙөк. Ауыл. Аҙау. Иҙриси. Аршын. Таҡыя. Тибр. Кама. Урама. Яҡут. Атыш.

**Вертикаль буйынса:** Америка. Ҡырсынташ. Улус. Ант. Етем. Ихтыяр. Аҡыл. Турһыҡ. Утрау. Аса. Рота. Ҡанун. Ҡоҙа. Афина. Мышы. Австралия. Фа. Өйрәк. Иена. Антарктида.

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# ҠӘҘЕР КИСЕ



**Ҡәҙер кисе - йылдың иң яҡшы кисе. Йәғни, Ҡәҙер кисендә намаҙ ҡылыу, Ҡөрьән уҡыу, Аллаһты зекер итеү һәм бүтән ғибәҙәттәрҙе үтәү башҡа мең айҙа, йәғни 80 йыл ҡылынған ғибәҙәттәрҙән дә өҫтөн.**

Хәҙис һәм риүәйәттәрҙә был кис рамаҙан айының һуңғы ун тәүлегенең таҡ төндәренә тура килеүе мөмкин, тип әйтелә һәм Мөхәммәт бәйғәмбәр ҙә шулай тигән: "Ҡәҙер кисен һуңғы ун төндә көтөгөҙ - йә туғыҙ, йә ете, йә биш көн ҡалғас". Тимәк, был юлы ла Ҡәҙер кисен рамаҙан айының 27-се кисәһенән эҙләргә кәрәк була. Әммә был фараз ғына, сөнки кисә айҙың ҡайһы көнөнә тура килеүе аныҡ ҡына билдәле түгел. Ҡәҙер кисәһенең билдәләренә килгәндә, Бәйғәмбәребеҙ әйткәндәрҙән тыш, был кис нурлы, тымыҡ, йылы, елһеҙ булыр, яуым-төшөм булмаҫ, тигән мәғлүмәттәр ҙә еткерелгән. Ул кистә һауанан йондоҙҙар атылмаҫ, һыуҙар татлы булыр, тип тә яҙылған.

Ҡөрьән рамаҙан айының Ҡәҙер кисендә инә башлаған. "Әл-Бәҡара" сүрәһенең 185-се аятында был турала: "Рамаҙан айында кешеләргә ҡулланма өсөн һәм тура юлды аңлатыу һәм дөрөҫлөк менән ялғанды айырыу өсөн Ҡөрьән индерелде", - тиелә. Ҡәҙер кисе бер йыл эсендә байрамдарҙың иң олоһо һәм Аллаһы Тәғәләнең әмере менән ер йөҙөнә фәрештәләр инеп, бәндәләрҙең гонаһтары ярлыҡауын теләп йөрөйәсәктәре тураһында Ҡөрьәндә "Әл-Ҡәдр" (Ҡәҙрәт) сүрәһендә зекер ителә. Ул кисәлә ер йөҙө Аллаһы Тәғәләнең рәхмәте менән ҡапланып, бәндәләрҙең гонаһтары ярлыҡаныу кисе. Аллаһ рәсүле Ғәйшәгә Ҡәҙер кисендә киләһе доғаны әйтергә кәңәш иткән: "Аллаһүммә, иннәкә ғәфүүн, түхиббүл ғәфүә, фәғфү ғәнни!" - "Аллаһым! Ысынында, Һин - Ғәфү Итеүсе, Һин ғәфү итергә яратаһың, мине ғәфү итсе!"

ЙӘШЕЛ ДАРЫУХАНА



# АҠТАМЫР

**Аҡтамыр (пырей ползучий) - күп йыллыҡ үҫемлек, май-июнь айҙарында төҫһөҙ сәскә ата, июль - сентябрҙә орлоғо өлгөрә.**

Аҡтамыр болон-яландарҙа, урман ситендә, баҡсаларҙа үҫә. Аҡтамыр республикабыҙҙа киң таралған үҫемлектәрҙән һанала. Дауалау өсөн үләндең тамырын иртә яҙ йәки көҙ ҡаҙып алырға кәңәш ителә. Әммә башҡа үҫемлектәрҙән айырмалы рәүештә, уны йәй дауамында ҡаҙып алып, ҡулланырға була. Һут өсөн булһа, үләне менән бергә йолҡорға һәм һыуыҡ һыуҙа яҡшылап йыуып, шунда уҡ ит турағыстан үткәреп, бер нисә ҡат марля аша һығып алырға кәрәк.

Халыҡ медицинаһында тамырһабаҡтан әҙерләнгән төнәтмәне (йәки ҡайнатманы) ашҡаҙан-эсәк сирҙәренән, үт ҡыуығында, бөйөрҙә һәм бәүел ҡыуығында таш барлыҡҡа килгәндә, дөйөм шешенгәндә, подагра һәм ревматизм кеүек сирҙәрҙән, һыуыҡ тейҙереп ауырығанда, тын алыу юлдары шешкәндә, тирләтеү өсөн, аналыҡтан ҡан килгәндә, дауамлы рәүештә сиҡан сығып йонсоҡанда ҡулланырға кәңәш ителә. Көҙ күреү һәләте өлөшләтә насарайған осраҡта үләндең яңы һығып алынған һутын йә йәш үлән төнәтмәһен йәй дауамында эсеү ярҙам итә. Ҡайһы бер белгестәр аҡтамырҙы хәтер тарҡалғанда, мейе ишемияһы, шәкәр диабеты, оло йәштә бәүел тота алмауҙан, остеохондроз ауырыуҙарын дауалауҙа ла файҙалы тип таба.

**Күҙ күреү һәләтләге.** Әле менәр йыл элек Әбүғәлисина аҡтамырҙың һутын һығып, бал йә шарапҡа ҡушырға (барыһы ла ауырлығы буйынса бер тигеҙ миҡдарҙа алына) һәм ҡалаҡ менән болғата-болғата бер төрлә ҡатышма килеп сыҡҡансы талғын утта 3-5 минут ҡайнатырға кәңәш итә. Һөҙөргә һәм көнөнә 3 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ эсергә, яҙҙан көҙгә тиклем дауаланырға. Был дауа һыналған, әммә уны 6 ай дауамында бер туҡтауһыҙ ҡулланырға кәрәк.

**Остеохондроз.** 3-4 ҡалаҡ яңы ҡаҙып алынған йәки киптерелгән үлән тамырына 1 литр һыу ҡойорға, ҡайнап сыҡҡас, утты йәйлатырға һәм яртылаш бешекләргә. Көнөнә 3 тапҡыр 100 мл - ярты стакан тирәһе эсергә. Был тоҙ алмашыныуына бәйле ауырыуҙарҙан дауалай.

**Үпкә туберкулезы.** 1 ҡалаҡ яңы йәки 2 ҡалаҡ киптерелгән тамырын 1 стакан һөткә һалып, 5 минут ҡайнатырға. Көнөнә 3 тапҡыр 1-әр стакан эсергә. Был башҡа төр сирҙәрҙән дә файҙалы.

**Бәүел тота алмау.** 1 ҡалаҡ ваҡланған тамырына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, ярты сәғәт ҡайнар һыу быуында тоторға, һыуытып, һөҙөргә. Стакандың өстән бер өлөшө итеп, көнөнә 3 тапҡыр эсергә. Ялҡауланмай ошо рәүешле дауаланыуҙы 2-3 ай дауам иткәндә, хроник циститтан арынырға һәм бәүел ҡыуығының сфинктерын нығытырға була.

**Шәкәр диабеты, ҡан баҫымы күтәрелеүе, нефрит, пневмония, цистит, ревматизм, үт ҡыуығында таш булғанда, һыҙлауыҡ баҫҡанда (фурункулез).** Организмда матдәләр алмашыуға, эске ағзалар шешеүенә бәйле башҡа ауырыуҙарҙы ла аҡтамыр ярҙамында дауалап булыу ихтимал. Сөнки уның шешкә ҡаршы, ҡанды таҙартыусы сифаттары бар. Бының өсөн үләндең 25 грамм тамырына 250 мл һыу ҡойоп, талғын утта 10 минут ҡайнатырға, 1 сәғәт төнәтергә һәм һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда 1-әр ҡалаҡ эсергә.

Аҡтамырҙы ниндәй осраҡтарҙа ҡулланырға ярамауы хаҡында мәғлүмәттәр юҡ. Шулай ҙа ҡан баҫымы түбәнәйеүе, киҫкен панкреатит, ашҡаҙандың яман шеш ауырыуы көсәйгән осраҡта ҡулланырға кәңәш ителмәй.

АФАРИН!

**Өфөләге башҡорт балалары туған телдә уҡырға ғына түгел, туған телдә йырларға, бейергә, ҡурай, ҡумыҙ, ҡыл-ҡубыҙҙа, башҡорт думбыраһында уйнарға ла теләй. Бының бәхәсһеҙ хәҡиҡәт икәненә беҙ әлеге сарала - Ленин районы башҡорттары ҡоролтайы ойоштորған Милли музыка ҡоралдарында уйнаусы балаларҙың I Өфө ҡала конкурсы мәлендә тағы бер тапҡыр инандыҡ.**

# ҠУРАЙСЫ БАЛАЛАР...

## баш ҡалала ла күп икән



Баш ҡалабыҙҙа атай-әсәйҙәрҙең, балаларҙың бындай хыялын, теләген тормошҡа ашырырҙай шарттар ҙа бар, тиергә мөмкин: тиҫтәләп башҡорт гимназия-лицейҙары эшләй, уларҙа ғына түгел, башҡа белем усаҡтарында ла, мәҙәниәт йорттарында ла башҡорт милли сәнғәте йүнәлешендә төрлө түңәрәктәр ойошторолған. Бына шул үҙ халҡының сәнғәтенә битараф булмаған, уның моң-көй ҡомартҡыһын үҙ иткән ҡурайсы, думбырасы, ҡыл-ҡубыҙҙа уйнаусы балалар ҡатнашты ла инде әлеге конкурста.

Бынан ике йыл элек Өфө башҡорттары ҡоролтайы ойошторолғас, уның составындағы ете район ҡоролтайҙарына баш ҡала кимәлендәге ете байрам-сара ойоштороу йөкмәтелгәйне. Пандемия ғәләмәте эште бер аҙға тотҡарлаһа ла, Калинин районы башҡорттары ҡоролтайы - "Башҡорт ғаиләһе" конкурсы, Октябрь районы ҡоролтайы Шәжәрә байрамы ойоштороп өлгөрҙө. Ленин районы башҡорттары ҡоролтайы өлөшөнә бына ошондай еңелдән булмаған бәйге тура килде. Ҡоролтай етәксеһе Әхиәт Ғәйетбаевтың Ә. Исҡужин исемендәге 9-сы Балалар сәнғәт мәктәбе директоры булыуы, әлбиттә, эште бер аҙ еңеләйтте. Мәктәп коллективы Ленин район хакимиәте башлығы Олег Котов, Өфө ҡала округы хакимиәтенең Мәҙәниәт һәм сәнғәт буйынса идаралығы етәксеһе Шамил Аптраков фатихаһы менән был эштең яуаплылығын үҙ өҫтөнә алды һәм йырып сыҡты. Афариндар, тиергә генә ҡала.

Конкурсты иғлан иткәндә әллә ни күп ҡатнашыусыларға өмөт ителмәгәйне. Әммә ойоштороусыларҙы аптыратып, ҡатнашырға теләүселәр бихисап булып сыҡты, хатта республика райондарынан да бәйгелә ҡатнашырға теләк белдергән хәбәрҙәр килеп етте. Улар араһынан Иглин менән Өфө райондарына ғына өҫтөнлөк биреп, 108 заявка бәйге программаһында теркәү үтте. Шулай итеп, был сара үҙенән-үҙе Асыҡ ҡала конкурсына әйләнде лә ҡуйҙы. Әйткәндәй, баш ҡала округы хакимиәтенең Мәҙәниәт һәм сәнғәт буйынса идаралығы начальнигы Шамил Аптраков был тәҡдимде яңғыратты ла инде: "Киләһе йыл конкурсты Асыҡ ҡала конкурсы итәсәкбеҙ",- тине ул. Асыҡ ҡала бәйгеһендә, тимәк, республика райондарынан да һәләтле балалар үҙ көстәрен һынай аласаҡ.

Эйе, былай тип ҡарар итер өсөн ерлек бар: шул тиклем күп балалар ҡатнашыуында ғына түгел әле хикмәт. Юлай Ғәйнетдинов етәкселегендәге баһалама комиссияһы ағзалары - Өфө сәнғәт институты уҡытыусылары Фирҙүс Шәрәфуллин, Венер Йылҡыбаев, Сабир Әбхәлимов был сараны ҡайһы бер республика конкурстарына ҡарағанда ла юғарыраҡ кимәлдә булды, тип баһаланы: "Бының сәбәбе лә билдәле: А.Ҡарасов, А. Байтимеров, И. Нәҙерғолов, В. Дәүләтбирҙин, Р. Мөләков һәм башҡа иң яҡшы музыка уҡытыусылары барыбер ҙә баш ҡалала тупланған, - тине Юлай Ғәйнетдинов. - Улар тарафынан бынан тиҫтә йылдар элек һалынған традициялар дауам иттерелә. Олораҡ быуын традицияларҙы кесе быуынға тапшыра, йәғни быуындар бәйләнеше өҙөлмәгән. Бына шуның өсөн дә юғары кимәлдә сығыш яһаны был бәйгелә ҡатнашыусы балалар..."

Был нимә тураһында һөйләй? Эйе, башта билдәләнеүенсә, баш ҡалабыҙ Өфөлә иң аңлы милләттәштәр йәшәй, улар балаларын ысынлап та йырлы, бейеүле, ҡурайлы быуын итеп тәрбиәләй. Улар, әлбиттә, балаларын быға саҡлы ла ҡала, республика кимәлендәге төрлө конкурстарҙа ҡатнаштыра килде. Ләкин ошондай дәррәү күтәрелеп үҙен таныта, талантын балҡыта торған үҙ конкурстарына - үҙе төйәк иткән баш йортонда ойошторолған бәйгегә барыбер ҙә ихтыяж бар ине.

Эйе, дәррәү килеүҙәре менән генә түгел, үҙенсәлекле сығыштары менән дә аптыратты балалар ҙа, уларҙың уҡытыусылары ла. Беҙ, ғәҙәттә, ҡурайҙа уйнаусының образын нисек күҙ алдына килтерәбеҙ? Эйе, ул туған телдә һөйләшеүсе, туған мөхиттә үҫеүсе, атай-олатай, әсәй-өләсәй ҡанаты аҫтында тәрбиәләнеүсе кеше. Баҡтиһәң, был моңға ғашиҡ башҡа милләт вәкилдәре һәм... ҡан хәтере аша килгән ауазды ҡабул итеүселәр ҙә күкрәгенә һалып ҡурайҙа уйнай ала икән. Валерия тигән һигеҙ йәшлек рус ҡыҙы, мәҫәлән, беҙҙе ошо һәләте менән аптыратты, хатта бәйгенең өсөнсө дәрәжә дипломына лайыҡ булды. Ә бына ҡурайҙа "Ашҡаҙар" көйөн шул тиклем оҫта башҡарған Суфия Нурлыева тигән ҡыҙыҡайға баһалама ағзалары беренсе урын бирҙе. Ә аҙаҡ билдәле булыуынса, ҡыҙ башҡортса аңламай ҙа, һөйләшә лә белмәй булып сыҡты. Ләкин күҙҙәрендәге оҫҡон был баланың башҡорт йырлы, башҡорт рухлы күңеленең бер сағылышы икәненә инандырҙы.

Ә ысын ҡурайсы образын, әлбиттә, бәйгенең төп бүләген - гран при алған егет һынландырҙы. Юлай Ғәйнетдинов уның тураһында ла телгә алып һөйләп торҙо: "Калинин районындағы 5-се музыка мәктәбенән Хәким Ғилманов исемле был егет, Айрат Ҡарасовтың уҡыусыһы, ололар өсөн үткәрелгән ҡурайсылар конкурстарында 7 йәшенән ҡатнаша. Октябрьский ҡалаһында үткәрелгән республика Ҡурай бәйгеһендә шулай уҡ беренсе урындарға лайыҡ булды..."

Әйткәндәй, ҡурайсы-уҡытыусы Айрат Ҡарасов был конкурсҡа "Сорнай" исемле ике ҡурайсылар ансамбле алып килгәйне: береһе, конкурста беренсе урын алғаны - З. Биишева исемендәге 140-сы Башҡорт гимназияһыныҡы, икенсе урынға лайыҡ булғаны - 2-се Башҡорт лицейы ансамбле. Ҡарас сәсән нәҫеленән булған Айрат Ҡарасов бына 20 йыл инде баш ҡала балаларын ошо ҡурайыбыҙ серҙәренә өйрәтә, үҙе лә күп бәйгеләр еңеүсеһе.

**Шулай итеп, бәйгенең төп шарты үтәлде: ҡатнашыусыларҙың һәләте абруйлы баһалама комиссияһы тарафынан үҙ баһаһын алды, улар төрлө дәрәжәләге дипломдарға, Өфө ҡала округы Мәҙәниәт һәм сәнғәт буйынса идаралығының, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының, Өфө башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының Рәхмәт хаттарына, бүләктәренә лайыҡ булды. Иң мөһиме, баш ҡала кимәлендә башҡорт милли музыка ҡоралдарында уйнаусы балалар өсөн ошондай айырым конкурс ойоштороу ихтыяжының хаҡ булыуы раҫҡа сыҡты.**

**Гөлбаныу ГӘРӘЕВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ТҮРӘ САҠТА - ТҮРҘӘ,

## түрҙән төшһә - күрмә

Ҡайта сапҡан буҙ яман, ҡайтып килгән ҡыҙ яман.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Алланан тормошонда еңелерәк итеүҙе һорама, Ул һине көслө булырға өйрәтһен - шуны һора.

**(Һинд халыҡ мәҡәле).**

Балағыҙҙағы шаянлыҡты баҫһағыҙ, уларҙан аҡыл эйәһе лә яһай алмаясаҡһығыҙ.

**(Жан-Жак Руссо).**

Бер ниндәй яңы нәмә лә юҡ, һеҙ уларҙың күбеһен онотҡанһығыҙ ғына.

**(Мария Антуанетта).**

Бөйөк кешеләрҙең фәкирлек менән көрәшеүен күҙәтергә ярата аллалар.

**(Роберт Бартон).**

Артыңа боролоп бер ҡарау етә: бәхет һинең артыңдан эйәреп йөрөгән бер күләгә икәнен күрерһең.

**(Фелипе Виллаеспеса).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер ир ҡатыны һәм балалары менән сүллек буйлап сәйәхәткә сыға. Улар бик оҙон юл үтә, һыу запастары бөтөп, сарсай башлайҙар. Бына уларҙың юлында ярым емерек бер өй пәйҙә була. Өй алдында ҡоҙоҡ барлығын шәйләп, бик шатлана ир кеше. Ҡоҙоҡтан һыу алырға эйелһә, күңеленә "Был һыу ағыулы" тигән уй килә. Әммә ир яҡындарын һыуҙан мәхрүм итә алмауын да аңлай, шуға ла күңел һиҙемләүен инҡар итеп, ҡоҙоҡтан һыу алып, ҡатынына һәм балаларына эсерә. Үҙе өсөн һыу алырға ҡоҙоҡҡа эйелгәндә иһә ғаилә ағзаларының ағыуланып, үлем менән көрәшкәнен шәйләп ҡала. Шунда ир кеше тубыҡланып, Хоҙайға үтенә башлай: "Йә Хоҙай, һинең иҫкәртеүеңде инҡар иткән өсөн ғәфү ит мине, ҡотҡар ғаиләмде, зинһар..."**

**Хоҙай уға шулай тип яуап бирә: "Мин һинең ҡатыныңды һәм балаларыңды ҡотҡара алам. Ләкин һин тәүҙә был хәлдән дөрөҫ һығымта яһарға тейешһең. Әгәр ҙә һин миңә, кеше ҡылыҡтарының иң яулап булмай торған сиге нимә, тигән һорауыма дөрөҫ яуап бирһәң, мин һинең яҡындарыңды ҡотҡарасаҡмын".**

**Яуабым яңылыш булып ҡуймаһын тип бик оҙаҡ уйлай кеше. Шунан ошолай тип яуап бирә: "Кеше бөтә ғүмере буйы тирәяғында әллә күпме кешеләрҙең үлемен күрә, әммә уларҙың хаталарынан һабаҡ алмай һәм үҙен мәңге йәшәйәсәк кеше һымаҡ тота - бына кеше ҡылығының иң яулап булмай торған сиге..."**

**Хоҙай бер ни ҙә әйтмәйенсә, ирҙең ҡатынын һәм балаларын терелтә. Ирҙең яуабы дөрөҫ була..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Сәрүәр СУРИНА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99, 246-03-24** |
| **Матбуғат таратыу** | **246-03-23** |

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
30 апрель 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3400
Заказ - 293/04